

*Барый НОҒОМАНОВ*

# ҒҮМЕРҘӘР БАЛҠЫШЫ

*Роман*

Әсә

Мөхәмәтшакир ағай менән Майкамал апайҙың ҡасандыр гөрләшкән йорто, бер нисә йылға һуҙылған тынлыҡтан һуң, тағы ла йәнләнеп китте. Яралы Мөхәмәтйәнде, ауыҙҙан өҙөп булһа ла, нисек тә яҡшыраҡ ашатырға, бер ярҡа утын да күтәртмәй ял иттерергә өтәләнде әсә. Ярай әле Ленинградтан килене ҡайтып төштө, ул да, табаны ергә теймәй, өй эшен теүәлләп кенә тора. Нурия бәләкәй кәмит инде, телен вата-емерә тәтелдәүен белә, нәнәй ҙә нәнәй тип, итәгенә йәбешә. Йомро-йомшаҡ баланы һөймәй нисек түҙерһең?

Кәшбелғилеме лә көн дә аҡһай-туҡһай әсә йортона килеп етә. Уға Зифа килен дә эйәрә, әлбиттә. Үҙҙәренең йорто бар барлыҡҡа, икеһенә күңелһеҙҙер инде, моғайын, әсәгә һыйыналар барыбер. Һигеҙ улы араһынан икеһе ҡайтыуы ла әсә хәсрәтен баҫа бер аҙ. Ләкин Кәшбелен, яралары уңала биреп арыулана төшкәс, киренән һуғышҡа алып киттеләр.

Майкамал апай ауылда мәртәбәлеге менән генә түгел, кешелеклелеге менән дә хөрмәт ҡаҙанған ҡатын. Бер бәрәңгеһен уртаға бүлер, бер һыныҡ икмәген һындырып бирер кеше икәнен бөтә ауыл халҡы белә.

Иртән апайҙың беренсе шөғөлө — һыйыр һауыу. Әлдә шул малҡайы бар — яралы Мөхәмәтйәнен, ейәнсәрен, киленен аҡтан өҙҙөрмәй, тейендерергә етерлек. Айырыуса бәләкәй балаға килешә, бер сеүәтә йылы һөттө быҙау шикелле һемерә лә ҡуя. Бите алһыуланып, таҙарып китте сабыйҙың.

Һауыу менән һөттөң бер сеүәтәһен Мәүлиҙә әхирәтенә йүгертә һала Майкамал. Сәлисәнең иҫәнлеге, иҫкән елдәй, юғала бара һаман. Шуға им өсөн тырыша ул. Йәлләй шул ҡыҙҙы Майкамал: сире арҡаһында ир төҫө күрмәй олоғайыу өҫтөндә. Арыуланһа, аҡһаҡ-сулаҡтың берәүһенә сығып, Мәүлиҙә дуҫҡайына ейән йәки ейәнсәр килтерер ине, бәлки. Һуғыштан ғәрипләнеп ҡайтыусы буйҙаҡ ир-ат арта хәҙер ауылда.

Ауыр йәшәй Мәүлиҙә. Тапҡаны яҙын — серек бәрәңге, ер йәшәргәс — үлән, көҙөн баҫыуҙа ҡалған башаҡты сүпләү, ҡышын — ырҙынында үҫтергән

Аҙағы.

бәрәңгеһен һаҡлап, көнөнә ике-өсәрҙе генә тотоноу. Бәрәсләмәгән бер генә кәзәһен ҡыштың бер кисендә, Мәүлиҙә күршеһенә генә кергән арала, соланынан урлап киткән кемдер, оңҡот. Тамағына һөйәге торғоро! Ҡыҙы түшәктә аңҡы-тиңке килеп ятҡас ни, бер нәмә лә һиҙмәгән. Шунан бирле һүҙ бирҙе үҙенә Майкамал: әхирәтенә ярҙам итергә.

Өйҙә килене кәрәк-яраҡты әҙерләй алғастын, Майкамал менән Мәүлиҙә китәләр эйәртенешеп ҡырға. Бөгөн дә сүмәләләре йыйып алынған арыш баҫыуына атланылар. Иҫәптәре — башаҡ йыйып ҡайтырға. Юл уңһа, ыуып, киптереп, ҡул тирмәнендә әйләндергәс, бер йомро икмәк, йәиһә тәбиә бешереп була. Ул саҡта көн буйы тамағың туҡ тигән һүҙ.

Башаҡ әллә ни күп булмаһа ла, эҙләгән кешегә табыла. Шул саҡлы матур килгәне көҙҙөң: сыуаҡ уйнай арҡаларҙы йылытып, атларға уңайлы — ер ҡоро, ҡояш нурына сағылып хатта монар уйнай! Баҫыуға төшкән пар торна шикелле, йәнәшә атлап, әй йыялар былар. Ҡайтҡас нимә бешерергә хыял итәләр. Тормош-булмыштарын һөйләшеп, түбәләре тапҡырына ҡояш тәгәрәп менеп еткәнен дә һиҙмәй ҡалғандар. Баҫып-тыңҡыслап бер биҙрә башаҡ йыйып алыуҙарына ҡыуанған мәлдә, ажғырып Әбделғәлим килеп сыҡмаһынмы һыбай!.. Ул баҫыуҙы һаҡларға беркетелгән, ашлыҡ өлгөрә башлағас, араһына инеп йәшенеп башаҡ ыуыусылар ҙа булғылай, шуға ҡарауылсы итеп ҡуйғандар уны. Баҫыуға кешенең һыйыр, быҙау кеүек малы керһә лә ул тотоп ат һарайына, йәки башҡа берәй ҡураға ябып ҡуя. Аҡсалата штраф түләп кенә кире алаһың.

Үкереп, ҡайыш сыбыртҡыһын шартлата-шартлата, быларға табан елдерә бит.

— Кем һеҙгә рөхсәт итте?! — тип ярһый, ҡанһыҙ бер әҙәм ул шулай.

Ҡойолдо ла төштө ике ҡарсыҡ. Ни тиергә лә белмәйҙәр, баҙап ҡалдылар. Майкамал зиһенен тиҙ йыя һалды.

— Башаҡ сүпләргә лә ярамаймы ни, барыбер ерҙә ятып серей бит, — тип әрепләшергә кереште.

— Ярамай. Бушатығыҙ биҙрәләрегеҙҙе!.. — Сыбыртҡыһын шартлатып ҡуйҙы ҡарауылсы.

— Яҙын йыйып, тағы кешеләрҙе ауырыуға һабыштырырға уйлайһығыҙмы ни? Яҙ башаҡтан ағыуланып, әллә күпме кеше сирләне бит. Хатта Миңлебикәнең ун йәшлек ҡыҙы башаҡ ағыуынан һәләк булғанын оноттоңмо? — Майкамал Әбделғәлимдең үҙенән дә яманыраҡ йәбеште.

Теге ҡолағына ла элмәй, бер һүҙҙе ятлағанмы ни:

— Ярамай, түгегеҙ!

Мәүлиҙә ҡарсыҡ инәлгәндәй, иләп кенә лә әйтеп ҡараны:

— Ҡыҙым йән бирергә етешеп, ныҡ ауырып ята, тәғәм ниғмәт ҡалманы өйҙә, зинһар өсөн, ошо йыйғанды ғына алып ҡайтайыҡ инде, Әбделғәлим туғаным.

— Мин һиңә ниндәй туған булайым ти, дөйөм эштә туған-тумасалыҡ юҡ ул! — тип йәнә тауышы менән таш ярҙы һыбайлы.

Мәүлиҙә үтә лә һуҡранды, йәне көйҙө.

— Тоҡомдары менән әҙәм ихтыяжын аңлай белмәгән бәндәләр инде улар. Быныһы, етмәһә, иҫәүәнерәк тә... Түгәйек, тығынһын, әйҙә, эсе шартлаған-сы... — Ҡарсыҡ, бар асыуына биҙрәһен һелтәп, тегенең өҫтөнә үк быраҡтырҙы башаҡтарын. Майкамал да әхирәтенән ҡалышманы.

— Кеше күңелен тырнап, үҙ күңелен байытҡан әҙәм ишараты икәнһең, энекәш. Кинән ике әбейҙе рәнйеткәнеңә, иманыңдан яҙған бәндә!

Улар биҙрәләрен һелтәп китеп барҙы. Үҙҙәре һаман Әбделғәлимде әрләй.

— Быныһына ла бер аҙ етешмәй, әҙәм рәүешле булһа, әрмегә алырҙар ине. Әзмәүерҙәй башы менән ҡалды бит итәки иҫәргә һалышып, — тип үҙе юҡта тетмәһен тетә Мәүлиҙә.

—Хәтереңдәлер, әхирәт, атаһы ла кешегә көн күрһәтмәҫ бер бай ине. Алма ағасынан алыҫ төшмәй инде ул. — Тегенең тоҡом тамырын аҡтарып, фиғел-холоҡтарын теҙҙе Майкамал.

Ике ҡарсыҡ, тормоштоң төбөнә төшмәй, айт тигәнгә тайт итеүселәр барлығын аңлап етмәй ине, күрәһең. Өҫтән, юғарынан, «ашлыҡтың бер бөртөгөн дә әрәм-шәрәм итмәҫкә, бөтәһе лә фронт өсөн!» тигән өндәмә ташланғайны. Ана шул юғарынан төшкән һүҙ урынға килеп еткәнсе кәкре таяҡҡа әйләнә, хатта ҡайыш сыбыртҡы ише шартлай. Төшөп ҡалған башаҡты тапаһалар тапанылар, кешегә йыйырға рөхсәт итмәнеләр. Игенде шул уҡ кешеләр игә ләһә... Аслыҡтан интеккән кеше ни эшләһен, берәүҙәр айырата хәүефле аҙымға ла бара. Быға Ғилминисаның яҙмышын алғанда ла иҫаҡыл китерлек.

Күрше ауылдан килен булып төшкәйне ул. Буласаҡ ире менән йәштән үк йәрәшеп, вәғәҙәләр бирешеп йөрөгәндәр. Һуғыш башланып бер йыл үткәс, йәше етеп, Даниярға ла фронтҡа китергә повестка бирҙеләр. Ауылда йөрөргә ике-өс көн генә ваҡыты ҡалған егеттең. Осҡан был һөйгәне янына, һөйләшеп килешкәндәр ҙә, алған да ҡайтҡан быны кәләш итеп әсәһе янына.

— Әсәй, бына һиңә килен. Мин уны яңғыҙ ҡалдыра алмайым, өйләнеп китәм һуғышҡа. Ярҙамсы булыр үҙеңә, туғандарыма, — тип әсәһенең фатихаһын алған.

Китте Данияр һуғышҡа. Килененән уңды әсә: әҙәпле лә, хәстәрлекле лә. Әле ҡул араһына ла инеп өлгөрмәгән ҡәйнеш-ҡәйнеһеңлеләрен ҡараны: мунсаны ул яғыр ине, өҫ-баштарын йыуҙы, бәрәңге утау, урмандан сыбыҡ-сабыҡ килтереү кеүек эштәргә лә күнектерҙе. Шул балаларҙы әсәй шикелле яҡын күргән еңгәй ине ул.

Оҙаҡламай үҙенең дә ҡыҙы тыуҙы. Килен күңеле — балыҡлы күл, бейемдеке — киң болон: өф-өф итеп кенә торҙо ейәнсәренә. Бер ай самаһы ваҡыт та үтмәне, Ғилминиса килен эшкә сыҡты keләткә, иген елгәрергә. Шунда, ҡыҙына һис юғында бутҡалыҡ тип, йәшереп, бер кеҫә иген алған бит, гонаһ шомлоғона ҡаршы. Тотҡандар йәш ҡатынды, кеҫәһен аҡтарып, өс-дүрт ус игенен кире түккәндәр. Шуныһы ла еткән дә бит, юҡ шул, ярандар судҡа биргән быны. Ауылға килеп, халыҡты йыйып, хөкөмдарҙар хөкөм сығарҙы: ун йылға иркенән мәхрүм итергә... Килен һөлдә хәлендә, ағарынып, ҡатты ла ҡалды. Ҡәйнә ҡаҡсалҡан тәгәрәп, сәстәрен йолҡоп илай. Ҡайнар күҙ йәше түгелеүгә күңел генә түгел, таш та ирер ине хатта. Уф!.. Шул ваҡыт Майкамал апай һикереп баҫты.

— Йәнегеҙ бармы һеҙҙең, бер кеҫә иген өсөн шул саҡлы хөкөм сығарырға? Балаһын һөйөп тә, әсәлек хисен тойоп та өлгөрмәгән ҡатын бит ул. Ҡотҡарығыҙ, Хоҙай хаҡына инәлеп әйтәм, алығыҙ ана минең кәзәмде уның өсөн, әрәм итмәгеҙ йәш баланы, — тип, әрней-әрней ялбарҙы.

Тыңлаусыларҙың башҡалары ла уға ҡушылды. Китте шау-шыу. Хөкөмдарҙар, энә өҫтөндә ултырған һымаҡ, һикереп-һикереп ала, прокурор, ҡулы менән һелтәнә-һелтәнә, тауышты көскә баҫты.

— Беҙ һәр урлашҡан кешенең башынан һыйпай башлаһаҡ, илебеҙ ниндәй көнгә төшөр? Енәйәтсене яҡлаған өсөн дә статья ҡаралған улайға китһә. Хөкөм хаҡлы сығарылды — бөттө шуның менән. — Йөҙөндә ҡыҙыллыҡ та сағылмаған прокурор боҙло һалҡын ҡарашын зал өҫтөндә йөрөттө.

— Дөрөҫ әйтә прокурор, ҡаты һабаҡ кәрәк башҡаларға. — Һауаны ярып, ҡарлыҡҡан тауыш яңғыраны. Был Әбделғәлим ине.

Уға сәнсеп ҡараны Майкамал. Сәсрәтеп ниҙер әйтергә уйлағайны апай, прокурорҙың һаман аяғөҫтө һерәйеп тороуын күреп, теш араһынан ишетелер-ишетелмәҫ кенә өндәште:

— Ауыҙыңдан ел алғыры!..

Ғилминиса меҫкенкәйҙе, ике яғынан ике милиционер һағында, ат санаһына ултыртып алып киттеләр.

Әле бына барыбер әрәм буласаҡ бер биҙрә башаҡ өсөн Әбделғәлимдең нисек ҡыланыуы суд ваҡытында Майкамалдың әйткән һүҙҙәренә яуап ҡайтарыуы түгел микән?.. Кешенең ҡара тәнен йыуып ағартып була, әммә эскерле күңеле барыбер шул килеш ҡала.

Буш биҙрәһен беләгенә элеп ҡайтып кергәс, Мөхәмәтйән бик хурланды.

— Башҡаса йөрөмә, әсәй, үҙеңде эт типкеһенә ҡуйып. Йәшәрбеҙ әле нисек тә. Бына мин дә һауығыу яғына барам, эшкә сығырға ла эшкинермен, алла бирһә! — тип тынысландырҙы улы.

— Миңә лә эш бирмәкселәр, әсәй. — Килене лә шатлығы барлығын белдерҙе. — Киләткә иген үлсәүсе итергә самалайҙар.

Сәсе хатта үрә күтәрелгәндәй әсәнең, әле генә Ғилминисаны хәтерләп ҡайтыуҙары таралып бөтмәгәйне.

— Уй, балам, аяҡ та баҫа күрмә унда, бәләһенән баш аяҡ. Башҡа ниндәй генә эшкә лә күнермен, тик унда түгел, — тип ҡәтғи тыйҙы Майкамал.

Кешене яңылышырға шайтан ҡоторта, был бала ла уйламаҫтан берәй keҫә иген алһа әгәр... Әсә шунан ҡурҡа ине.

— Эшләргә кәрәк миңә, әсәй, артыҡ тамаҡ булып ятҡым килмәй, — тип ныҡышты Әминә килене.

— Эшләрһең. Икенсе урында. — Яуап ҡыҫҡа ине.

Ысынлап та, киленгә икенсе эш тәҡдим иттеләр — почта ташырға. Теге ҡыҙ, хат-хәбәр түгел, ә ҡурғаштай ауыр күҙ йәштәре күтәреп йөрөтәм, тип һөйләнде-һөйләнде лә, Ташкент яғынан ҡунаҡҡа ҡайтҡан апаһына эйәреп сығып китте. Әминәне шул урынға ҡоҙалағас, әсә һыҡтанып ҡына ризалығын белдерҙе.

— Быныһы ла еңел түгел инде, — тине, теге ҡыҙҙың әсенгәнен күҙ алдына килтереп, — хәйер, еңел кәсеп юҡ хәҙер, заманы шулай.

— Сафам әйләнеп ҡайтҡансы ғына түҙермен. — Әминәнең район үҙәгенә тәүге китеүе ине.

Ул заманда ат осрағанда — арбала, осрамаһа, тәпәйләп ташыйҙар ине почтаны. Кисенә генә арманһыҙ булып әйләнеп ҡайтты Әминә. Хат тышындағы фамилияларҙы ҡарап, ҡәйнәһенән кем ҡайҙа йәшәгәнен һорашты ла таратты өйҙәр буйлап.

Килене эшкә керешкәс, тормош мәшәкәттәре Майкамал апайға тулыһынса өйөлдө. Туҡтауһыҙ утын хәстәрләргә кәрәк ине. Йәйен, ярай, өй йылытаһы юҡ, елкәгә йөкмәп килтергән ҡоро-һары ботаҡ та етә. Ҡышын инде утынға үртәлеүҙәр икеләтә арта. Китәләр Майкамал апай менән Мәүлиҙә урманға, бот төбөнәсә ҡар яра-яра. Ҡоро ағас табып, тупар балта менән шаҡ-шоҡ киҫергә тотоналар урманды яңғыратып. Бер барып ҡайттылар, ике, өсөнсөһөндә эләктерҙе бит урман ҡарауылсыһы быларҙы. Бик уҫал бер сыуаш кешеһе ине ул. Килде лә балталарын тартып алды, саналарын киҫкеләп ырғытты.

— Ҡороған ағас бит, шуны ла киҫергә ярамаймы ни? — тип ыңғырашты ике әбей.

— Сыбығына ла тейергә ярамай, урман — дәүләттеке. — Бик һауалы ҡыланды.

— Улым һуғыш инвалиды, бәләкәй бала бар.— Аңлатмаҡсы Майкамал. — Һалҡынға ҡорошоп туңһындармы ни улар?

— Минең ни эшем бар унда, теләһә ни эшләгеҙ, — тип, боролоп та ҡарамай, теге китеп барҙы.

— Туң йөрәк!.. — Ике әбей йоҙроҡ төйөп ҡалды артынан.

Урмансы күҙҙән юғалғас, беләк йыуанлыҡ ҡына бер ҡоро ағасты һөйрәп ҡайттылар.

— Бер ағасты икегә бүлеп булмай инде, Мәүлиҙә, быны һиңә ҡалдырайыҡ, — тине Майкамал, әхирәтен йәлләп. — Сәлисә, исмаһам, йылыла ятыр, тимер мейескә яғырға бер кискә етер әле.

Ни булғанын ҡайтып һөйләгәс, Мөхәмәтйән уртын сәйнәне.

— Фронт ыҙаларын күрмәгәс ни, кеше ҡәҙерен белмәйҙәр, — тип һөйләнде.

Мөхәмәтйән өй-аҙбар тирәһендә ҡыштыр-мыштыр йөрөштөрә башлағайны инде. Иҫке балта табып, яурынбашын саҡ-саҡ ҡуҙғатып, ҡайраҡ менән йөҙөн шымартты.

— Хәҙергә ярап торор әле, үҙем һауыҡҡас бер ҙә интектермәм утынға, — тине, әсәһен йыуатып.

Ярамай буламы, бик ярап ҡалды был балта. Ас та йәшә, көн-төн эшлә лә, өйөңдә туңып та ултыр — урамда йөрөгән эт тормошонан да былайыраҡ кеше хәле. Нишләһендәр, инде икенсе хәйләгә күстеләр, йән аҫырарға кәрәк бит. Урман ҡарауылсыһының ҡайтып китеүен һағалап торалар ҙа, китәләр төн йөҙөндә урманға. Ике әхирәт кенә түгел, башҡалар ҙа шулай итә. Ҡараңғыла ҡоро ағас эҙләп булмай, беләк йыуанлыҡ ҡайынды киҫәһең дә, елкәңде сейләндереп, һөйрәп ҡайтаһың. Унан, тиҙ генә турап, йәшерәһең утынды.

— Балта үткер бит, — тип ҡыуана Мәүлиҙә. Үҙенең балтаһы ҡалмағас, ошо Мөхәмәтйән ҡайрап биргәнде ҡуллана.

— Аллаға шөкөр, улым арыулана башланы инде, аяҡҡа ныҡлап баҫһа, икебеҙҙе лә интектермәҫ, Мәүлиҙә әхирәткәйем.

Төнгө утын ташыу ҙа оҙаҡҡа барманы. Ҡары ла яуманы бит шул төндө, исмаһам, ағас осо һыҙырған эҙ ярылып ята. Юллап килде лә етте иртән урмансы быларға. Туҙҙырып эҙләй башланы, тапандыҡ һалам аҫтынан табып алды.

— Судҡа бирәм мин һеҙҙе! — тип янаны ул.

Ҡулдарын итәк буйына төшөрөп, баш һәлендерҙе Майкамал апай. Урман киҫеү ҙур енәйәт, тотолдо инде, тотолдо...

Үҙәге өҙөлөп, әрнеп, ни ҡылырға тип ултырғанда, ахылдап йүгереп, Фәрхиямалы килеп инде. Үҙе шат, йылмайыуҙан йөҙө балҡып киткән.

— Һөйөнсө, әсәй, һөйөнсө, кейәүең ҡайтты!

Майкамал да, бөтә көйөнөүҙәре баҫылғандай, һорай һалды:

— Бөгөнмө? Иҫән-һаумы?

— Бөгөн. Иҫән... — Иланы ла ебәрҙе ҡыҙы. — Аяҡтары йөрөмәй. Өйгәсә хәрби кеше оҙатып килгән.

Ғәрипләнеп ҡайтыуҙар бер бөгөн генә түгел, ауыл халҡы быға күнегеп тә бара инде.

— Илама, ҡыҙым, ни хәл итәһең, илгә килгән бәлә, — тип әүрәтте арҡаһынан һөйөп сәсе салланған ҡыҙын. — Зәғиф булһа ла, ир әле ул, ирле өйҙә ырыҫ бар, матур ғүмер кисерергә яҙһын!

— Әсәй, әйҙәгеҙ беҙгә, сәй эсербеҙ, бер аҙ күстәнәсе лә бар, госпиталдә йыйҙым, ти.

— Барабыҙ, бармайса, еҙнәне күрергә кәрәк, — тип Мөхәмәтйән дә әкренләп йыйына башланы.

## Кәшбелғилем

Кәшбелғилем яраланып ауылға ҡайтып төшкәс, әсә шатлығы сигенән ашҡайны.

— Ныҡ ғәриплә нмәгән, ҡул-аяғы иҫән, йүгереп йөрөй, — тип Мәүлиҙә әхирәте менән уртаҡлашты.

— Янында ике улың — тормош терәге, ауыр эштәрҙән ҡотолоп, маҙаһыҙланмай йәшәргә яҙһын! — Әхирәте лә шатлыҡ уртаҡлашты.

— Мөхәмәтйәнем өсөн борсолам, тын да ала алмай тәгәрәй ҙә китә ҡайсаҡ. Бөтөнләй йығылып ҡуймағайы. Хоҙай үҙе һаҡлаһын!..

Кәшбеле өсөн әсәнең түбәһе күккә тейһә, Зифа килене һауала сорлаған һабантурғай хас та. Өйләнешеп, ҡосаҡлашып туймаҫ борон ҡуйын йылыһын, ирендәр тәмен татып өлгөрмәҫтән алып киткәйнеләр бит Кәшбелен. Яңғыҙы етем-төртөм ҡалды Зифа. Әлдә ҡәйнәһе, апһындары бар, улар менән бергә ҡыуаныс тапты, юғиһә, ауылына ҡайтып китергә лә йыйынып бөткәйне.

— Беләм, әсәйең янында һәйбәтерәк буласағын да, ләкин ҡабаланма әле, ҡайҙа төшкәнһең, шунда батыу яҡшыраҡ килен кешегә, көт, Кәшбелем ҡайтыр ул, ҡайтыр, юғалып ҡалғандарҙан түгел, — тип кәңәштәрен биреп туҡтатты ҡәйнә кеше.

Кәшбеле лә шулайыраҡ тигәйне: «Мин ҡайтырмын, көт, бер ҡайҙа ла ҡуҙғалма». Ысынға тура килде, бына, иңбашында әфисәр погонын ялтыратып, ҡайтты ла инде ире.

Бер йыл самаһы йәшәне улар. Ғаиләгә генә түгел, ырыуға ҡот өҫтәп, улдары тыуҙы. Башҡаса һуғышҡа алмаҫтар, тигән уй ҙа нығынғайны Зифаның күңелендә. Ләкин кадрҙағы офицер, ҡысҡырып әйтмәһә лә, үҙен барыбер саҡырасаҡтарын һиҙеп йөрөнө. Яраһы төҙәлгәнсе генә ҡайтарған-

дарын белә ине ул. Һуңғы комиссия үткәндә, сәләмәтлеге яҡшы, сафҡа баҫырлыҡ, тинеләр. Кәшбел яңынан фронтҡа китте.

Һуғышҡа саҡлы ла Кәшбелғилем байтаҡ ил гиҙеп, тормоштоң әсеһенсөсөһөн татып өлгөргәйне инде. Армиялағы хеҙмәте егерме өсөнә сыҡҡан йылды уҡ башланды. Себергә — Чита яғына барып эләкте ул. Себер һалҡындары ла уны ҡаҡшатманы, тайгаларын да гиҙеп үтте — бына тигән сынығыу алды. Ат күтәрер таҙа егет армия хеҙмәтен үҙһенде лә китте. Нәҡ шул осорҙа кесе офицерҙар әҙерләү мәктәбенә уҡырға йыйыу башланды. Байтаҡтар үҙе теләк белдерҙе. Кәшбел уйламаҫтан бәрелеп-һуғылманы, икеләнә бирҙе. Уны ла штабҡа саҡырҙылар. Батальон командирының урынбаҫары майор Соловьев, нишләптер, Латиповты яҡын күрә ине. Осраған һайын ихлас һөйләшә, ауыл хәлдәренә лә төшөп китә, Кәшбелдең ҙур ғаиләлә, баланың һигеҙе ир затынан икәнен белгәс, рәхәтләнеп көлдө.

— Бына ҡайҙа ул Хоҙай биргән бәрәкәт!.. Бала — байлыҡ ул, һеҙгә генә түгел, ил өсөн дә, — тип яурынына төртөп ҡуйҙы майор имән бағаналай таҙа, бөркөт ҡарашлы һалдаттың.

Был юлы майор етди төҫтә, шаярып һөйләшергә саҡырмағаны һиҙелеп тора. Ҡаршыһына ултыртты ла уратып ҡына һүҙ башланы.

— Армияға саҡлы ни менән шөғөлләндең әле һин, Латипов?

— Колхозда инде. Төрлө эштә. Һабан да һөрҙөм, тырматтым да, иген дә сәстем. Ҡыҫҡаһы, игенсе мин, иптәш майор.

— Шәп эш, игенсе — изге кеше. Ә төплө генә берәй һөнәрең бар инеме һуң, әйтәйек, механизатор, электрик, механик.

— Юҡ ине шул. Әйттем бит: мин ер кешеһе.

— Армиянан һуң да шуны дауам итергә уйлайһыңмы?

— Шулай инде, колхозға ла, әсәйгә лә ярҙам кәрәк.

— Әсәйеңә ярҙам итеүселәр, үҙең әйтмешләй, етерлек унда. Минең тәҡдимем икенсе ине бына: ил улы булһаң ине, тим.

Кәшбел, төшөнмәгәнгә һалышып, башын артҡа ҡаҡайтты.

— Былай ҙа илдеке инде, — тине, һүҙ араһында әйтелгән һымаҡ ҡына.

— Әлбиттә. Ҡайҙа ғына хеҙмәт һалһаҡ та, ил өсөн. Ватандың хәрби көсөн нығытыу бик мөһим мәсьәләгә әйләнде хәҙер. Уның өсөн офицерҙар корпусын үҫтерергә тейешбеҙ, команда составын, — тип өҫтәне майор. — Әйтер теләгем шул: йәш командирҙар етешмәй, һиңә лә уҡырға китергә кәңәш бирәм. Бөтә ҡиәфәтең килешкән, шәп офицер буласаҡһың.

Майорҙың тәҡдимен кире ҡаға алманы Латипов. Шулай кесе командирҙар әҙерләү мәктәбенә эләкте. Ике йыл хеҙмәт иткәндән һуң ауылына ҡайтып төшә кесе лейтенант Кәшбелғилем. Ҡасан кәрәк — шул ваҡытта саҡырыласаҡ запастағы офицер.

Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, тигәндәй, урмансы хеҙмәтенә кереште ул ауылда. Тайгаларҙа йөрөп өйрәнгән кеше ауыл урманының һәр ағасын тиерлек белеп бөттө. Яратты был эшен, күңеленә йәм бөркөлдө Кәшбелдең. Хистәр ташҡанда хатта шиғри юлдар килде күңеленә. Нисек ҡарға һымаҡ моңһоҙ ҡалаһың ошондай гүзәллек ҡосағында. Үҙ көйөн һамаҡланы.

Урман, урман — сихри донъя һин,
Тартылмаҫ һуң кемдең күңеле?

Бер килгәндә сикһеҙ ярһыулы,
Бер килгәндә — тиңһеҙ моң иле...

Егет күңелендә эйәрле ат ятыр, тигәндәр бит. Кәшбелдең йөрәгендә лә йылы хистәр урғылып китә. Йәр йәрәшер ваҡыты еткәнен тоя егет.

Ул замандарҙа аулаҡ өйҙәргә йөрөү ғәҙәте йәшәй ине. Буй еткергән ҡыҙҙың йәки егеттең ата-әсәһе эш менәнме, ҡунаҡҡамы ҡуна киткән саҡта шул йортҡа йәштәр йыйылыр ине. Бына ул ҡайҙа йәшлектең йәшнәгән сағы! Йыр-моң өйгә генә һыймай, урамға тарала. Йырлайһың да, бейейһең дә, төрлө уйындар уйнайһың. Ҡайһы саҡта, һәр кем ниндәйҙер күстәнәс килтереп, урын ашы ла бешереп ебәрә ҡыҙ-ҡырҡын. Бәлешкә үк барып етеүен етмәй, майлы бутҡа ла телеңде йоторлоҡ. Һөйгән йәр тапҡандары йәнәш ултырыптырып һыйланһын әле!.. Ҡыҙ күҙләп өлгөрмәгәндәренә лә бойоғаһы юҡ, яҙмышы яҙғаны алдағы көндәрҙә икенсе бер аулаҡта көтәлер...

Аулаҡта башҡа яҡтарҙан килгән ҡыҙҙар, егеттәр ҙә ҡатнашыр ине. Ҡунаҡтар ҙа булғас, тағы ла күңеллерәк, яңырып китә аулаҡ. «Һеҙҙә нисек, беҙҙә шулай: йырлап күңел асалар», — тип, моң да һибеп ебәрәләр был ауыл йәштәре, тегеләргә һыр бирмәҫкә тырышып.

Аулаҡтарҙың береһенә ят бер ҡыҙ ҙа килгәйне. Уны күреү менән Кәшбелдең йөрәге ҡағып ҡуйҙы. Ҡараштырып ултырҙы-ултырҙы ла, башҡа егеттәр күҙ һалмаҫ борон типме, өндәште ҡыҙға. Офицер кеше ебеп төшәме?

— Һеҙ ҡайҙан килдегеҙ, һылыу?

— Бынан күренмәй, — тине ҡыҙ, көлөмһөрәп.

— Күренмәһә, бәлки, юл төшкәндер ауылығыҙға.

— Бәлки — кеше аяғы етмәҫ ер түгел.

— Һм... ауылығыҙҙың аталышы барҙыр бит.

— Бар. Ҡандра-Ҡотой тиҙәр.

— Данлы ауыл бит ул, матур ауыл. Минең еңгәм дә шул тарафтарҙан.

— Еңгәң дә беҙҙең яҡтанмы ни?

— Эйе, Сәрән тигән ауылдан.

— Беләм ул ауылды. Беҙгә әллә ни йыраҡ та түгел.

— Ҡоҙаса ла түгелһең микән әле?

— Һи-һи, һәр еңгәндең яҡташын ҡоҙаса итә башлаһаң...— Шырҡылданы ҡыҙ.

— Ҡоҙаса түгелһеңдер, улайһа, исемеңде белер инем.

— Исемем атай-әсәй ҡушҡаны — Зифа.

— Исемең есемеңә тап килә, белеп ҡушҡандар.

— Һеҙҙең исемегеҙ әфисерме? — Тағы көлдө ҡыҙ.

— Кәшбел. Тултырып әйткәндә: Кәшбелғилем.

— Ай-һай, оҙон исем.

— Үҙем кеүек инде.

Йылмайышып, бер-береһенә ҡараштылар.

Зифа ағаларында бер нисә көн йәшәне. Кәшбел эшенән ҡайта ла аулаҡ эҙләп китә көн дә. Аулағынан бигерәк, Зифа менән осрашыу тарта уны. Осраштылар. Һөйләштеләр иркенләп. Егет — ҡыҙға, ҡыҙ егеткә күҙ атты.

Урмансы ни, урау юлды ла белә, тураһын да, бер көндө тартты атын Ҡандра-Ҡотойға. Йәнә осраштылар. Тағы килде, тағы... Ҡайтып, әсәһе, өлкән ағаһы Мөхәмәтша менән кәңәшләште лә, киттеләр ҡоҙалашырға.

Ҡоҙалаштылар ҙа, оҙон-оҙаҡҡа һуҙмай, йәйҙең матур көнөндә туй яһанылар. Был уларҙың ҡауышҡан төнө лә, айырылышҡан көнө лә булды. Кәләш алып ҡайтып аҙна үтмәне, һуғыш башланды. Йән рәхәте һөйгән йәр менән икәнен дә туйғансы татый алмай ҡалды Кәшбел.

Кәшбелғилем ауылдан тәүгеләр рәтендә китте фронтҡа. Подразделениеларҙы яңы алыныусылар менән тулыландырып, хәрби әҙерлек үткәргеләгәнсе байтаҡ ваҡыт аҡты. Хәҙер инде взвод командиры лейтенант Кәшбелғилем Латиповҡа «бешеп өлгөрмәгән» йәштәрҙе аяҡҡа баҫтырырға кәрәк ине. Икеләтә яуаплылыҡ тойҙо лейтенант: һуғыш — уйын түгел, кемдең ихтыяр көсө, таҫыллығы етә, шул еңеп сыға.

Әҙерлек курстарынан һуң Харьков йүнәлешендә алғы һыҙыҡҡа оҙатылды подразделение. Көньяҡ-көнбайыш фронттың был йүнәлешендәге армиялары, дошмандың өҙлөкһөҙ атакаһын ҡағып, оҙаҡ ваҡыт оборона тотто. Фашистарҙың оборонаны өҙөргә туҡтауһыҙ ябырылыуы тора-бара күпмегәлер көсөн юғалтыуға килтерҙе.

Кәшбелғилем Латиповты батальон командирына саҡырҙылар. Бында рота, взвод командирҙары, политруктар йыйылғайны. Батальон командиры подполковник Витриктың йөҙөндә үк сағыла бик тәүәккәл, аныҡ фекерле офицер булыуы. Халхин-Гол һуғыштарында уҡ батырлыҡтар күрһәткән командир икәне билдәле ине һалдаттарға. Һуғыш хәрәкәттәрен оҫта ойоштороуы менән дә дан ҡаҙанғайны ул.

Витрик өҫтәлгә картаһын йәйеп, яҡынараҡ килергә саҡырҙы офицерҙарҙы.

— Яңы ғына полк штабында етди кәңәшмә үтте. Бер урында ергә күмелеп ятып һис ҡасан дошманды еңә алмаясаҡбыҙ, үҙ-ара ҡытыҡлашҡан кеүек кенә. Беҙҙең үҙебеҙгә бик шәп итеп арт һабағын ҡайыҙларға кәрәк дошмандың. Бына шул көн килеп етте хәҙер. Иртәгә таң менән беҙҙең армия һөжүмгә күсә. Сәғәт биштә артиллерия телгә киләсәк. Уның артынса уҡ танктар ташлана. Үҙегеҙ беләһегеҙ, танктар артынан пехота күтәрелә. — Подполковник Витрик ентекләп аңлатты. Ҡайһы рота, взвод ниндәй йүнәлештә барасағын билдәләп сыҡты картанан. Өҫтәп тә ҡуйҙы: — Һеҙ боевой офицерҙар, һалдаттарығыҙ алдында ҡыйыулыҡ күрһәтегеҙ, һеҙҙән өлгө алалар бит улар.

Был кисте дошман позицияһын күҙәтеү пункттары көсәйтелде. Хәрби постар нығытылды. Бына таң да атып килә. Бөтәһе лә тыныс әле. Ҡаршы яҡ позицияла бер ниндәй ығы-зығы һиҙелмәй. Әкиәттәге ифрат дәү аждаһа һыҙғырғандай, снарядтар йылпылдап оса башланы. Дошмандың фронт һыҙығында кәбәндәй ут-ялҡындар ҡабынды, ер менән күк араһын ҡара төтөн ҡапланы.

Һуғыш аллаһы артиллерияның дөмбәҫләүе ярты сәғәттән ашыу барҙы. Танктар алға ырғылды үкерешеп. Шул ваҡыт һәр подразделениела команда тауыштары яңғыраны. Кәшбел дә күптән көткән команданы бирҙе:

— Вз-во-од, алға, дошманға һөжүмгә!..

Был һөжүм фашистар өсөн аңғармаҫтан яһалды. Улар хәрби частарын әҙерлеккә килтерә алмай, әле бер, әле икенсе урындан эҙмә-эҙлекһеҙ ут яуҙырып матаашты ла, позицияларын ҡалдырып, тәртипһеҙ рәүештә сигенде. Уның һайын беҙҙең һалдаттар ярһыбыраҡ әҙәрлекләүгә ташланды. Күпмелер биләмәләрҙе баҫып алырға ла өлгөрҙө. Ләкин һуғышта еңеү тиҙ

генә яуланмай шул. Фашистарҙың авиацияһы һауаны ҡапланы. Бына китте һауа һуғышы: ерҙе аҡтарып бомбалар яуа, аҙым һайын пулеметтар тыҡылдай. Һуғыштың был осоронда дошман авиацияһы беҙҙекенә ҡарағанда көслөрәк ине әле. Самолеттары беҙҙең подразделениеларҙың алға барышын тотҡарлай төштө. Ләкин яңынан оборонаға күсеү тураһында уйлау ҙа мөмкин түгел хәҙер. Бер шашынған ташҡынды кем, ҡасан тиҙ генә быуып ҡуйған. Туҡтаныңмы — ер менән тигеҙләйәсәктәр.

— Алға! Алға!..

Ярһып, взвод алдына үҙе башлап ырғылды лейтенант Латипов. Уның өлгөһөндә башҡалар күтәрелде. Фашистарға оборонаға күсеү өсөн бер генә тын минут та ҡалдырырға ярамай. Шулай ҙа немец авиацияһы үҙенекен эшләне: туктауһыҙ бомба, пуля яуҙырып, баш осонан выжлап үтә. Сафтар ҙа һирәгәйә. Әммә барыбер һөжүм туҡталмай, батальон командиры Витрик ундай әмер биргәне юҡ әле.

Бына тағы самолеттар осоп үтте. Тағы, тағы... Кәшбелдең эргәһендә генә бомба гөрһөлдәне. Ҡапыл тынлыҡ баҫҡандай тирә-яҡты... Бәй, һөжүм туҡтала микән ни? Лейтенант аяғына баҫмаҡсы, алға ынтылмаҡсы... Ләкин баҫа алмай, кире тәгәрәне... Плащ-палаткаһына һалып кемдәрҙер һөйрәп барғанда ғына иҫенә килде лейтенант. Бер генә өҙөлөп ыңғырашып алды ла, тәүге һорауы шул булды:

— Һөжүм туҡталдымы?

— Юҡ, һуғыш бара әле, дошман ныҡ ҡаҡшаны, — тине һөйрәп барыусы.

— Еңәбеҙме?..

— Һеҙгә һөйләшергә ярамай әле, иптәш лейтенант. Лазаретҡа барып, хәл ингәс, һөйләрҙәр.

Кәшбел оҙаҡ ятты лазаретта яраларын төҙәтеп. Артабан дауаланырға тылға оҙаттылар. Унан ауылына ҡайтарҙылар. Зифаһы менән матур ғына йәшәп ятҡанда, йәнә лә һуғышҡа алып киттеләр. 1943 йылғы ауыр һуғыштарҙа командир ут эсенә барып инә. Тағы яралана. Икенсе тапҡыр яраланғанда ла ярты йылға ғына тип ауылына ҡайтаралар. Хәрби кешенең яҙмышы үҙ ҡулында түгел шул. Яралары төҙәлеп бөтөр-бөтмәҫтән, мобилизация үткәреү өсөн, Ҡаҙағстан комиссариатына ебәрәләр. Шунан яңы часть менән өсөнсө тапҡыр һуғышҡа барып эләгә, өсөнсө тапҡыр ауыр яралар алып ҡайтып төшә 1944 йылда. Был осорҙа совет ғәскәрҙәре файҙаһына бөтә фронт буйынса һынылыш бара. Һуғыш инде Европа илдәренә күсә. Офицер яңынан хәрби сафҡа баҫыр хәлдә түгел ине инде.

Кәшбел ауылда ла тынғы тапмай. Бигерәк интегешеп йәшәгән мәле ине был осорҙа ауыл халҡының. Ғаиләһен ҡарарға кәрәк, кесе туғаны Мөхәмәтйән өйҙә булһа ла, ул да яралары һыҙлауҙан өҙлөкһөҙ ыңғыраша, олоғайған әсәһе лә ярҙамға мохтаж. Шуға ла Кәшбел тиҙерәк колхозға эшкә сығыу яғын ҡараны. Үтә һыҙланһа ла, ике ҡулы иҫән-һау бит әле, еңелерәк шөғөлдәргә ярарлыҡ. Төрлө эштә йөрөнө ул, береһенән дә тартынып торманы. Һуңынанараҡ сауҙа эшен тәҡдим иттеләр. Еңелерәк булырмы тигәйне лә, ҡайҙа ул, бер ауыл кибетен кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеү өсөн дә күпме юл йөрөлә. Ләкин боевой офицер — Себерҙән алып Көнбайыш илдәренә саҡлы ер гиҙгән кеше — бурысын үтәмәй сигенәсәге юҡ. Уның холҡона хас түгел был. Сауҙала ла бына тигән эшләне. Артабан һуғышҡа саҡлы уҡ та-

ныш шөғөләнә — урмансы эшенә кереште. Урмансы ул — ағас һаҡлаусы ғына түгел, урманды байытырға, яңы йәш үҫентеләр ултыртыуҙы ла тәьмин итергә тейеш. Шуның өсөн дә Кәшбел урмансы-техник һөнәрен дә үҙләштерҙе.

Йор һүҙле кеше ине Кәшбелғилем. Һуғыш тамамланғас иҫән-һауҙар ауылға әйләнеп ҡайтты. Кәшбел кеүек, һуғышта взвод менән командалыҡ иткән тағы бер офицер — Нурый ҡорҙашы бар ине. Бер табында, урындары йәнәш килеп, һөйләшеп ултыра икән былар. Нурый әҙерәк маҡтансығыраҡ та. Теге үҙенең ҡасан кем булғанын бәйәнләй:

— Рота командиры һәләк булғас, миңә рота менән бер көн командалыҡ итергә тура килде. Бер көн буйы капитан чинындағы дәрәжәгә күтәрелдем.

Кәшбел дә бирешмәй:

— Һо-о, бер көн пүстәк ул, мин ике көн командалыҡ иттем рота менән. Хатта, батальон командиры сафтан сыҡҡас, подполковник дәрәжәһен биләнем, — ти икән, арттырып.

— Минең дә бит шулай булды, — тип элеп ала теге, — полк командиры вазифаһын башҡарып, полковникка еткән сағымды ла әйтәйемсе әле.

— Минең дә полковник урынын биләгән мәлем бар ине. — Бирешмәй Кәшбелғилем.

Һөйләшәләр ҙә көлөшәләр икән былар. Икеһе лә полковник дәрәжәһенә етмәйенсә туҡтамайҙар. Бәлки генералға саҡлы үрләрҙәр ине, көрәгәсе генә һүҙҙәрен өҙә.

Ике фронтовик араһында көлкөлө һөйләшеү генә ине был, әлбиттә. Әммә илгә тоғролоҡ тойғолары урғылған бер мәлдәре булғандыр уларҙың. Ватан өсөн йән аямаған ил ағаларының ғорурланып, бер аҙ сирттереп ебәрергә лә хаҡы барҙыр, бер уйлаһаң...

Кәшбелғилем менән Зифа еңгәй һуғыштан һуң, тормоштарын бөтәйтеп, ете бала тәрбиәләне. Балалары ла, ата-әсәһенә оҡшап, эшлекле булды. Тик Кәшбел ағайҙың һуғыш яралары һыҙлауы ғына баҫылманы. Ошо яралары уны фанилыҡтан баҡыйлыҡҡа алып китте...

Күпмелер тыныс тормошта йәшәргә өлгөрһә лә, ҡәһәрле һуғыштың йәнә бер ҡорбаны ине ул...

## Әсә

Аҙбар артына йәшергән нәҙек ике буй ағасты тапҡан урман ҡарауылсыһы Майкамалды ысынлап судҡа бирҙе. Был ваҡиға онотолоп та бара ине инде. Яҡты бер көндө, күҙ алдарын ҡараңғылатып, судҡа саҡырыу ҡағыҙы тотторол китте ауыл советының сәркәтибе.

— Ниндәй енәйәт ҡылдың һин, апай? — тип үҙе лә аптырай йәш ҡыҙ.

— Эй, балаҡай, әйтһәң — һүҙ, төртһәң — күҙ, тигән кеүек инде. Арба тәртәһеләй генә ике ағас өсөн. — Уфтанып үртәнде Майкамал апай. Әсәһе менән бергә Мөхәмәтйән дә ауыр көрһөндө:

— Әкренләп кенә колхоз идараһына барып ҡайтайым әле, Мөғәллимде күрәйем.

Яралы фронтовикты колхоз рәйесе түргә ултыртты. Хәл белешеп, оҙаҡ ҡына һөйләштеләр. Колхоз тормошона ла ҡағылып үттеләр.

— Аттар арый, техника тип әйтһәң, йәнһеҙ тимер ҙә көлөр, У-2-ләр ватылып ултыра. Ир-егеттәр етешмәй, бөтә эш ҡатын-ҡыҙ елкәһендә, — тип теҙҙе рәйес.

— Емерелде шул, бөтә нәмәне ҡыйратты аяуһыҙ һуғыш, — тиеүҙән уҙманы Мөхәмәтйән. Михнәт ябырылғанын һөйләмәһәң дә белеп тора фронтовик.

— Йөрәк итен ашағаны — аслыҡ, аслыҡ, Мөхәмәтйән ағай. Нисек халыҡты ошо ҡырғындан ҡотолдороп ҡалырға инде, баш етмәй. — Идара рәйесе, сараһыҙлығын белдереп, ҡулы менән ботона сәпәп алды.

— Асыға ла, туңа ла шул, килде бит бөтәһе бер юлы, — тине фронтовик ағай. Унан әсәһенең башына төшкән бәләне һөйләп бирҙе.

Мөғәллим тағы ут йотто.

— Делянкаһын да бирмәйҙәр бит, исмаһам, халыҡ утынға тейенеп ҡалыр ине. Юллап, күпме барҙым инде районға, урман — дәүләттеке, тиҙәр ҙә ҡуялар, вәссәләм. Халыҡ кемдеке икән һуң?.. Шулай ҙа бигүк төшөнкөлөккә бирелмәйек әле, суд ҡарамағына үҙебеҙҙең үтенесте белдергән юллама хат яҙып бирермен идара исеменән, — тип Мөғәллим ҡағыҙға йәбеште.

Ярты бит самаһы хатты яҙыр өсөн бер сәғәтләп ваҡыт сарыф иткәндер колхоз етәксеһе: яҙҙы ла һыҙҙы, яҙҙы ла һыҙҙы, ғилеме шул самараҡтыр, күрәһең. Тырыша-тырыша яҙып, мисәтен һуғып, Мөхәмәтйән ағайға тоттторҙо. Хаттың төп фекере — Майкамал апайҙың ун бала әсәһе, һигеҙ улын фронтҡа оҙатыуы хаҡында ине.

Китте әсә шул хатты тотоп хөкөмдар ҡаршыһына баҫырға. Хөкөм итеүсе йәш ҡатын ине. Янында тағы бер нисә кеше ултыра. Урман ҡарауылсыһы ла килгән. Күҙ ҙә йоммай, дәүләт милкен урлауҙа ғәйепләй әсәне. Майкамал апайҙың хатта күҙенән йәштәр бәреп сыҡты.

— Ике ағас киҫтеңме, апай? — тип һораны хөкөмсө Майкамалдан.

Дөрөҫләктән боҫоп ҡалып булмай, әйтте лә һалды әсә:

— Киҫтем шул. Нишләйем һуң, фронттан яраланып улым ҡайтты, Ленинградтан — киленем бәләкәс бала менән. Күрәләтә туңдырып үлтерәйемме? Бер йыл эсендә һуғышта дүрт улым һәләк булғаны аҙмы ни?!. Өсәүһе ни хәлдәлер, хәбәр-хәтер алғаным юҡ, — тип үкһене Майкамал апай. — Ай, Хоҙайым, нишләп шул хәтлем ҡайғы биргән миңә, ниндәй гонаһтарым өсөн?..

— Сабырлыҡ төбө — һары алтын, саҡ ҡына көтөгөҙ, апай, — тине судья ҡатын йәлләп.

Суд ҡарар ҡабул итергә икенсе бүлмәгә сыҡты. Оҙаҡ та үтмәй, хөкөм ҡағыҙын уҡыны судья. Унда Майкамал апайҙың аҡланыуы әйтелгәйне. Урман ҡарауылсыһы быны менән килешмәне, судты яҡлашыуҙа ғәйепләп, икенсе районға бирәсәген тәкрарланы. Шулай эшләне лә. Ай самаһы ваҡыт үтеүгә, күрше район судына саҡырған ҡағыҙ килеп төштө.

Бармай ҡалыу сараһы юҡ. Ул ваҡытта, милиция менән килеп, әсир кеше хәлендә алып китәсәктәр. Хөкөмө лә ҡаты ундай көнгә төшһәң. Майкамал апай күп йәшәгән, күпте күргән, ауылдарынан да шундайҙар булғыланы, кире әйләнеп ҡайта алманылар.

Майкамал апай икенсе көндө генә барып етте күрше районды ң үҙәгенә. Юлда бер ауылға инеп, ҡунырға фатир һораны. Бик һәйбәт, асыҡ күңелле,

үҙенә тиңдәш самаһы мосолман ҡатыны ине ул. Ҡайғылары уртаҡ быларҙың, шуға ла тиҙ таптылар бер-береһе менән яҡынлыҡ. Уның ире һуғышта ятып ҡалған, улынан хәбәр килмәй, ҡайһы тирәлә һуғышҡанын да, иҫәнлеген дә белгән юҡ. Бер ҡыҙы менән генә йәшәй. Быларҙың тормош ауырлығы ла нәҡ Кәпәйҙәге һымаҡ: шул уҡ аслыҡ, шул уҡ һалҡынлыҡ... Бөтәһе лә бер заманда, бер яҙмышта йәшәй.

Бер йомарлам май, ике-өс кәлжемә алғайны Майкамал — шуны өҫтәленә ҡуйҙы. Хужабикәнең дә аҙ-маҙ ашамлығы бар икән, алҡынғансы сәй эстеләр. Таң менән йәнә юлда Майкамал. Саҡырылған ваҡыттан иртәрәк тә килеп еткән. Берәүҙе хөкөм итеп бөткәндәрен коридорҙа көтөп ултырҙы. Хөкөмгә тарттырылыусы егет рәүешенә лә инеп бөтмәгән үҫмер. Үкертеп ябып ҡуйҙылар меҫкенде. Милиционерҙарҙың һөйләшеүе ҡолағына салынды апайҙың: әлеге шул бер кеҫә иген өсөн уҡыусы ғына көйө ун йылға хөкөм сығарғандар.

Майкамал апай ҙа үҙ сиратын көтөп алды. Бында әҙәмде йәлләй белмәгән судья эшләгәнен ишеткәйне инде ул.

Ҡып-ҡыҙыл турһыҡ битле, һимеҙ ир ултыра ирәйеп өҫтәл артында. Үҙ ауылында былдай май бөргән кешене күргәне юҡ, аптырап ҡараны уға апай.

Хөкөмдө ҡыҫҡа тотто хөкөмдар. Төпсөнөп торманы, ҡағыҙ битенә күҙ йүгертеп сыҡты ла:

— Урман киҫтеңме? — тип һораны, теле уртына һыймаған кешеләй.

— Нишләйем һуң?.. — Майкамал аңлатмаҡсы, һүҙ башлағайны, тауышын күтәрә биреп туҡтатты теге.

— Нишләйем, нишләйем... Итәгеңде ас та тешлә!..

«Ах, оятһыҙ, мәғәнәһеҙ, телеңдән алғыры, әҙәм ҡалдығы!» — тип саҡ ысҡындырманы әсә, иренен ҡымтып өлгөрҙө. Ҡаушауҙан колхоз рәйесе биргән ҡағыҙҙы онотҡанын иҫенә төшөрөп, кеҫәһенән һәрмәне.

— Нимә соҡонаһың унда? — Тағы тауышын күтәрҙе хөкөмдар.

— Бына колхоздан ҡағыҙ ҙа бар, балаларым һуғышта ҡырылды минең, — тип ҡағыҙҙы һондо.

Хөкөмдар күҙ ҡырыйын ғына төшөрҙө.

— Һинеке генә ҡырылған тиһеңме әллә?.. Ундай ҡағыҙҙы һәр колхоз рәйесе биреп ебәрә.

Илар сиккә етте әсә. Башында шундайыраҡ уйҙар ҙа ҡайнаны: «Һин үҙең нишләп бармай ҡалғанһың, сусҡа кеүек һимереп ултыраһың бында...»

Ләкин улай тип өндәшеү ҡайҙа ул, өмөт үҙенекен итте: ҡыҙыу күренһә лә, йомшарыр, бәлки, Хоҙай бәндәһе бит...

Юҡҡа ғына өмөтләнгән, судья яңынан тәүге һорауын ҡуйҙы:

— Киҫтеңме ике ҡайын ағасын?

Гел дөрөҫлөктө белгән апай алдашырға баҙнат итмәне.

— Киҫтем шул, — тине.

— Тәүҙә үк әйтәләр уны, баш ҡайнатаһың бында, ваҡытты алып... Һинән башҡа ла ана күпме кешене хөкөм итәһе бар әле... — Судья эргәһендә ултырыусылар менән бер-ике ауыҙ бышырлашты ла, хөкөмөн иғлан итте.

— Штраф һиңә, Латипова, ике мең тәңкә... Бер аҙна эсендә түләргә!.. Ваҡытында түләмәһәң, тағы ла өҫтәрбеҙ.

Башын баҫып сығып китте әсә был ҡәһәрле бүлмәнән. Юл буйы бер һорау килә лә өйкәй йөрәген: инде нишләргә, инде нишләргә?..

Теге ауылға еткәндә ҡараңғы төшкәйне инде. Ҡунырға китешләй ингән хужабикәгә туҡталды тағы.

— Әйҙә, әйҙә, төн йөҙөнә ҡарай ҡайтып китмәҫһең. Алла һаҡлаһын, әллә кемгә осрауың бар, ҡараҡтар йөрөй, тиҙәр, анау юлдағы урманда, — тип, ҡатын тиҙ арала үҙҙәренең яғындағы хәлде лә аңлата бирҙе.

Һөйләшеп, зарланышып оҙаҡ ҡына яттылар. Таң атыу менән сәй эсереп оҙатты ҡатын уны. Кисләтеп кенә өйөнә ҡайтып йығылды әсә.

Ошо өс көн эсендә өйҙә лә башҡа һыймаҫлыҡ ваҡиғалар килеп тыуған. Район уполномоченныйы быларҙың малдарын яҙып, налог түләмәгәнлектә ғәйепләү таҡҡан.

«Быҙаулы һыйырығыҙ бар — май һалмағанһығыҙ ҡаҙна иҫәбенә, ике бәрәсле кәзәгеҙ — уға ла шунса налог, тауыҡтарығыҙ өсөн йомортҡа тапшырырға кәрәк ине» тип ныҡышҡанын Мөхәмәтйән улы әрнеп һөйләне. Күпме налог йыйылған ҡағыҙҙы күрһәтте.

Әсә яңынан ҡайғыға батты. Йөрәктәге өйкәү һыҙып-һыҙып ала: ҡайҙан табырға был саҡлы аҡсаны? Эшкә йөрөгән өсөн һуҡыр бер тин дә түләмәйҙәр, табелгә таяҡ ҡына һыҙалар.

Мөхәмәтйән дә, Әминә килене лә баш вата. Улы һөйләнеп ҡуйҙы.

— Бүренән ҡотолорға мөмкин әле, закондан ҡасып булмай.

Әсә лә ни тиергә белмәй.

— Тормошобоҙ болотло көн кеүек хәҙер... Әллә һыйырҙы һатайыҡмы? — тип кәңәшләште.

— Башҡаса сара ҡалмағас, шулай итергә лә тура килер әле. — Йөпләгәндәй итте улы әсәһен.

— Быҙауҙың һыйырға әйләнеүенә күҙ терәйбеҙ инде, әләйгәс.

— Алыусы бар микән һуң? — Мөхәмәтйән икеләнде.

— Ауылда юҡ инде ул, район баҙарына сыҡмаһаҡ...

— Һыйырҙы етәкләп кем барыр һуң, әсәй? Минең йыраҡ юлға йөрөр хәлем юҡ. Әминә еңгәй генә булышмаһа...

— Туҡта әле, күрше урыҫ ауылында Аня исемле знакумым бар минең. Урыҫтар хәлле генә йәшәй кеүек, шул тирәлә алыусы табылмаҫмы? — Әсә теге ваҡытта ырҙынын ҡаҙырға рөхсәт иткән, етмәһә, һыйлап, күстәнәс биреп ҡайтарған ҡатынды хәтеренә төшөрҙө.

Аня яҡын кешеһеләй ҡаршыланы Майкамалды. Тормош-көнкүрешен тәсфирләп һорашып, түргә ултыртып, һый-хөрмәт күрһәтте. Һыйырын һатырға йыйынып йөрөгәнен әйткәс, һағайҙы мәрйә ҡатыны ла.

— Берәй зыян-зәүрәт күрҙегеҙме әллә, ниңә һатырға уйланығыҙ?

Майкамал елкәһен баҫҡан бәләләрҙе һөйләне. Аптырашта ҡалды Аня ла.

— Үҙ илендә ҡәҙер тапмаған әҙәмдәргә әйләндек инде, — тип, рыя күрһәтмәҫ кешеләрҙе әрләп алды.

— Шуға һыйырҙы һатмаҡсы булдыҡ, — тип, Майкамал знакумының берәй йылы һүҙ әйтерен көттө.

— Табылыр микән, беләйем. Хәлле тигәндең дә кеҫәһе тишек хәҙер, ҡулда аҡсаһы юҡ... Әйтһәм дә, берәүҙәр ҡаланан күсеп ҡайтты, балалары ла күмәк, шулар ғына алмаһа... — Аня, апайға саҡ ҡына ял итеп, көтөп ултырырға ҡушып, кейенә башланы.

Сәғәт тә үтмәне, бер ҡатынды эйәртеп тә килгән хужабикә. Танышып, һөйләшеп киттеләр. Әлеге бер балыҡ башы: былар ҡалала бәләкәй генә ағас өйҙә йәшәгәндәр, йылытырлыҡ та әмәл юҡ, балаларын туйындырыуы ла ситен. Шул йортон һатып, ауылдағы буш өйгә ҡайтып ингәндәр. Бәрәңге ултыртып тамаҡ туйҙырырға самалары ире һуғыштан ҡайтҡансы.

— Беҙгә һыйыр кәрәк тә бит, унһыҙ нисек дүрт баланы аҫырарға. Дүртеһе дүрт яҡтан ҡош балаһы шикелле ауыҙ аса, — тип һөйләнде ҡатын.

— Рәтең бар икән — ал да ҡуй, әллә ҡайҙан эҙләп, аҡса туҙҙырып йөрөгәнсе. — Димләште Аня. — Белгән һыйырға етәме ни, ниндәйе эләгә бит әле ситтән алһаң.

— Дөрөҫ инде бер уйлаһаң... — Һиҙелә ҡатындың алғыһы килгәне. — Күпме һорайһың һуң?

— Әлләсе... Һатыу иткән булмағас ни...

— Нисә йәштәр тирәһендә?

— Дүртенсе быҙауға бара.

— Иң шәп сағы, нәҡ күп һөт биргән ваҡыты, — тип маҡташты Аня.

— Быйылға быҙауламаған да мы?

— Юҡ әле, елен еткереп килә былай. Март урталарында быҙау килтерер, алла бирһә.

— Икеләнмә, килешегеҙ, уға — аҡса, һиңә һыйыр кәрәк. — Аня яраштырыу яғында.

— Хаҡын белеп булмай бит әле, күпмегә йөрөй хәҙер һыйыр? — Баш сайҡайҙар.

— Ана Федор ҡарттан һорағыҙ, ул үткән аҙна танаһын һатып ҡайтҡан баҙарҙа.

Киттеләр өсәүләп Федор ҡартҡа. Урыҫ бабайы хаҡын әйтте. Был хаҡ ике яҡты ла ҡәнәғәтләндермәне: һатыусы әҙ ти, алыусы күпкә һанай. Ярҙамға тағы ла Аня килде.

— Ярар, ғәҙел булһын, беҙ һинең менән фронтовик ҡатындары, ул фронтовик улдарының әсәһе, хәрәмләшеү килешмәҫ. Һыйыры быуаҙ ҙа икән, шул хаҡҡа йөрөй ул, — тип тейерен әйтте Аня.

— Аҡса етмәй, — тип ыңғырашты тегеһе.

— Етмәһә, мин биреп торам, аҙаҡ яйлап түләрһең әле.

Аня һананы ла усына һалды аҡсаның етмәгән өлөшөн. Шулай килештеләр. Икенсе көндө ҡатын оло улы менән килеп алып та китте һәүкәште. Күҙ йәштәрен һөртөп, эйәрә биреп, ҡарап ҡалды Майкамал апай.

Һыйырһыҙ көн хәйерһеҙ икәне шундуҡ һиҙелде. Нурия иртән уянды ла һөт таптырҙы. Башҡалар ҙа тамаҡҡа наҡыҫлыҡты тиҙ тойҙо. Ярай әле, кәзәһе бар әсәнең, шуға күҙ терәнеләр.

Майкамал һөт илтә алмай хәҙер Мәүлиҙәгә. Йылытып, дарыу урынына ауырыу Сәлисәһенә ҡаптырырға бер сеүәтә лә ярап ҡала ине әле. Хәҙер унһынан да өҙөлдө. Сәлисәнең сырхауы көсәйә барҙы. Яҙға табан бөтөнләй күтәрелмәҫ хәлгә төштө балаҡай. Һәм... көндәрҙең береһендә гүр эйәһе булды. Ошо ҡыҙ ҙа һуғыштың бер ҡорбаны ине, бер уйлаһаң...

## Ҡәнзелғилем

Киске ауыл. Ҡояш нурҙары, ыуылҡым-ыуылҡым һибелеп, әкрен генә юғала бара; уның урынына, йорттарҙы йәшерә-йәшерә, ҡараңғылыҡ шаршауы биләй. Тәҙрәләрҙән безләп шәм яҡтылығы сағыла башлай. Һиллек, тынлыҡ ауылда, әйтерһең, бар хәрәкәт өй эсенә инеп юғалған. Бер ҡарашҡа шулай ул киске ауыл. Ләкин тормоштоң тыныс сағы бармы икән? Ул бер туҡтауһыҙ әйләнештә, ҡайҙалыр, шәүлә ҡаплаған ышыҡ урында, бышыр-бышыр һөйләшкән өндәр ишетелеп ҡала, киске һиллекте боҙорға теләмәгәндәй, әкрен, һаҡ ҡына ҡапҡалар асыла; кемдер ишетелер-ишетелмәҫ йүткереп ҡуя; алыҫтараҡ, көмөш тәңкәләр сылтырағандай, ҡыҙҙар көлөүе иғтибарҙы тарта. Ауыл киске тормош ҡанундарына ҡайтҡан мәленә яҡынлаша.

Ҡапыл арғы урамда ергә илаһи моң тараҡан саратский гармун телгә килә. Шунда уҡ көр тауышлы егет йыр ҙа башлап ебәрә.

> Уйна, дуҫым, гармуныңды
> Беҙ йырлаған көйҙәргә.
> Һин уйнаған, беҙ йырлаған
> Ҡалһын һағынып һөйләргә.

Ошо минутта ауылдың киске тормошо хәрәкәтен башлай. Әйтерһең дә, мәшәҡәткә уралған, эш тип ығы-зығы килгән көн оҙонлоғо булмаған да, бер кемде бер ҡайғы баҫмаған; бөтәһенең күңелен тик уйын-көлкө, моң биләп алған. Йәш-елкенсәктең киске уйынға сыҡҡан мәле ауылға бөтөнләй икенсе йәм бирә. Был ваҡыт йәштәр генә урамға ашҡынмай, хатта сәстәренә сал төшкән өлкәндәр ҙә ҡапҡа төбөндәге эскәмйәгә ҡунаҡлай. Киске моңға әҫәрләнеп, улар ҙа үҙҙәренең йәшлеген күңелендә тағата, татлы хистәр бәлләүен түкмәй-сәсмәй йөрәк тибеше аша үткәрә.

Оҙаҡламай саратский тауышы йәштәрҙе үҙ артынан эйәртеп, Сатра буйҙарының йәм-йәшел сиҙәмлегенә әйҙәй. Ана шунда, Сатра буйында, ҡыҙҙар-егеттәр кис һайын уйын ҡора. Ошо урын яҙҙан алып көҙгәсә, магнит тартҡан кеүек, бар йәштәрҙе үҙенә йыя. Ә гармунсыһы — моң шишмәләрен урғытыусы Ҡәнзелғилем Латипов булыр.

Ҡәнзел бәләкәйҙән үк йыр-моңға тартылды. Малай беренсе тапҡыр гармунды ситтә эшләп ҡайтҡан ағай ҡулында күрҙе. Ағай уйнай башлаһа, уның эргәһенә сапты. Гармун эйәһе үҙе әллә ни матур көйҙәр ҙә һыҙҙыра алмай, ләкин Ҡәнзел өсөн уныһы бик мөһим дә түгел, иң ҡыҙыҡтырғаны — серле телдәрҙең сихри моң урғытыуына төшөнөү. Килә лә ымһыныулы ҡарашы менән ағайҙың гармун телдәре өҫтөндә йүгереп үткән бармаҡтарына баға. Әх, уйна ла ебәр ине ошо ағай һымаҡ, күреген тарта-йыя. Ағай ҙа быны һиҙенә, ахрыһы, туҡтай ҙа Ҡәнзелгә һынаулы ҡараш ташлай.

— Әллә һине лә гармун ҡыҙыҡтырамы?

— Уны нисек өйрәнәләр, ағай? — Һорауға һорау менән яуаплай малай.

— Бейеүсе лә бейей-бейей оҫтара, гармунсы ла уйнай-уйнай өйрәнә ул, үәт.

— Һеҙ ҙә матур уйнарға шулай оҫтарҙығыҙмы ни?

Тегенең көйҙәрҙе боҙоп ебәргәненә төрттөрөп тә ала Ҡәнзел. Ул да, малайҙың тел төбөн аңлапмы, әллә шаяртыпмы, яуаплай:

— Килеп сыҡмаһа, ҡараңғы мунсаға бикләнеп тә өйрәнәләр. Ҡалала мунса булмағас, ауылға ҡайттым бына мин дә.

— Улай икән... — тигән була малай, ышанып.

— Уйнап ҡарайһыңмы әллә?

— Мунсаламы, ошондамы?

— Ошонда башта. Мә, тот!..

— Ҡурҡам бит әле.

— Ҡурҡма, гармун ҡоторған эт түгел, тешләмәç.

Ҡәнзел, сикһеҙ ҡиммәтле хазина күтәргәндәй, ҡулына алды гармунды. Бер ниндәй ғәмәлгә һыймаған тауыштар сығарҙы телдәренә баçҡылап, әтәс һымаҡ ҡысҡыртып.

— И, ағай, булмаç минән, мә, үҙең генә уйна, мин тыңлап торайым лутсы, — Кире һондо гармунды Ҡәнзел.

— Теләйһең икән, кеше өйрәнмәç бер генә һөнәр ҙә юҡ ул донъяла, — тип йыуатты ағай.

Ҡәнзеленең гармун тауышы ишетһә күҙҙәре осҡонланыуын һиҙеп йөрөгән, күрәһең, Шакир ағай. Бер ваҡыт ҡалаға барғанда, һигеҙ улымдың береһе уйнарға өйрәнер һис юғында тип, кеçәһендәге барлыҡ аҡсаһына саратский гармун алды ла ҡайтты. Малайҙары кемуҙарҙан гармунға йәбеште башта. Уйнап ҡарайҙар ҙа ташлайҙар, ҡысҡырталар ҙа ултырталар. Бәлки, көн-төн эштә йонсоп та гармунға күңел һалыу ҡайғыһы киткәндер. Араларынан бер аҙ Кәшбел өйрәнде, уның нескә күңеле тартылды музыкаға. Ләкин ул йәшләй армияға китеп барҙы. Гармундың төп хужаһы Ҡәнзел хәҙер. Ул ныҡышмалы өйрәнде, теге ағай әллә ысынлап әйтә микән тип, мунсаға бикләнеп тә уйнаны. Килгән-киткән кеше аптырап һорар ине Майкамал апайҙан:

— Ниндәй тауыш сыға ул тегенән?

Әсә кеткелдәп көлә.

— Ҡәнзел унда мунса ендәрен бейетә...

Өйрәнде бит барыбер Ҡәнзел, арыу ғына һупалай. Бейеү көйҙәрен уйнағанда, шәп яуған ямғыр тамсылары ергә бәрелгәндәй, тыпылдығын сығара бармаҡтары. Ҡәнзелгә иң тәүҙә ауыл йәштәре ылыҡты. Быға са гармунсы күрмәгәс, егетте ҡышын аулаҡҡа, йәйен киске уйынға саҡыра башланылар. Эштә лә тынғы юҡ, әле береһе, әле икенсеһе хәбәр килтерә.

— Бөгөн шул өйҙә аулаҡ, һуңға ҡалма, йәме.

— Бөгөн Сатра буйын яңғыратайыҡ әле.

Ҡәнзел вәғәҙәләр бирә икән — үтәй, гармунын күтәрә лә сыға кисен. Шунда уҡ уны көтөп йөрөгән йәштәр уратып ала. Әйткәндәй, үҙенең дә йәштәр араһында ҡайнашҡан мәле ләһә. Өйҙә бер үҙе ултырып ҡалмаç инде, бар тиçтерҙәре киске уйында күңел асҡанда. Бара, уйната, бейетә. Алдында өйөрөлөп йөрөгән ҡыҙҙарҙың һөлөк кеүектәрен һайларға ла булыр ине, юғиһә. Нишләптер, күңелендә мөхәббәт ҡошсоғо ҡанат ҡаҡмай һаман да. Ҡыҙҙар төрттөрөп тә ебәрә хатта: «Гармунсының бармаҡ һайын мөхәббәт...» Йылмая Ҡәнзел, башын ҡырын һалып, ирендәрен ҡымырлатып уйнауын белә.

Шулай йәнләндерҙе ауылды егет. Етәкләшеп үçкән ағаларын, ауылдаштарын һуғышҡа оҙатҡанда ла уйнаны гармунда, йырлатты фронтҡа китеү-

селәрҙе. Урамдарҙы әйләнә-әйләнә хушлашыу моңдарын тартты. Үтте лә китте шул йәшлек миҙгелдәре, дөрөсөрәге, фашист илбаҫарҙары өҙҙө йәшлектең аҫыл ғүмерҙәрен... Һуғыш күңелдәрҙә үкенеү ҙә, үс тә уятты.

...Беҙ китәбеҙ иртәгә,
Шинель һалып елкәгә.
Беҙ китмәҫ инек иртәгә,
Фашист тейә теңкәгә.

Йыраҡтан матур күренә
Заготзерно уттары.
Килә-килә килеп етә
Айырылыу минуттары.

Оҙатыу ваҡыттарында ошондайыраҡ йырҙар ауыл өҫтөндә осоп йөрөнө лә, китеүселәргә эйәреп, ҡайҙалыр, урман араларына, болонлоҡтарға инеп боҫҡан һандуғастай, юғала барҙы... Хәҙер бына Ҡәнзелдең үҙенә лә китер ваҡыт етте. Үҙенә-үҙе уйнап, гармун телдәрен илатып, күңелдәрҙә һағыш уятып хушлашты ул ауылы менән. Ауыл ситенә саҡлы оҙата килгән әсәһенә шундай аманатын да белдерҙе:

— Мин ҡайтҡансы һаҡла, әсәй, гармунды... Атайымдың төҫө итеп һаҡла...

— Улым! — тине лә ҡосаҡланы әсә. — Һаҡлармын, улым!..

Ҡәнзел дә, моңайып, оҙаҡ ҡына әсәһенә баҡты. Ошонда ғына әсәһенең һырлана башлаған маңлайына, күҙ төптәренә иғтибар итте. «Әсәй ҙә олоғая хәҙер, йылдар ағышының йырҙалары тәрәнәйә бара», — тип уйланы. Ҡапыл ярһыу хистәр йөрәген һыҙҙы.

— Әсәйем!.. Оҙаҡламай беҙ ҡайтырбыҙ, һине бер ҡайғы-хәсрәтһеҙ йәшәтербеҙ!..

Бәләкәй сағындағы һымаҡ, әсәнең йылы күкрәгенә ялҡынланып ҡыҙарған битен терәне Ҡәнзел, айырылырға теләмәгәндәй, бер килке әсә күкрәгендә ойоно, күпмелер ваҡыттан тағы башын күтәрҙе, ҡарашын тирә-яҡҡа, алыҫҡа ташланы.

— Көтөгөҙ, беҙ ҡайтырбыҙ, йәшел Сатрам минең, һағынырмын һине, ҡаңғылдашып ҡаҙҙар ҡайтҡан көмөш һыулы Ҡыйҙашым! — тип, тойғоларға бирелде.

Нескә күңелле ине Ҡәнзел, һуғышыр өсөн түгел, гүзәллек тыуҙырыр өсөн донъяға килгән йән эйәһе. Ил өҫтөнә ябырылған фажиғә бәғерҙәрҙе икенсе төргә әйләндерер тип кем көткән. Йәр һөйөргә лә өлгөрмәгән егет ине бит ул...

Ҡәнзел бер ни тиклем Алкин станцияһы янындағы хәрби лагерҙа әҙерлек үтте. Бөтәһе лә яҡташтар, милләттәштәре лә күп. Яҡташтары менән яман яу юлдары ла ҡурҡыныс булмаҫ, ҡыйыу халыҡ йәшәгәнен белә ул тыуған яҡтарында. Ана, тактика дәрестәрендә лә ниндәй сослоҡ күрһәтә улар. Бирешмәҫтәр дошманға, еңерҙәр. Мәктәптә уҡыған ваҡытында тарих уҡытыусыһы: «Башҡорт полктары Наполеондың армияһын ҡыйратып, беренселәрҙән Парижға барып ингән», — тип һөйләй торғайны. Быныһын да үҙ ояһына тиклем арт һабағын уҡыта-уҡыта туҙҙырырҙарына ышана ине Ҡәнзел. Уның күңеле нескәлек менән генә тулышмаған, ниндәйҙер ҡеүәтле мөғжизәләр көткән ярһыу ҙа, илгә тоғролоҡ хисе лә йәнәш йәшәп ятҡан

икән... Күнекмәләрҙә хәрби оҫталыкты яҡшы үҙләштерә барҙы Ҡәнзел, ял иткән ҡәҙерле минуттарҙа гармуны менән яҡташтарының күңелен асты...

Уларҙың полкы Воронеж фронтына ташланды. Дон йылғаһы аша сығып, көньяҡҡа — Сталинградҡа табан ынтылған фашистарҙың юлын киҫеү бурысы ҡуйылғайны фронт алдына. Көньяҡҡа үтеү өсөн дошманға башта Воронеж ҡалаһын алырға кәрәк. Бына шуға ла Дон һәм Воронеж йылғалары ҡушылған тамаҡта — тау башында ултырған ҡаланы яулау өсөн аяуһыҙ һуғыштар бара. Воронежды һаҡлауҙа советтар яғынан бик күп дивизиялар тупланған. Беҙҙең Алкин лагерында әҙерләнгән полк та бер дивизияға ҡушылып, боевой сафҡа баҫты. Ул башҡа төр подразделениелар менән тулыландырылды.

Ҡәнзелғилем пехота ротаһына эләкте. Бында ла яҡташтар байтаҡ. Уның командиры урыҫ кешеһе, ә политругы үҙебеҙҙең башҡорт ине.

Өлкән йәштәге политрук Нәғимов һалдаттары менән туғандарса мөғәмәләгә керҙе. Роталағы һәр кемдең тыуған яғы, ата-әсәләре менән ҡыҙыҡһынып, үҙ итеп өлгөрҙө. Аҙ-маҙ буш ваҡыт сыҡҡан арала Ҡәнзелде лә эргәһенә саҡырып ултыртты. Бер ғаиләнән һигеҙ малай үҫеп, бөтәһе лә һуғышҡа киткәнен ишеткәс, улы кеүек күреп, башынан һыйпаны Ҡәнзелдең:

— Һеҙ патриоттар ғаиләһенән икәнһегеҙ, иҫән-һау ҡайтығыҙ, иң абруйлы кешеләре булырһығыҙ ауылығыҙҙың. Ҡыҙғаныс, атайың иртәрәк донъя ҡуйған. Ә бына әсәйең — ил инәһенә тиңдәш, ул иң оло хөрмәткә лайыҡ, — тип күңелен күтәрергә тырышты политрук.

— Белмәйем, ағайымдарҙың яҙмышы нисектер, хат та ала алманым. Ә бына иң кесебеҙ нык яраланып, дауаланып ята. — Ҡәнзелдең күҙ алдына бер-бер артлы ағалары килеп баҫты. Улар ҙа, бөгөнгә иҫәнмен, тип көндө башлай микән? Һалдаттың һәр аҙымы ҡылдан нәҙек сират күпере аша үткән кеүек. Бер минутта ҡолап ҡалыуың ихтимал.

Егеттең моңһоулығын күҙҙәренә ҡарап беләлер, күрәһең, лейтенант Нәғимов — кеше рухына ышаныс өрөүсе политрук.

— Нык бул, егет, шул уҡ ваҡытта һаҡ бул. Һиңә, еңеү яулап ҡайтҡас, музыка буйынса уҡырға инергә, республикабыҙҙың танылған шәхесенә әйләнергә кәрәк, онотма шуны!

— Мин матур итеп көйҙәр уйнаһам да бәхетле һанар инем үҙемде. Тыуған колхозыбыҙҙа мәҙәниәтте юлға һалып, ауыл тормошон йәнләндерһәм, ҡәнәғәтмен. Их, килерме ундай көндәр?!.— Көрһөндө Ҡәнзел.

— Күрербеҙ ундай көндө лә, тик фашисты еңәһе бар уғаса.

Политрук менән йөрәк серҙәрен уртаҡлашыуҙан кәйефе күтәрелә һалдаттың. Мөмкин тиклем уның янындараҡ йөрөргә тырыша.

Икенсе тапҡыр һөйләшкәндә Нәғимов ағай тиҙерәк әсәһенә хат яҙып һалырға кәңәш бирҙе.

— Иҫәнлегеңде белдер, улым, тилмертмә әсәңде. Баланың ҡулы ауыртһа ла әсәнең йөрәге һыҙлай. Мохтаж ул һинең хат-хәбәреңә... Сер итеп кенә әйтәм: оҙаҡламай алғы һыҙыҡҡа күсәсәкбеҙ, әллә ваҡыт була унда, әллә юҡ...

— Бөгөн үк яҙам. Рәхмәт кәңәшегеҙгә, — тине Ҡәнзел күндәм генә.

— Һөйгән ҡыҙыңа яҙҙыңмы әле, ул да көтәлер?

— Яҙманым.

— И-и, улай килешмәй, егетлек түгел был.

— Һөйгән ҡыҙым юҡ шул, иптәш лейтенант.

— Нисек улай, китеп барҙымы берәй яҡҡа?

— Ҡыҙ һөйөргә өлгөрә алмай ҡалдым.

— Бәй, нишләнең һин алма кеүек сағыңда? Ишеткәнең юҡ инеме ни шундай йырҙы: «Йәш сағыңда шуны уйлайһың: йәр һөйөүҙән туймайһың». — Политрук хатта көйләп үк күрһәтте.

— Йөҙ үк тимәһәм дә, мең тапҡыр ишеттем. Ул көйҙө үҙем дә гармунда уйнай инем... Әллә нисек ҡыйманым шул һөйөү хаҡында һөйләшергә... — Ғәйеплегә һанағандай үҙен, баш эйҙе һалдат егет.

— Ҡайғырма, бер ҙә һуң түгел, ҡайтҡас бына тигәнен һайларһың... Ярай, эшеңдә бул. — Политрук икенселәр янына ашыҡты. Ул шулай аралашыуҙан бушамай, бер ҡарағанда — бында, икенсеһендә — башҡа ерҙә.

Таңға табан алғы һыҙыҡҡа инергә фарман алынды. Уларҙың дивизияһы фашистарҙың атакаһын кире ҡағырға тейеш. Алғы һыҙыҡ тигәне Воронеж менән Дон йылғаһы араһында — Чижовка тигән ауыл янында — киң генә бер биләмә икән. Фашистар ошо йылғаларҙың ярынан күтәрелеп, Воронеж ҡалаһына һөжүм итмәксе. Чижовка плацдармы тип аталған был ҡалҡыулыҡ беҙҙең ғәскәрҙәр өсөн дошман һөжүмен ҡағырға бик уңайлы. Һәр хәлдә, танктар, пехота тиҙ генә яр башын яулай алмай. Шуға ла совет ғәскәрҙәре тешетырнағы менән ошо плацдармға йәбеште. Сталиндың «Бер аҙым да артҡа сигенмәҫкә!» тигән приказы ла уҡылды. Артҡа сигенеү — хыянатҡа бәрәбәр. Сигенеү дезертирлыҡҡа һаналды. Ә дезертирҙарҙы судһыҙ-ниһеҙ шунда уҡ атып йығалар. Шуға ла пехота подразделениелары артынан НКВД частары ташлана. Алға барһаң — дошман, артҡа әйләнденме — НКВД һалдаттары пуляһы ҡаршылай. Ике ут араһына барып инде тәүге һуғышта уҡ Ҡәнзелғилем.

Фашистар бомбалар, снарядтар яуҙырып, ажарланып ташланһа ла, плацдармға аяҡ баҫа алманы. Ер аҡтарылып ишелде, өйҙәр көлгә әйләнде, бер генә ҡыуаҡ та ҡалмай теткеләнеп бөттө. Һалдаттар мәхкүмгә дусар хәлендә ҡалды. Фашистар ҙа шулай уйлайҙыр, ахырыһы: күпмелер тынлыҡ баҫһа, былар юҡ ителде типме, атакаһын көсәйтә. Шундай ҡырылышҡа кеше нисек сыҙай ҙа, нисек иҫән ҡала?! Фашистарға ҡаршы тәүге алышта уҡ иҫәпһеҙ-һанһыҙ һалдат ятып ҡалды. Иҫ-аҡылың китерлек бит!..

Ҡәнзел һуғышҡан подразделениеға тылға сығырға приказ бирелде. Шунда уҡ плацдармға икенсе дивизия ташланды. Тәүге имәнес мәхшәрҙән иҫән-һау ҡотолдо Латипов. Подразделениены яңынан тулыландырыу эштәре башланды. Шул ваҡыт уны Нәғимов эҙләп тапты.

— Ҡыйыу һуғыштың, егет, молодец! Нәҡ һеҙҙең взвод өҫтөнә аллы-артлы бомбалар төшөп ярылғас, һуңғы осрашыуыбыҙ булғандыр инде, тип ҡурҡҡайным. Иҫәнһең икән, иҫәнһең, улым, — тине лейтенант.

Бәлки, ысынлап та, улы һымаҡ күргәндер Нәғимов. Берәһенән-берәһе бәләкәй дүрт улым ҡалды, тип һөйләгәйне бит, йән киҫәктәрен иҫенә төшөргәндер.

— Мин ни, бомба аҡтарып ырғытҡан ерҙең соҡорона барҙым да сумдым. Өҫтөм ҡап-ҡара ер менән ҡапланды, шулай ҙа күҙемде тырнап тупраҡтан таҙарттым да алға тоҫҡалдым.

— Артабан күҙ яҙҙырҙым шул, күрә алманым.

— Һеҙ һуң нисек иҫән ҡалдығыҙ? — тип һорарға баҙнат ҡылды һалдат.

— Хоҙай тәғәлә араланы. — Лейтенанттың яуабы ҡыҫҡа ине.

Бынан ары ла әллә нисә тапҡыр плацдармға инеп, һау сыҡты Латипов. Лейтенант әйтмешләй, Хоҙай араланы, әллә яуыз әжәл яҙлыҡтымы — уныһын әйтеү мөмкин түгел...

Бына тағы ла улар плацдармда. Был юлы фашистар уғата ҡоторондо. Баш күтәрер әмәл ҡалманы. Фашистар ярға ла менеп килә шикелле, автомат, пулеметтары эргәлә генә тыҡылдай. Ҡәнзел дә автоматынан утлы ҡурғаш һиптерә. Артҡа сигенергә урын юҡ, тик алға ғына. Бер мәл көслө тауыш яңғыраны.

— Атакаға!.. Илебеҙ өсөн, Сталин өсөн!..

Ут өйөрмәһенә ырғылды һалдаттар. Иң алдан — политрук, көс-дәрт биреүсе лейтенант. Ҡәнзел дә уның артынан. Тоҫҡап та тормай, атыуын белә. Фашистар шундай көс ҡаршылауын аңдымаған, күрәһең, берәм-берәм ярҙан аҫҡа тәгәрәй. Ҡапыл тәнен ниҙер өтөп үтте Ҡәнзелдең. Ул ергә ҡоланы. Күҙҙәрен ҙур асып күккә баҡмаҡсы, ҡояшты күрергә уйланы. Ләкин күҙҙәре йомолғандан-йомола барҙы...

## Әсә

1944 йылдың ғинуар һыуыҡтары башланды. Һыуыҡтан да бигерәк, аслыҡ үҙәкте өҙҙө, тәғәм ҡабыр аҙыҡ өсөн кешеләр йәнен бирер сиккә етте. Ҡыш уртаһында баҫыуҙағы ҡарҙы таҙартып, ерҙе балта менән сапҡылап, туң бәрәңге эҙләүселәр ҙә күренде. Көн буйы ер сабып бер-ике бәрәңге табыуы ҙур шатлыҡ ине. Ҡайһылары өй ишеген көпләгән һыйыр тиреһен аҡтарып, ебетеп, йөндәрен йолҡоп төшөрөп, шуны ҡайнатып сәйнәне. Бешергәс, ҡатҡан тире лә ҡабарып, йомшара икән. Кем нимә таба ала, шуны тамаҡҡа ебәреү яғын ҡараны. Хатта йыла ағасының олонға йәбешеп ҡалған йомшаҡ ҡабығын да сәйнәп һурыусылар булғыланы. Аслыҡтан үлеүселәр тураһында хәбәрҙәр йышыраҡ ишетелә башланы. Ауылда хәйерселәр күбәйҙе. Асяланғас кешеләр, өлкән ҡарсыҡтар, үҫмерҙәр, бәләкәй моҡсайын яурын аша аҫып, рөхсәтһеҙ-ниһеҙ килеп инә лә, ишек төбәндә әлмәйеп баҫа ла ҡала. Ярай әле берәй ярҡа бәрәңге бирә алһаң, күп рәхмәттәр яуыр ине... Күп ваҡыт, бахырҡайҙар, тупһа төбөндә аяҡһып сығып китә...

Кешенең әйберҙәре, айырыуса малы юғалыуы хаҡында ла һүҙҙәр ҡуйырҙы. Ярлығол исемле егет ҡорона баҫҡан үҫмер Майкамалдар урамында йәшәгән тол ҡатындың һарығын урлап сыҡҡан, элекке мәсет артына илтеп һуйып, тунап, күршеһенең аҙбар ҡыйығы аҫтындағы бесәненә йәшергән. Иртүк милиция килеп, ҡарҙа ярылып ятҡан эҙенән юллап, түшкәне тапҡан. Түшкәне кире мал хужаһына тапшырһалар ҙа, суд яһап, төрмәгә оҙаттылар. Мәхлүк егет яҙмышын ана ниндәй ҡурҡыныс аҫтына ҡуйған. Үҙе бер киҫәк итен дә ашай алмаған... Эй, ул замандың ҡытлыҡтарын иҫеңә төшөрһәң, үҙәгең өҙөлөү генә түгел, йөрәгең ярылыр...

Майкамал апай ҙа яралы улын, ейәнсәре Нурияны, килене Әминәне туҡландырыу өсөн ниҙәр генә ҡылманы. Аҡтыҡ кәзәһен һуйып ашатыу сигенә етте. Йәл ине кәзә, әлбиттә, нисә йыл аҫыраған малы бит ул, бәрәс кенә көйөнә бала һымаҡ ҡарап үҫтергәйне. Бәлки, кәзәһен һуйҙыртып яңылышҡандыр ҙа әсә, юҡ-юҡ тигәндә лә, бер сынаяҡ тирәһе һөт биреп килде әле ул. Ейәнсәренә ярап ҡала торғайны. Юҡ шул, бөгөнгө көн ҡәҙерле. Мөхәмәтйән әйтеп тә ҡараны әсәһенә:

— Тотонмай тор әле, берәй яйы килеп сығыр. Яраларым бер аҙ төҙәлһә мин дә эшкә сығырмын.

— Эшләү менән дә кем аҙыҡ бирһен. Колхоз келәтендә елдәр генә уйнай, бөртөк ашлыҡ ятһасы, — тип аңлатты әсәһе. — Мал табылыр, иҫән булһаҡ. Һаулыҡты ҡайтарыуы ғына ҡыйын.

Әсәһе менән килеште улы ла:

— Мал табылыр ҙа ул, гел генә тормош ошолай бармаҫ, фашистарҙы еңеү көнө етер. Ана, үҙҙәрен пыр туҙҙырып, ил сигенә барып еткәндәр. — Шулай һөйләнде Мөхәмәтйән, үҙе олоғайған әсәһенә, бәләкәй балаға, еңгәһенә ҡараны. Тилмереп ултыралар, йәл инде, йәл. — Тотон улайһа, әсәй, кәзәне.

Өйҙө лә түҙә алмаҫлыҡ һалҡынлыҡ биләне. Шул саҡлы штраф түләп, һыйырҙан да яҙғас, урманға аяҡ баҫырға ла ҡурҡты әсә. Урам кәртәләрен һүтеп яғыуҙан да хәйерлерәге ҡалманы.

Көндө көнгә ялғап, ғүмер үтә биҙа менән. Майкамал менән Мәүлиҙә, ҡар йыра-йыра, урманда ниндәй ҙә булһа ризыҡ табырға эҙләнеп тә йөрөнөләр. Беләктәренә силәк тә элеп алдылар.

— Ниндәй аҙыҡ табырбыҙ икән һуң? — тип аптыраны Майкамал. — Йәй бер хәл, ҡыш йөҙө бит әле.

— Табыла ул, йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә. Ҡойолмай ҡалған миләшкә, баланға осрауыбыҙ ихтимал. — Һаман да әйҙәй Мәүлиҙә.

— Ҡурғы буйына төшәйекме, әләйгәс?

— Балан була торғайны уның битләүендә.

Киттеләр тәрән йырғанаҡҡа, өмөттө — ат, хыялды ҡош итеп. Киттеләр тигәс тә, билдән ҡар кистеләр. Ҡышҡы урман үтә күренмәле, ҡараш әллә ҡайҙарғаса барып етә. Әммә бер ерҙә лә ҡыҙарып ултырған ҡыуаҡ күҙгә салынмай.

— Юҡтыр, әхирәт, беҙгәсә үк йыйып бөткәндәрҙер. — Майкамал арып туҡтаны.

— Йә ҡоштар супләгәндер, уларға ла ашарға кәрәк тәһә. — Мәүлиҙә лә уфтана.

Эргәлә генә тармаҡ ботағы айырылып ергә һәленгән ҙур имән ултыра. Ботағына ҡар өйөлөп, аҡ бүрек кейгән ҡарт бабайға оҡшаған. Майкамал бер ботағынан ҡарын һелкетеп төшөргәйне, бармаҡ башындай сәтләүектәре күренде. Үҙ-ара ҡарашты ҡатындар.

— Ашарға ярай микән?

— Ярайҙыр ҙа бәлки, урыҫтар сусҡаларына ашата бит төйгөсләп. — Майкамал Аняларға барғанда күргәнен әйтте.

— Ағас емеше инде барыбер. Сүплектә үҫкән бәшмәктән арыуыраҡтыр.

Ымһынды былар имән сәтләүегенә. Тиреп, тып-тып силәктәренә төшөрәләр. Буш ҡайтҡансы ҡуш ҡайтһын, тинеләр. Тос ҡына ауырайҙы һауыттары. Шуға шатланып, өйгә юлландылар.

Ҡайтты ла, нишләргә белмәй, Мөхәмәтйәнгә күрһәтте йыйғанын.

— Миләш, балан-фәлән осраманы, бына, сәтләүек йыйҙыҡ.

Мөхәмәтйән ҡараны ла баш сайҡаны.

— Быны ашайҙар микән, бер ҙә белмәйем.

— Тәмләп ҡарайыҡ әле, урман сәтләүеге ише һап-һары лаһа. — Әсәһе үҙенекен сурытты һаман, йыйғандары бушҡа китмәһен, тиептер.

Улы береһен шыҡылдатып тешләп ярҙы. Эске емеше эре, таҙа, ашарға эшкинһә, ни әйтерһең! Сәйнәгәйне, йөҙө сирылып, кире төкөрҙө.

— Әсе бит был, уртты йыйырып бара. Тфү!..

— Бешергәндә нишләр, әсеһен алмаҫмы?

Әсә бер нисәһен тимер мейес өҫтөндәге суйын төбөнә һалып ҡайнатты. Тағы ярҙы Мөхәмәтйән.

— Әсеһе бер аҙ кәмегән төҫлө, ләкин барыбер өтә тамаҡты.

— Ҡурайыҡмы әллә көлгә һалып?

— Әсәй, уныһын үҙең ҡара инде: ҡураһыңмы, табала ҡыҙҙыраһыңмы — кәңәшсе түгелмен, быға са ундай менән ризыҡланмағас, — тип ҡул һелтәне улы.

Майкамал апай ҡурып та, ҡыҙҙырып та ҡыландырҙы, барыбер аҙыҡ килеп сыҡманы. Ахырҙа тауыҡтары алдына һипте. Суҡып-суҡып, китеп барҙы тауыҡтар ҙа хатта.

Баш ватты әсә, өшөп-туңып урманға барғанына үкенде. Елеккә үткән ҡар һыуығы һаман да ҡалтыратып-ҡалтыратып ала.

Ул арала Мәүлиҙә әхирәте лә килеп инде. Тәүге һорауы шул бының:

— Эшкиндерә алдығыҙмы?

— Һин эшкиндерҙеңме һуң?

— Юҡ, аҙыҡҡа барырлыҡ түгел, ағыуланып ҡуйырһың, алла һаҡлаһын!

Ике ҡатын һыҡтанды: бушҡа йөрөлдө шул, бушҡа йөрөлдө... Һөйләнеп ултырғанда, Майкамалдың башына бер фекер ҡағылды.

— Әллә, мин әйтәм, имән сәтләүеген Аня знакумға алып барайыҡмы? Сусҡаларына ашатыр, исмаһам. Беҙгә аҙ-маҙ бәрәңге бирһә лә хушһынырбыҙ.

— Теге ваҡытта ырҙынын ҡаҙған ҡатынды әйтәһеңме, әхирәт?

— Кем булһын — шул, беҙҙе һыйлаған.

— Хәлле ҡатын инде ул, — Мәүлиҙә аҙыҡ өсөн ҡар тиһеңме, диңгеҙ кисергә лә әҙер ине. Ҡыҙы вафат булып ҡуйғас, яңғыҙға яҫтыҡ та серҙәш тип, ас килеш өйөнән сыҡмай ятты. Тамаҡ барыбер үҙенекен таптыра, һауа һулап, һыу уртлап ҡына йәшәп булмай шул, эҙләргә кәрәк, хәстәрлек ҡылырға.

Икенсе көндө тағы китте ике ҡарсыҡ Ҡурғы битләүенә, ырғаҡлы ағас тотоп. Теге имән ботағы тирәһендә әй уралдылар, бөрөһөн кисә йыйып бөткәндәр икән. Йәнәшәһендә һәленгән тағы бер ботаҡ бар, ләкин ул бейегерәк. Ошонда ярап ҡалды ырғаҡлы ағас: осонанрыраҡ эләктереп тарткайнылар — туң ботаҡ шарт һынды төштө.

Йыйҙылар бер сама. Битләүгә табан баш эйгән имәндәр тағы ла осраны. Әллә күпме ваҡыт сарыф итеп, биҙрәләрен тултыра яҙҙы былар. Хәҙер шундай мәсьәләгә терәлделәр: әле үк барайыҡмы, иртәгәме?

Мәүлиҙә ҡарсыҡ ҡәтғи яуап бирҙе:

— Хәҙер үк!.. Яртылаш юлға еткәнбеҙ бит инде.

Кисләтә биреп өҫ-баштарын ҡар һырыған көйө барып ингәс, Аня ҡурҡып, текләп ҡараны быларға. Берәр биҙрә имән сәтләүеген күреп бер аптыраны.

— Аҙаштығыҙмы әллә?

— Аҙашманыҡ. Туп-тура һиңә килдек, знакум, — тип, аңлатып бирҙе Майкамал.

— Уф, туңғанһығыҙ, сисенегеҙ йәһәтерәк! — Ыуаланды знакум ҡатын.

— Юҡ, сисенеп тормайбыҙ, ошоно бәрәңгегә алмашып булмаҫмы тигәйнек, әгәр мөмкин икән. Кире һыпыртабыҙ ай яҡтыһында.

— Бәрәңгеһен бирермен. Тик иртән генә... Ана, һырма салбарығыҙ боҙланып ҡатҡан, шул килеш ҡайҙа китәһегеҙ? Сисенегеҙ, тим, киптерергә кәрәк.

Ай-вайына ҡуймай, сисендерҙе ҡатын.

— Юғалтырҙар бит беҙҙе, әллә ниндәй хафаларға төшөрҙәр, — тип тә ҡаранылар, Аня үҙ һүҙен һүҙ итте.

Майҙай йылы өйҙән сығып киткеһе лә килмәй ине уларҙың. Етмәһә, ауыҙ һыуын ҡойҙороп, тәмле бәрәңге еҫе таралған. Аня тиҙ генә мейестәге суйынын тартып сығарҙы. Өҫтәл әҙерләне. Хатта бер сынаяҡ аҫты ҡаймаҡ, тоҙло кәбеҫтә менән тоҙло ҡыяр ултыртты. Буш стакандар ҙа ҡуйҙы алдарына. Улына өндәште:

— Вася, бар, анау шешәне сығар әле баҙҙан.

Теге ваҡытта оторо ҡыланған малай, яҡын таныштай күреп, әбейҙәргә йылмайып ҡараны ла, баҙға төштө. Хәҙер Вася бөтөнләй егет рәүешенә ингән, буйсанланған.

Ике ҡарсыҡ бер-береһенә күҙ һалды аптыраушта ҡалып. Өҫтәлгә шешә килеп ултырҙы.

— Әйҙәгеҙ, ашар алдынан ошоно йотоп ҡуяйыҡ, йылынып, тәнегеҙ йомшарып китер, — тип стакан төбөнә ҡойҙо шешәнән хужабикә.

Әбейҙәр бының ни икәнен белә. Аптырап ҡалдылар.

— Ҡуй, гонаһ шомлоғо, яҙыҡ була бит ул!

— Бер ҙә яҙыҡ булмаҫ, дарыу икән тип эсегеҙ.

Өшөүҙәре үҙәктәренә үткәйне, тоттолар ҙа йоттолар ҡатындар. Артынан тоҙло ҡыяр, берәр ҡашыҡ тоҙло кәбеҫтә ҡабып ҡуйҙылар. Тәнгә әҫелек йүгерҙе, тир бәреп сыҡты. Өҫтәлдәге һәммә ниғмәттән һыйлана-һыйлана, сөңгөлдөктәре сыҡты. Бына һиңә — көтмәгәндә хан һыйына килеп эләкте былар!

Йоҡларға ла ике әхирәтте йәнәш һалды йомшаҡ түшәккә хужабикә. Арып-талған, теге үткер шыйыҡсанан һөйәк-електәре ирегән ҡатындарҙың йоҡолары ҡаты булды, таң атҡанын да һиҙмәй ҡалғандар. Иртән күҙҙәрен асһалар, яҡтырған шөйлә.

Аняның аш-һыуы әҙер ине инде. Йәнә ҡыҫтап тамаҡтарын туйҙырҙы знакум. Улар ашаған арала Вася берәр биҙрә бәрәңге лә сығарып ултыртты баҙҙан.

— Тағы берәр биҙрә имән бөрөһө килтереп китербеҙ әле, — тине Майкамал, бәрәңгенең муллығын күреп.

— Юҡ, кәрәкмәй, улай яфаланмағыҙ, йәш кеше түгелһегеҙ бит. Сускаларға ни, аш-һыуҙан ҡалғаны ла етә. Кәрәкһә, бәрәңге ваҡлап бирәбеҙ. Малдарға бесәнде лә күп әҙерләне улым, ураҡ менән урып, елкәһенә күтәреп ташыны, — тип мохтаж түгеллеген белдерҙе Аня.

— Рәхмәт инде, знакум. Изгелегең күп тейҙе. Үҙеңә лә изгелек булып ҡайтһын. — Шатланып, теләк теләне ҡатындар.

— Бөткәс, тағы килерһегеҙ. Бирермен бәрәңге үтескә булһа ла, ҡасан да бер түләрһегеҙ әле. — Ихлас оҙатты Аня, Хоҙайҙың рәхимле бәндәһе.

Яурынбашына бәрәңге тулы биҙрә ултыртып, оса-талпына ҡайтып инһә Майкамал, өйҙә йөҙҙәрен ҡараңғы шәүлә баҫҡан борсолоу менән ҡаршы алды улы менән килене. Бәрәңгене күрһәтеү ҙә уларҙың йөҙөн асманы, киреһенсә, килене ярһыбыраҡ күҙ йәшенә түгелде. Мөхәмәтйәндең дә артыҡ иҫе китмәне.

— Ҡайҙа булдығыҙ, әсәй? — тип кенә ҡуйҙы.

Әсә лә ҡыҫҡа яуапланы.

— Аняларҙа.

Әсә йөрәге, ниндәйҙер шом барлығын һиҙенгәндәй, өҙөлөп-өҙөлөп һулҡылданы. Ул арала Әминә үкһей-үкһей ҡәйнәһенең муйынына һарылды.

— Ни булды, киленкәйем? — Ҡосағына ҡыҫып, ишетелер-ишетелмәҫ һораны әсә.

— Беҙ етембеҙ хәҙер, әсәй, нишләрбеҙ икән?..

Әсә ингәндә, тәҙрәләргә ҡояш төшөп, өй яҡты ғына һымаҡ ине; ҡапыл ошо нурҙар өҙөлөп, ергә ҡойолдо, яҡтылыҡты ҡаплап, ҡара томан баҫты.

— Ауыр ҡайғы килде, әсәй...

Күҙ алдында яҡтылыҡ ҡайҙалыр, өй мөйөштәренә инеп боҫто, әйтерһең, ҡәбер ҡараңғыһы тирә-яҡта.

— Әсәйем, яңғыҙмын хәҙер мин, әсәкәйем!..

— Сеү, балам, тыныслан. Әйтмәһәң дә аңланым ни булғанын. Ҡайғыны еңер көс кәрәк беҙгә, ныҡлыҡ кәрәк. — Әсә үҙе лә, ыңҡ-ыңҡ килеп, эстән быуылып илай ине.

— Мин инде хәҙер айға яҡын илап йөрөйөм, әсәкәйем. Аяҡтан йыҡмайым тип, һиңә әйтмәнем... Бөгөн ҡәйнеш менән кәңәшләшкәс, белдерергә булдыҡ. — Әминә бауыр ите өҙөлгәндәй һулҡылдай.

— Эй, Мөхәмәтсафам, иң үткер улдарымдың береһе инең. Ниңә үҙеңде һаҡлай алманың? Ҡыҙыңды, кәләшеңде, мине — һәммәбеҙҙе етем иттең, мәңгелек юҡһыныуҙың һары утына һалдың...

Ошо урында Нурия ла телгә килде.

— Ниңә илайһығыҙ ул һеҙ? Әллә атайым ҡайтып киләме? Һи-һи... — Үҙе һораша, үҙе көлә бала, бер нимә лә аңламаған сағы шул әле уның.

Ҡыҙының һүҙҙәре тағы ярһытты Әминәне.

— Төшөбөҙҙә генә ҡайтыр инде эттәң хәҙер...

Уның һайын бәләкәс ныҡышты, «төш» һүҙен үҙенсә аңланы.

— Төшлөктәме?.. Бөгөнмө, иртәгәме?..

— И, сабый, алтын ғына ваҡытыңда ҡара ҡайғыларға күмелдең... Әйт, ҡәһәрле донъя, кем ғәйепле быға... Ошо бәләкәй сабыймы?.. — Әсә йөрәгендәге үттәй әсе ярһыуын тышҡа бәрҙе.

Мөхәмәтйән дә башын эйгән, шыҡырлатып тешен ҡыҫа. Әминә туҡтай алмай өҙгөләнә.

— Яңғыҙмын, әсәкәйем, был донъяла минән дә етемерәк кеше юҡтыр... Ҡайҙа барам инде хәҙер бәләкәсемде күтәреп?

— Яңғыҙ түгелһең, балам, һин — киленем, ҡыҙым минең, бергә-бергә йәшәрбеҙ...

Оҙаҡ һыҡташты улар, оҙаҡ ҡосаҡлашты бер-береһенә күкрәк терәп. Ныҡлы ҡараңғы йәйелә башлағас ҡына бер аҙ баҫыла төштөләр.

— Ҡағыҙын күрһәт әле, балам, ни тип яҙғандар һуң?

Әминә кеҫәһенән күп асып ҡарауҙан бөтәрләнә башлаған ҡағыҙ сығарҙы.

— Уҡып ишеттер миңә.

«Ленинградтың изге тупрағында батырҙарса һәләк булды», — тип уҡыны Әминә. Тағы күҙ йәштәренә быуылды.

— Ҡасандыр беҙ ҡыуанышып өйләнешкән ҡала ул, ысынлап та изге ер. Икебеҙҙең йөрәк ите — балабыҙ тыуған төйәк, — тине тауышы ҡалтырап килене.

— Һуғыш бөткәс барып күрербеҙ әле улымдың аяҡ эҙҙәре ҡалған ерҙәрҙе, йәме, ҡыҙым... — Әсә килененең әрнеүҙәрен нисек тә баҫырға тырышты.

— Мин башҡаса почта юлын тапамаясаҡмын. Иң ауыр ҡайғы күтәреп мин йөрөйөм шунан. Йөрәгем етмәй, почтаны ҡулға алырға ла ҡурҡам. Ошондай ҡағыҙҙарҙы тотторғанда үҙем дә бер үлеп, бер терелгәндәй. — Килен кеше почта моҡсайын мөйөшкәрәк алып ҡуйҙы.

Әсә алтынсы улын юғалтты. Бынан бер ай элегерәк өлкән улы Мөхәмәтшанан шундай хәбәр килгәйне. Алты улы, алты һулымаҫ сәскә булып, йөрәк түрендә урын алды әсәнең.

## Мөхәмәтйән

Оло ғаиләнең иң кесе ҡошсоғо — Мөхәмәтйән иркәрәк тә үҫкәндер, бәлки. Сөнки ағай-апайҙарының ҡанаты аҫтында ел-ямғыр теймәне, атай-әсәһенең йылы ҡулы күберәк тә һөйгәндер уны. 1921 йылдың аслығы аяуһыҙ киңгәткән ваҡытта ғына донъяға килде, ҡараһыу томандарға ҡапланған зарлы тормошҡа зәңгәр күҙҙәре менән баҡты. Киң һыуҙарҙың тулҡындары һәр ваҡыт хәрәкәт иткән шикелле, тормош ағымын да туҡтатып булмай: аслыҡмы ул, йәки һуғыш ғәрәсәтеме, тәбиғәт үҙ ҡанундары менән йәшәй бирә, йыл әйләнешенең ниндәй миҙгеленә ҡарамаҫтан, балалар тыуа. Ниндәй генә заманда ла бала — бала инде ул, йөрәк ите, иң ҡәҙерле йәнкиҫәк. Ата-әсә өсөн икеләге лә бала, иллеләге лә бала, тип юҡҡа әйтмәгәндәр бит.

Мөхәмәтшакир ағай менән Майкамал апай үҙәк өҙөп аслыҡтан миктәгән саҡта, сабый ауыҙына бал да май ҡаптыра алмағанға уфтанып, нисек тә ғүмерен һаҡлап ҡалырға көс һалды. Ҡулдарына бәләкәй генә валсыҡ икмәк эләкһә лә — Мөхәмәтйән өсөн. Балтырған, ҡаҡы кеүек ризыҡланырға яраған үҫемлектәрҙе бешереп, иҙеп йәки сәйнәп, йоҡа ситсаға күгәрсен йоморт-

ҡаһы шайы ғына төйнәп, балаға имеҙҙеләр. Шулай итеп Мөхәмәтйән донъяның туң сағын да, туй сағын да күреп миҙәт йыйҙы.

Мәктәпкә лә ашҡынып-алҡынып барҙы. Китаптар аша был донъяның серле йомғаҡтарын һүтеп, уның асылына төшөнөргә тырышты. Дүрт класты тамамлағас, 7-8 саҡырымдағы Ышланлыҡул мәктәбенә тәпәйләп уҡырға йөрөнө. Ете класлы белемен шул ауылда төйнәне һәм... уға артабан уҡыу бәхете теймәне. Урта мәктәп бигерәк алыҫта, унда бик хәлле ғаиләләрҙең балалары ғына уҡый ала. Был ваҡыт Шакир ағай ауырыу хәлдә ине инде, тормош тотҡаһы әсә ҡулына күсә бара. Ата-әсәһенә ярҙам итеүҙе үҙ бурысы итеп тойҙо Мөхәмәтйән.

— Уҡырға тырыш, улым, аң-белем — мәңгелек ғилем ул, — тип тә димләне Мөхәмәтшакир ағай, үҙ һүҙле малай ҡарарынан сигенмәне.

Әсәһе лә ҡаршы түгел ине уҡытырға.

— Хәҙер тормош еңеләйҙе, үҙәк өҙөлгән саҡтар артта ҡалды, яҙғаны табылыр, әрәм итмә уҡыуыңды.

— Колхозда эшләр өсөн ошоһо ла еткән, — тип кенә ебәрҙе Мөхәмәтйән, — мин бынау йәшемдә лә һеҙҙең елкәлә ятырға тейеш түгелмен.

Колхозда эшләй башланы. Ҡайҙа ғына ҡушһалар ҙа маһир тотондо ул. Бер ваҡытта ла ирегеп торманы: бесән осоронда — болон өҫтөндә, ашлыҡ сәскәндә — баҫыуҙа, иген һуҡҡанда — ырҙын табағында.

Хужалыҡта ла ҡулынан килгәнен башҡарҙы, йомош-йүнгә лә ул йүгерер ине. Атаһы ла һәр ваҡыт үҙе менән йөрөргә ылыҡтырҙы уны. Ат күрһә аһ иткән егет булып үҫте Мөхәмәтйән. Шуға ла Мөхәмәтшакир ағай ат менән бәйле барлыҡ шөғөлгә кинйә улын күндерер ине. Атай менән бергә үтер һуңғы юлдары Мәүлиҙә әбейгә утын килтерә барған йәйҙең бер көнөндә өҙөлөп ҡалды. Шунан һуң атаһы башҡаса аяҡҡа баҫа алманы. Мөхәмәтшакир ағай мәрхүм булып, атай бағышынан мәхрүм егет әсәһе өсөн йән атты, ул йонсомаһын, мохтажлыҡ күрмәһен бар тырышлығы шуға бағышланды. Йорт хужалығы, мал-тыуар ҡарау, бесән әҙерләү күберәк уның елкәһенә йөкмәтелде. Ең һыҙғанды Мөхәмәтйән, бер эштән дә тартынып торманы. Ана шулай дәртләнеп, йорт-ҡураға ышаныс, әсәгә таяныс булып өлгөргән сағында, 1940 йылда армия сафына саҡырылды. Бер ниндәй шик-шөбһәһеҙ, тыныс ҡына китергә әҙерләнде Мөхәмәтйән. Ләкин армия һынлы армияға алыныу бер ҡуҙғытыуһыҙ буламы ни, барлыҡ туғандар, нәҫел-нәсәп килеп тулды өйгә. Был ваҡытта ауылдың оҫта гармунсыһы Ҡәнзел ағаһы моңға тултырҙы ауыл өҫтөн. Уйнай-уйнай ҙа, ҡустыһынан көнләшкәндәй, әйтеп ҡуя:

— Һин минән алданыраҡ өлгөрҙөң әрмегә, һин китәһең, мин ҡаламын...

Ул оҙаҡламай үҙенең дә туп-тура ҡайнар ут эсенә барып инерен ҡайҙан белһен инде... Апайҙары, еҙнәләре, уларҙың үҫә төшкән ул-ҡыҙҙары — һәммәһе ҡосаҡ йәйеп хушлаша. Бигерәк тә әсәһе өҙөлөп-өҙөлөп ҡосағына алды.

— Хеҙмәтеңде иҫән-һау тултыр ҙа туп-тура ауылға ҡайт, Фәткел ағайың кеүек әрмелә ҡала күрмә тағы, — тип киҫәтә.

— Ҡайтырмын, әсәй, көт мине...

— Онотма, улым, атай нигеҙен дауам итеүсе һин булаһың. Нигеҙ туҙмаҫҡа, ҡотон ебәрмәҫкә тейеш. — Әсә һүҙе атай аманаты һымаҡ яңғыраны.

— Ҡото ла китмәҫ, һыуынмаҫ та. Әрме ваҡыты үтер ҙә китер, тыныслыҡ булһа...

Алыҫ юлға тәүге сығыуы ине Мөхәмәтйәндең. Күҙ талдырып, ҡалаларҙы, киң йылғаларҙы, буйын буйламаҫ, иңен иңләмәҫ болон-баҫыуҙарҙы, ҡалын-ҡалын урмандарҙы күҙәтте йәш һалдат. Әллә нисә тәүлек үткәндән һуң ғына барыр ерҙәренә етеп туҡтанылар. Был Белоруссияның Гродно ҡалаһы менән Польшаның Белосток ҡалаһы араһында ятҡан сик һыҙығы ине. Ошонда улар хеҙмәт итәһе часть — артиллерия полкы урынлашҡан. Килеп етеп, илгә, армияға тоғролоҡҡа ант ҡабул иткәс тә, туҡтауһыҙ хәрби күнекмәләр башланды. Сослоҡта, отҡорлоҡта мах бирмәгән имәндәй таҙа егет күнекмәләрҙе еңел үткәрҙе. Бәләкәйҙән эшләп, көс йыйыу бына ҡайҙа ярап ҡалды. Атҡанда ла мәргәндәрҙән мәргәне ине ул. Командир һәр ваҡыт миҫал итеп уның исемен әйтә торғайны.

— Ана Латиповтан үрнәк алығыҙ, ҡоралдың нимә икәнен дә белмәгән ауыл егете сәпте селпәрәмә килтерә лә ҡуя.

Башҡалар ҙа унан һораша:

— Ауылда һунарсы инеңме әллә?

— Юҡ.

— Кем һуң?

— Иген игеүсе. Кешеләргә икмәк тигән изге аҙыҡ үҫтереүсе.

Баҫыуҙы күрмәгән ҡала егеттәре лә бар арала.

— Икмәк үҫәме ни ул?

— Үҫә шул! Иң элек баҫыуҙа оҙон һабаҡ ҡалҡа. Унан башаҡ сыға, бойҙай икмәккә әйләнә.

Икмәктең нисек бешеүен төрлөсә аңлата-аңлата, китә көлөш, рәхәтләнәләр генә. Төрлө кеше бар арала, майҙың нисек яһалғанын да белмәүселәр... Һуңғы ваҡыт төрлө хәбәрҙәр йөрөй. Имеш, Рәсәйгә һуғыш янай. Немец фашистары Европаның күп илдәрен баҫып алған. Англияны ла, Африканы ла буйһондорорға теләй икән. Уның менән берлектә Италия, Румыния ҡоторона. Һуңынан бергәләп Рәсәйгә һөжүм итәсәктәр. Ошо хаҡта сәйәси уҡыуҙар барышында офицерҙарҙан да һораусылар табыла.

— Утһыҙ төтөн сыҡмай, — тип кенә яуаплайҙар.

— Беҙгә уяулыҡ кәрәк, шуға ла хәрби әҙерлекте көсәйтәбеҙ, тәртипте нығытабыҙ. — Шомло һүҙҙәр йышыраҡ ишетелә юғары чинлы офицерҙар ауыҙынан да.

Ысынлап та, көндөҙгө генә түгел, төнгө тактик күнегеүҙәр арта барҙы. «Отбой» яһалып, серем итәм тигәндә, «подъем» командаһы яңғырай. Тиҙ генә кейенеп, пушка янына атлығыуҙар һәр төн һайын тиерлек ҡабатланды. Орудиеларҙы маскировкалап, әллә нисә төрлө йәшереү урындары әҙерләүгә иғтибар көсәйҙе. Көндөң күберәге ергә күмелеп үтте һалдаттарҙың. Бында ла Латипов үҙенең таҫыллығын күрһәтеп өлгөрҙө. Урман араһында үҫкән егет бит инде, йәшеренгән урынды оҫта итеп ағастар менән «биҙәй». Хатта йоҡа ғына сиҙәм киҫәктәре аҡтарып, үләнлек һымаҡ та яһап ала. Маскировканы тикшереп сыҡҡан офицерҙар уға ҡарата йылы һүҙҙе йәлләмәй мәгәр.

— Маскировкалау буйынса ысын инженерһың икән, төҙөй беләһең, һалдат. Йәл, урта белемең юҡ, инженер ғәскәрҙәре училищеһына бөгөндән уҡырға ебәрерлек егетһең.

Һуғыш ваҡытында орудиеларҙы йәшереп, шундай маскировкалар яһау кәрәк нәмә микән? Бәлки, оҙайлы оборона тотҡанда кәрәктер ҙә. Төрлөсә фекерләне Мөхәмәтйән. Һуғыштың ни икәнен аңлай башлағайны инде.

1941 йылдың яҙғы айҙарына ҡарай Мөхәмәтйән Латипов хеҙмәт иткән артиллерия полкы ашығыс рәүештә сик һыҙығы буйлап нығытмалар төҙөргә тотондо. Орудиелар бетон нығытмалар эсенә йәшерелде. Ошонда уҡ снарядтар ташылды. Расчеттағы һалдаттар көн-төн пушкалары янында һаҡта торҙо. Башҡа ғәскәри төр подразделениелар ҙа сик буйына яҡыныраҡ тартылды. Артполкка яҡын уҡсы батальондар урын алды. Көн кеүек асыҡ инде хәҙер — немецтар һөжүмгә әҙерләнә, бына-быны һуғыш тоҡанасаҡ. Артполк боевой әҙерлек хәленә баҫтырылды. Бөтә орудие расчеттары үҙ батареяларында көнбайышҡа төбәлгән.

1941 йылдың 22 июнь таңы һыҙылып ҡына яҡтылыҡ һибә. Нисек атыр был таң, тыныс көн алып килерме? Әллә... Батареялар буйлап приказ яңғыраны:

— Дошман сик буйын үтмәйенсә, башлап атыу тыйыла!

Бындай приказдың айышына ябай һалдат, шул иҫәптән рядовой Латипов, төшөнөп тә бөтмәгәндер. Уның ил-ара сәйәсәткә бәйле икәнен аңлатыусы  булманы.

Фашист ғәскәрҙәре ерҙән түгел, һауанан һөжүм итә башланы. Ҡапыл немец самолеттары бомба ташларға кереште. Шул уҡ минуттарҙа ҡаршы яҡтан артиллерия снарядтар яуҙыра. Ер һелкетеп килгән танктар күренде. Шул саҡта ғына артполк яуап снарядтарын осорҙо. Һуғыш, ҡанлы һуғыш уты ялманы Мөхәмәтйән Латипов ятҡан сик буйын.

Нисә сәғәт һуғышҡандарҙыр, унынһын Мөхәмәтйән хәтерләй алмай. Кем сәғәтенә ҡараһын шундай дау ваҡытында. Тиҙ арала бомбалар, снарядтар беҙҙең орудиеларҙың күбеһен сафтан сығарып ташланы. Расчеттан да ергә тәгәрәүселәр күренде. Сафтар һирәгәйҙе. Ажғырып, хәҙер кәүҙәләрҙе ергә һеңдерер һымаҡ, имәнес танктар өҫкә менеп килә. Арттарынан мотоциклда ла, йәйәүле уҡсылар ҙа автоматтан ут бөркөтә.

— Тиҙ арала сигенергә! — тигән команда ишетелеп ҡалды.

Мөхәмәтйән Латиповтарҙың орудиеһы сафта ине әле. Бер нисә снаряд ҡына атырға өлгөрөп ҡалдылар. Сигенергә тигәс, шул орудиены һөйрәп, алыҫ түгел урманға инеп йәшеренделәр. Башҡа бер нисә расчет та орудиеларын һөйрәгән. Хәҙер урман ситендә оборона тоторға приказ бирелде.

Расчеттар буйлап  йүгереп йөрөгән батарея командиры капитан Борисов күренде.

— Әҙерһегеҙме? — тине, ашығып.

— Әҙербеҙ, ләкин төҙәүсе Яковлев һәләк булып ҡалды тәүге позицияла, — тип яуапланы расчет командиры Сәхәпов.

Капитан саҡ ҡына уйланып, Мөхәмәтйәнгә ҡараны.

— Урынына баҫ, Латипов, һин тура атаһың бит.

— Тыңлайым, иптәш капитан, төҙәүсе урынына баҫырға!

— Снаряд биреп тороусы ҡалмай, иптәш капитан, — тип хәлде аңлатты Сәхәпов.

— Башҡа расчеттан ҡушырбыҙ. — Капитан ары йүгерҙе.

Күп тә үтмәй, таҙа йәш егет килеп етте.

— Сәхәпов орудиеһымы?

— Нәҡ үҙе.

— Мин һеҙҙең ҡарамаҡта. Ҡайҙа снарядтар?

— Ана, йыуан ҡарағай артында, йәшниктәрҙә.

— Ташырға мөмкинме?

— Ташы, егет, ташы.

Егет бер йәшникте бер үҙе күтәрә лә килә.

— Бирәбеҙ хәҙер кәрәген фашистың, — тип һөйләнә үҙе.

— Батарея-я, бойға әҙерләнергә! — тигән командаһы ишетелде капитан Борисовтың.

Тәүге позицияла һаман ҡаты алыш бара ине әле. Тешкә тейерлек шығырлау менән тимергә тимер бәрелешә. Пехота һалдаттары танктарға яныусы шыйыҡса ырғытып, бер нисә ҡорос үлем машинаһына ут ҡабыҙҙы. Ләкин дошман һөжүмен туҡтатыу мөмкин түгел ине. Оҙаҡламай пехотаның алышы ла һүнеп ҡалды.

— Танктарға ҡаршы огонь!

Пушкалар, гөрһөлдәтеп, бер нисә снаряд осорҙо. Латипов төҙәп атҡан снарядтар ҙа танктар алдына төшөп шартланы. Утлы туҙан ҡойоно араһынан йүнләп күреп тә булмай: яндымы берәй танк, юҡмы? Әммә имәнес машиналар бер нисә минутҡа тиҙлектәрен әкренәйтте. Һауала ла ҡыйылып-ҡыйылып осҡан беҙҙең самолеттар күренде. Шунда уҡ немецтарҙыҡы ла пәйҙә булды. Әйтерһең, күкте ифрат дәү иңкештәр басҡан: шыжлап, берберенә ташланалар. Беҙҙең самолеттар дошман биләгән позиция өҫтөнә күпмелер бомба төшөрһә лә, юҡҡа сығара алманы һөжүмдәрен. Киреһенсә, беҙҙең әллә нисә самолет янып, ергә ҡаҙалды. Ҡалғандары ҡайҙан килгән — шул яҡҡа инеп юғалды. Урман буйына ла фашистар ябырылды.

— Сигенергә!..

Был команданан һуң, әллә күпме ваҡыт туҡтамай, артҡа — илебеҙ ҡуйынынараҡ үтеп инергә тура килде. Тағы ла ҡалынраҡ урманға инеп туҡталдылар. Һалдаттарҙың ҡобараһы осҡан: был тәүге тапҡыр дошман менән алышыуҙары ине бит...

Урманда орудиеларҙы боевой әҙерлеккә ҡуйып, байтаҡ көттөләр фашистарҙың һөжүмен. Ә улар һөжүм итмәй ҙә итмәй. Тик ике яҡ флангта ла, алыҫта гөрһөлдәүҙәр бара. Бында, артполк урынлашҡан ерҙә, тынлыҡ. Хатта күңелдәре күтәрелде һалдаттарҙың.

— Нимә булды быларға? — тип аптыраны Мөхәмәтйән дә.

Снарядсы егет осоноп китте.

— Әйттем бит дөмөктөрәбеҙ тип, дөмөктөрҙөк. — Бала кеүек һикерәңләп шатлана. Үҙе лә 17-18 йәш тирәһендә генә ине әле.

— Был тынлыҡ тиккә түгелдер, — тип икеләнде лейтенант Сәхәпов. Төҙәүсе янына килеп, иҫкәртеп китте: — Уяу бул, Латипов, дошман аҫтыртын ул, аңғармаҫтан сәпәүе ихтимал. Мин башҡа расчеттарҙы тикшереп әйләнәм.

Сәхәпов артынса уҡ ахылдап бер кесе лейтенант килеп туҡтаны.

— Лейтенант ҡайҙа?

— Ана ул, күрше орудие янында.

Теге һөрән һалды:

— Лейтенант, полк командирына хәҙер үк!..

Сәхәпов үтешеләй Латиповҡа өндәште:

— Минең урынға һин ҡалып тораһың.

Үҙе кесе лейтенант артынан сапты.

Сәхәповты көтөп алғансы әллә күпме ваҡыт үткәндәй тойолдо. Көткәнгә минуты ла сәғәттәй, ысынында ул тиҙ әйләнде. Йыйып, аңлатты йәһәт.

— Дошман ике флангының оборонаһын өҙгән. Беҙ йәнә сигенергә тейешбеҙ.

Осона ҡараһаң бүрегең осоп төшөр ҡарағайҙар араһынан, орудиеларҙы һөйрәп, әллә күпме барҙылар. Урмандың теге башына ла етәләр, буғай, ағастар һирәгәйҙе. Ах, был ниндәй ғәләмәт, фашистар улар сигенгән тарафтан ут һиптерә. Шул саҡ теге кесе лейтенант ҡабат күренде.

— Лейтенант, һеҙҙе полковник саҡырта!

Сәхәпов үтә борсоулы йөҙ менән әйләнеп килде.

— Беҙ ҡамауҙа ҡалғанбыҙ. Подразделениеларҙың ҡайһы берҙәре әсирлеккә төшкән. Беҙгә ҙур көскә ҡаршы һуғышыуҙан файҙа юҡ хәҙер, нисек тә әсирлеккә төшмәҫкә, төркөмдәргә бүленеп, ҡамауҙан ҡотолоу юлын эҙләргә... Аңлашылдымы?

— Тарҡалабыҙмы ни? — Һорай һалды Латипов.

— Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, шулай.

— Орудиеларҙы нишләтәбеҙ?

— Беҙҙең арттан уҡ минерҙар шартлатасаҡ уларҙы... Хәҙер һәр берегеҙгә —пехотанан ҡалған автомат, берәр генә патрон... Ул-был килеп сыҡһа, үҙегеҙ өсөн... — Был һүҙҙәрҙе әйткәндә лейтенанттың тауышы ҡалтыраны. Иҫкәртте яңынан. — Тик әсирлеккә төшмәҫкә!..

Төркөмдәргә бүленделәр. Сәхәпов үҙе янына Латиповты саҡырҙы.

—Һин — минең менән... Тағы кемдәр? — тип һораны.

— Мин, — Снаряд биреүсе ине был.

Ҡәйүмов менән Ишморатовты алды лейтенант. Башҡалар төркөмдәргә бүленеп, төрлө яҡҡа таралды.

Шым ғына, һаҡ ҡына бер аҙ барғас, алда артыҡ киң булмаған йылға күренде. Уның тирә-яғы ваҡ ҡуйы ҡыуаҡлыҡ менән ҡапланған. Шулар араһына барып сумдылар. Дозорға снаряд биреүсе Трофимовты билдәләне Сәхәпов.

— Ныҡ күҙәт, ләкин бер үк тауыш сығара күрмә. Ни булһа ла миңә белгерт, йәме.

Егет өҫ-башына япраҡлы ботаҡтарҙан маскировка ҡуйып, йылға буйынараҡ, тирә-яҡ асығыраҡ күренгән ергә китте.

Сәхәпов ҡалғандарға аңлатты:

— Беҙгә, әгәр немецтар күренмәһә, ана тегендәге урманға барып урынлашырға кәрәк, — Ул алыҫта ҡарайған яҡҡа күрһәтте. Бер үк ныҡ булығыҙ... Хәҙергә — ял саҡ ҡына.

Ҡараңғы төшөр алдынан ғына йылғаның арғы яғынан ике мотоциклға тейәлгән фашистар үтеп китте. Шарҡылдашып көлөшөп, нимәлер һөйләшәләр, шатланалар, ҡәһәр төшкәндәр!.. Лейтенант бинокленә күҙ терәп оҙатты быларҙы.

— Тимәк, йылға буйын фашистарҙың һалдаттары һаҡламай, ара-тирә ҡарап ҡына үтә, — тип һығымта яһаны Сәхәпов.

Ныҡлап ҡараңғы төшә башланы. Алыҫтараҡ сигнал ракеталары һауаны ярғыланы. Юл асыҡ ине быларға. Киҫкен хәлгә осрамай киселде йылға. Бил ҡайышына аҫылған фляғаларына һыу тултырырға ла өлгөрҙөләр. Артабан ҡаса-боҫа теге урманға һыпырттылар. Таң да һыҙылды. Алда иген баҫыуы, арыраҡ ауыл күренде. Иген баҫыуына инеп йәшенделәр. Баҫыуҙы танктар ярғылаған, күп өлөшө янып, көлө генә ҡалған.

Баҫыуҙың ауылға терәлгән ситендә тағы туҡталдылар. Сәхәпов былайыраҡ фекер йөрөттө:

— Фашистар беҙҙән алда өлгөргән алға китергә. Был ауыл оккупацияла булырға тейеш хәҙер. Разведка ебәрергә, кемдәндер һорашырға ине.

Сыҙаманы Ҡәйүмов, һорап ҡуйҙы:

— Беҙ ҡайһы тирәлә икән хәҙер?

— Әллә ҡайҙа түгел, — тине лейтенант картаһына күҙ һалып. — Гродно өлкәһендә генәбеҙ әле. Смоленск—Вязьма йүнәлешенә һуҡтырырға кәрәк. Беҙгә ориентир — оло автомобиль юлы үтә унан. Тирә-яғы ҡалын урман, һаҙлыҡ. Юлға сығыуы хәтәр, әлбиттә. Бер нисә саҡырым урман эсенән барырбыҙ... Ә хәҙер ауылға разведкаға — Ҡәйүмов менән Латипов. Әҙерләнегеҙ.

Мөхәмәтйән менән Рәсим иген баҫыуына инеп юғалды. Шуныһы һәйбәт әле: баҫыу ауылдың осона уҡ терәлгән. Ситендәге ҡуйы ғына урынға барып ятты былар. Күҙәтәләр, тыңлайҙар. Тауыш-тын юҡ. Ята биргәс, һыйырын ҡыуып бер ҡарт яҡынлашты. Нисек туҡтатырға уны? «Тел» алған разведчик һымаҡ, бәреп йығып булмай бит инде. Нисек тә иплә өндәшергә ҡарар иттеләр. Улар тапҡырына еткәс, Латипов саҡ ҡына башын ҡалҡытты.

— Отец, — тип өндәште.

Ҡарт һиҙгер икән, өндәшеүгә баҙап, шып туҡтаны. Мөхәмәтйән ҡулы менән үҙҙәре яғына ишараланы. Тирә-йүнгә ҡарана-ҡарана сүгәләп, улар янына килде ҡарт.

— Сеү!.. Шым ғына. — Ул бармағын иреренә терәне. — Ҡурҡмай нисек килеп сыҡтығыҙ бында?

— Немецтар бармы ауылда?

— Бар. Бер төркөмө ҡалды әле. Ҡалғандары ары китте, Мәскәүҙе алабыҙ тип.

— Мәскәүҙе алабыҙ тип?!.

— Эйе, Мәскәүҙе.

— Күпме улар?

— Күп. Армия инде, армия. Танктары ла, пушкалары ла бихисап.

— Улай икән... Ҡалғандары нишләй әле?

— Улары кисә төн буйы эсте, беҙҙең сусҡаны атып йығып ашанылар. Иртән күренмәйҙәр әлегә, бәлки, айнып бөтмәгәндәрҙер.

— Күпме улар?

— Унлаған һалдат. Ауылда тәртип урынлаштырабыҙ, полицайҙар, староста ҡуябыҙ, тиҙәр. Бөгөн халыҡты йыймаҡсылар.

— Ә төп армия ҡасан үтте бынан?

— Кисә үк. Ауылда бер төркөмө генә туҡталды.

— Беҙҙекеләр менән һуғыш булдымы һуң?

— Булманы. Беҙҙең һалдаттар күренмәне.

— Анау урманға нисек инеп китеп була?

— Ауыл аша түгел инде, ана, уңдараҡ иҫке йылғаның ярлауығы буйлап ҡыуаҡтар үҫкән — шул урманға барып төртөлә.

— Немецтар һеҙҙең өйҙә йоҡлап ятмаймы?

— Юҡ. Улар Михайға урынлашты. Өйө ҙур уның.

Ҡәйүмов үҙ яғын ҡайырҙы.

— Олатай, бер аҙ ашарға табып булмаҫмы?

— Була ла бит, нисек...

— Ошонда килтерергә инде.

Ҡарт йәнә бармағын өҫкә күтәрҙе.

— Стоп!.. Мин хәҙер Любаны ебәрәм. Мин бер былай, бер тегеләй үтһәм, шик тыуҙырырмын. Кескәй баланы абайламаҫтар.

Бәләкәй биҙрәгә төйөнсөк һалып, 8-9 йәштәрҙәге бала килеп тә етте.

— Мәгеҙ, ҡартатайым һеҙгә аҙыҡ ебәрҙе, — тине ҡыҙ, тауышын да баҫмай.

Хәҙер инде Мөхәмәтйәнгә ирененә арҡыры бармаҡ терәргә тура килде. Төйөнсөктө алдылар ҙа, кирегә шыуыштылар.

— Оҙаҡланығыҙ, ҡояш күтәрелә бит инде, — тип ҡаршыланы Сәхәпов.

Мөхәмәтйән ҡарттың ҡайҙан юл өйрәткәнен генә әйтте, шунда төшөп тә киттеләр. Урманға инеп, тәрән генә соҡорлоҡҡа юлыҡтылар.

— Ял итеп алайыҡ ошонда, — тине лейтенант.

Йәтешләп ултырғас, Ҡәйүмов Рәсим төйөнсөктө асып ебәрҙе. Бөтәһенең дә ауыҙы йәйелде: ике түңәрәк икмәк, мул ғына сусҡа майы ине эсендә. Берәр телемде сусҡа майы ҡушып ҡайырғас, Сәхәпов һораша башланы.

— Ҡайҙан алдығыҙ быны, кемде күрҙегеҙ?

Ҡәйүмов менән Латипов түкмәй-сәсмәй һөйләп бирҙе.

Тамаҡ туйҙырғас, фляжкалағы һыуҙы ғоңҡолдатҡас, кәйефтәре күтәрелде быларҙың. Йоҡо баҫыуҙың әҫәре лә ҡалманы. Һөйләшеп киттеләр, ныҡлап таныштылар: Сәхәпов — Татарстандың Тетюши ҡалаһынан икән, Волга буйынан. Һуғышҡа саҡлы уҡ офицерҙар мәктәбен тамамлаған, фин һуғышында ҡатнашҡан, картография, разведка менән яҡшы таныш. Ҡәйүмов Рәсим — Башҡортостандан, Стәрлебаш яҡтарынан. Һуғышҡа тиклем комбайн менән ашлыҡ урған. Трофимов — Себерҙән, Зима тигән станциянан. Бер нисә ай ғына тимер юлында эшләп алған. Ишморатов — удмурт егете, тыуған яғында иң оҫта тула һуғыусы булған.

Иркенләп һөйләшергә ирек бирмәне Сәхәпов, яҡты көҙҙә урмандан һыпыртып ҡалырға, күҙ бәйләнгәс ырата алмаҫтар, юғиһә. Көн буйы барҙылар, кисләтеп һаҙлыҡ урынға килеп туҡталдылар.

— Төндә һаҙлыҡҡа инеү хәүефле, батҡан хәлдә, үҙенә һурыуы бар, — тине лейтенант. — Ошонда үткәрәйек төндө.

Был юлы дозорға Латипов баҫты, ярты төн тирәһендә Ҡәйүмовты уятты. Арыу ғына йоҡлап, хәл алып, таң аттырҙылар. Сәхәпов картаһын йәйҙе. Бармағын йөрөтөп, ниндәйҙер төрткөләр төртөп, тикшерҙе лә:

— Беҙгә төньяҡҡараҡ тартырға кәрәк. Смоленск йүнәлешенән ныҡ ситләшергә ярамай, — тигән ҡарарға килде.

Ә нисек һаҙлыкты үтергә һуң? Бында ла Сәхәпов ярҙамға килде: һаҙлыҡ буйҙарын тикшереп сыҡты. Йөрөнө-йөрөнө лә, бер урынға туҡталды.

— Бына ошонан. Күрәһегеҙме, күрәндәр ике яҡҡа ярылған. Тимәк, үтеүселәр булған.

Хәнйәре менән һәр кемгә таяу ағас киҫеп бирҙе лә алдан үҙе төшөп китте. Таяғы менән төрткөләй-төрткөләй, бик абайлы бара.

— Берегеҙ ҙә минең эҙҙән ситкә тайпылмағыҙ! — Ҡаты иҫкәртеп алды лейтенант.

Һаҙлыктан үтеү ике-өс саҡырымға барып баҫҡандыр, ҡояш төшлөккә үк күтәрелә яҙҙы. Инде арғы яҡҡа еттек тигәндә, артта шап-шоп һыу сәсрәгәне һиҫкәндерҙе быларҙы. Бөтәһе бер юлы артҡа әйләнде. Баҡһалар, Ишморатов күкрәгенән батҡан, сығырға маташа. Шунда уҡ таяҡ һондолар уға. Ауыр кәүҙәле егетте көс-хәл менән ҡотҡарҙылар.

— Ғәйеплемен, иптәш лейтенант, яңылыш ситкә тайпылғанмын... Ысынлап та, аяҡтан ниҙер һөйрәгәндәй, һура икән дә һаҙлыҡ.

— Ярар әле, һаҙлыҡ йоторға өлгөрмәне, юғиһә, һыу ҡорто аҙығына әйләнер инең. Әйткәнде ҡолағыңа киртеп ҡуй, бер аҙым да ситкә баҫмаҫҡа, — тип аңдып барырға саҡырҙы офицер.

* * *

Тағы бер нисә көн ҡоро урман аша барҙылар. Ашау хәҙер урманда осраған емеш-еләк, көпшә-фәләнгә терәлде. Йонсоу, арыу баҫты. Сәхәпов һаман ҡыҙҙырҙы.

— Беҙгә фашистарҙы уҙып китергә кәрәк. Улар ҡайҙалыр барыбер беҙҙең ғәскәрҙәрҙең ҡаршылығына осраясаҡ. — Ҡеүәт бирә-бирә, ышаныс тыуҙыра-тыуҙыра, алға әйҙәне. Урман тамамланған бер асыҡлыҡта йылға ярына килеп терәлделәр. Һаҡ ҡына күҙәтәләр: нисек алға үтергә, фашистар бармы был тирәлә? Тыныс һымаҡ. Ләкин ҡабаланмаҫҡа ҡушты Сәхәпов.

— Ашыҡҡан — ашҡа бешкән, көтәйек әле.

Хәтһеҙ генә көтөп яттылар. Нәҡ ҡаршы яҡҡа фашистар тейәлгән машина килеп туҡтаны. Сисенешеп, һыуға һикерҙе былар. Сәп тә сөп, бер һикереп, бер сумып йөрөнөләр ҙә, машинаға кире тейәлделәр. Берәүһе ҡалды бит тороп, етмәһә, был яҡ ярға сыҡты. Тын да алмай күҙәттеләр уны. Ҡолағына бышырланы Трофимов лейтенанттың:

— Суҡындырайыммы?

— Тсс... Тукта, ҡарайыҡ, уйлашайыҡ.

Лейтенант та, быны ҡулға төшөргәндә һәйбәт булыр ине, тип уйлай, буғай, киҫкен генә тыйып ҡуйманы Трофимовты. Бармаҡ менән яҡынырак килергә ымланы уға.

— Көсөң етерме һуң?

— Етер. Мин көрәшсе.

— Ата күрмә яңылыш. Бер тауыш сығарма, иң элек ауыҙын ҡаплап, бынау иҫке сылғау менән томала. Хәҙер үк йәтешләп йомарлап ал сылғауҙы. Бына бысаҡ һиңә, бер-бер хәл сыҡһа, тын алырға ла өлгөрмәһен. Эләгәнитә ҡалһаң, бер үҙең инең. Төшөндөңмө?

— Төшөндөм.

Арҡаһынан һиҙелер-һиҙелмәҫ этеп ҡуйҙы лейтенант.

Немец ярға уҡ сығып, бер ҡыуаҡ төбөнә ятты. Ҡулын бәүелтә-бәүелтә ни ҡылаһалыр, көй көйләйме, уныһын кем белһен инде.

Трофимов, һеләүһен һымаҡ, бер үләнде лә ҡыштырлатмай, теге ятҡан ҡыуаҡ артына боҫто. Бер талай япраҡ араһынан ҡарап торҙо. Фрр, тип ҡош осҡандай ғына тауыш ишетелеп ҡалды: Трофимов фашистың ауыҙын томалап та өлгөрҙө.

— Бар ярҙамға, — тине лейтенант Латиповҡа.

Мөхәмәтйән, йылғыр кеҫәрткеләй шыуышып, барып та етте. Яланғас немецты һөйрәп килтерҙеләр. Төпкәрәк, урман эсенәрәк индерҙеләр. Сәхәпов урыҫсалап та, араһында бер-ике немец һүҙе ҡушып та, ымлап та һорау ала башланы.

— Немецтар ҡайҙа? Шнель, шнель!

— Москоу, Москоу, — Көнсығыш яғына бармаҡ төрттө әсир.

— Мәскәүҙе алғандармы?

Баш сайҡай теге. Лейтенант карта сығарҙы.

— Күрһәт, ҡайҙа немец армияһы.

Дорогобуж тирәһен күрһәтте немец.

— Был ниндәй урын һуң?

— Могилев, Могилев, Днепр, — тип ҡабатланы әсир.

— Яҡында ауыл бармы?

— Я, я, — тине немец.

— Һеҙҙең һалдаттар ҙа шундамы?

“Я“ ла “я“ тағы.

— Күпме? Полк? Батальон?

Ҡулындағы бармағын дүрт тапҡыр бөкләп күрһәтте немец.

— Аңлашылды...

Һөйләште былар: Сәхәпов — немецса, немец — урыҫса. Эс тырнап көлөр инең дә... Ярамай. Сәхәпов тағы эш ҡушты Трофимовҡа:

— Бар, еренә еткереп ҡуй инде быны. Беҙ тиҙерәк йылғаны кисеп, арғы урманға ырғыйыҡ. Улар башта был урманды ботарлай башлаясаҡ, уғаса беҙ тегеһендә булабыҙ.

Йылғаны кискәндә Трофимов та ҡыуып етте. Бер нәмәгә ҡарамай, был бишәү ҡыуаҡтан-ҡыуаҡҡа, түңгәктән-түңгәккә күсеп, ышыҡлана-ышыҡлана урманға барып инде. Унда ла туҡтарға уйламаны лейтенант, ҡулы менән әйҙәй-әйҙәй йүгереүен белде. Әллә күпме барғандан һуң ғына йәйпәк күлдең уртаһындағы күрән, ҡамыш, ҡыуаҡ ҡаплаған кескәй утрауға инеп йығылдылар.

— Ошонда арыу булыр, бындай күлгә инергә немец баҙнат итмәҫ.

Таңға саҡлы шунда ҡалдылар.

Таң тигәнең шул — ҡыуаҡ ярып, ғаңғылдашҡан тауыш уятты уларҙы. Бишеһе биш урында шыпырт ҡына күрән араһындағы һаҙлыҡҡа тығылды. Немецтар эҙәрлекләп килеүенә шик ҡалмағайны. Әй йөрөй фашистар күл тирәләй ҡысҡырышып, ниҙер һөйләшеп. Утрауға бармаҡ төртәләр. Инмәксе, күрәһең, шунда былар. Бер-икеһе төшә лә башланы һыуға. Нишләргә хәҙер? Атырға ярамай. Атып та ни ҡылаһың, үҙҙәре өсөн берәр генә патрон, ҡайҙалығыңды белдереү генә был. Бирелеү хаҡында уйлау ҙа юҡ.

һыуҙы кисеп, утрауға яҡынлаша бит немецтар. Сәхәпов йәшеренгән еренән баш та ҡалҡытмай, тимәк, ташланырға түгел тегеләрҙең өҫтөнә. Энәгә ҡаҙалғандай, сәнселеп ята бирә былар, тән ҡорошторop.

Шөйлә яҡынлашты ҡамарға килеүселәр. Шул саҡ берәһе аҡырып ебәрҙе. Әллә күреп ҡалғанмы утрауҙағыларҙы? Сәхәпов саҡ ҡына ҡалҡынды, башҡалар ҙа һикерергә әҙер. Ләкин Сәхәпов ҡулын һиҙелер-һиҙелмәҫ аҫҡа төшөрҙө, кире ятырға, тигәне ине уның.

Ул арала немец тағы һөрән һалды. Шау-шыу килеп, башҡалары шул фашист янына ашыҡты. Теге һаҙлыҡҡа батҡан икән дә, күмәкләшеп, саҡ һөйрәп алдылар. Артабан автоматтары тыҡылданы: һиптерәләр пуля былар утрауға. Ҡасыусыларҙың яҡын ғына сумып ятҡанын аңдымай, ҡыралар ғына утрау уртаһын. Пулялары уларҙың өҫтөнән ары оса. Аттылар, аттылар ҙа туҡтанылар. «Капут совет», тигәнерәк һүҙҙәр әйтеп, ҡул һелтәп, кире сыҡтылар һыуҙан.

Ҡотолдо сәхәповсылар, әжәл урап үтте. Ары сығып йомолдолар. Барабара тәндәрен ҡысыу баҫты. Ҡараһалар, һөлөктәр һырыған. Туҡтап, тиҙтиҙ таҙарынып, тағы йүгерҙеләр. Алда, киң генә бер асыҡлыҡта, ауыл күренде.

— Шунда инеп сығаһы ине нисек тә, — тигән ҡарарға килде Сәхәпов. — Әйҙә, минең менән разведкаға, Латипов.

Сәхәпов менән Латипов боҫа-боҫа бер йорттоң ырҙыны артына барып ятты. Лейтенант бинокль аша ауылды күҙәтә.

— Ай матур ауыл икән, урамы ла хатта урманлы! — тип һоҡланды.

— Фашистар күренәме һуң?

— Үткеләйҙәр. Ҡунаҡлағандар улар был ауылға.

— Нишләйбеҙ, иптәш лейтенант, инәбеҙме?

— Белешергә ине шул. Унан һуң, әҙерәк аҙыҡ табып булмаҫмы?

Аҙыҡ һүҙен ишеткәс, Мөхәмәтйән тамшанып ҡуйҙы: нисә тәүлек инде elәк-емеш ҡапҡылап, бәшмәк көйҙөрөп ашап ҡына киләләр, ҡарын буш, өҙлөгөлгән.

Аҙбары тирәһендә бер йәш ҡатын күренеп ҡалды. Нимә менәндер мәшәҡәтләнә. Башҡа кеше юҡтыр, күрәһең, тынлыҡ ихатаһында.

— Әйҙә, бәрәңге ыҙаны аша шыуышайыҡ, — тип кәртә араһынан эскә үтте лейтенант.

Ярай әле, ауыл урамында йыш-йыш ағастар үҫә, был өйҙөң дә тирә-яғы баҡса. Тиҙ генә шыуышып, аҙбар артындағы тиҙәк өйөмөнә ышыҡландылар. Бер кем дә күренмәй, теге ҡатын ҡабат сыҡмай.

— Әллә өйөнә инергәме? — тине Сәхәпов шыбырлап.

— Хәтәр бит, көтәйек әле.

Оҙаҡ ҡына көттөләр. Бына ҡатын йәнә ишеге алдында. Был яҡҡа килә. Яҡынлашҡас, лейтенант шым ғына өндәште:

— Барышня, ә, барышня...

Бағаналай ҡатты йәш ҡатын, башын ҡырын һалды. Ишетте, буғай. Эйе, ишетте.

— Барышня, беҙ совет һалдаттары, кил әле яҡынырак, ҡурҡма.

Аҙбарының артынараҡ килде. Күрҙе. Ҡул менән ымлап, аҙбарға төртөп күрһәтте. Шунда инегеҙ, тиеүе.

Аҙбар яҡшы эшләнгән, эсендә тауыҡ йәки ҡаҙ кетәгеме, буралған урыны ла бар. Шунда индереп, йоҙаҡланы ла ҡуйҙы барышня.

— Тауышланмай ултырып торoғoҙ, — тине лә юғалды.

Юҡ был һаман. Мөхәмәтйәнде ҡурҡыныс уйҙар биләп үтте.

— Әллә немец комендатураһына киттеме?

— Белмәйем, ысынлап та шулай булһа, ҡотолоу юлын эҙләргә кәрәк. — Лейтенант түбә таҡталарын әкрен генә төрткөләп алды. — Әһә, береһе күтәрелә, ҡаҙаҡланмаған, шуны асып ҡуяйыҡ.

Ниндәйҙер түмәргә баҫып, теге таҡтаны ҡайырҙылар.

— Бар, һин өҫкә мен, Латипов, ҡыйыҡтан берәй тишек табырға тырыш. Бик һаҡ бул, мин бында ҡалам, — тип, Мөхәмәтйәнде мендереп ебәрҙе.

Тағы хәтһеҙ ваҡыт үтте. Ихатала немецса һөйләшкән тауыш ишетелде.

— Ах, сволочь! — Теш ҡыҫты лейтенант. Бысағын тотоп ишек яңағына һөйәлде.

Бер аҙҙан тауыш тынды. Ел ҡапҡа асылып ябылғандай булды. Кемдер аҙбарға килеп инде. Шатырлатып йоҙаҡты аса башланы.

— Эй, һеҙ, йоҡлап китмәнегеҙме унда?

Был теге «барышня» ине. Инеү менән һорау бирҙе лейтенант.

— Әллә немецтар бармы өйөгөҙҙә?

— Бар берәүһе. Миңә ҡуна төштө.

— Бер үҙең генә йәшәйһеңме ни?

— Үҙем генә, атайым менән әсәйемде аттылар бит, әҙәм аҡтыҡтары, йыртҡыстар, — тип, лейтенанттың күкрәгенә башын һалып, иланы ла ебәрҙе. Йәш ҡыҙ ине был, егерме тирәһендәрәк.

— Ни өсөн аттылар һуң?

— Ни өсөн икәнен ҡайҙан беләһең, партизандарҙы таптырып язаланылар ҙа, аттылар.

— Немецтар күпме ауылда?

— Күп. Өй һайын тиерлек.

— Бынығы һеҙҙәме, әле киткәне?

— Миндә. Бер кис кенә ҡунды әле... Бәйләнергә маташты. Иҫерек ине. Бер стакан горилка тотторғайным, һушһыҙ тәгәрәне... Дөмөктөрәм мин уны барыбер. Унан күҙ күрер. Урманға ҡасырмын.

— Беҙгә Смоленскиға табан. Алыҫмы әле?

— Белоруссияның сиге был. Урман аша Смоленск өлкәһе башлана.

— Ҡайһы яҡҡараҡ тартырға кәрәк ҙур юлға?

— Төньяҡҡараҡ. Ҙур юлға сыҡмағыҙ, унан немецтар мыжғып ағыла.

— Ҡайҙан беләһең?

— Беләм. Атайым партизандарҙы эҙләп, шул тирәлә йөрөп ҡайтҡайны. Шунан шикләнеп, аттылар бит.

— Рәхмәт, барышня... Беҙгә аҙыҡ бирә алмаҫһыңмы аҙыраҡ?

— Хәҙер.

Ҡыҙ өйөнә инеп китте. Мөхәмәтйән дә түбәнән төштө. Бура эсенән сығып, аҙбар ишеге аша күҙәтә башланылар.

— Ишеттеңме инде? — тине Сәхәпов.

— Ишеттем. Йыртҡыстар... — Мөхәмәтйәндең дә һарыуы ҡайнаған.

Ҡыҙ ҙур төйөнсөк тотоп сыҡты.

— Мәгеҙ. Етерме икән?

— Еткәнсә булыр... Исемең нисек, һылыу?

— Варя. Варвара булам, — тине ҡыҙ.

— Хуш, Варвара, рәхмәт һиңә!..

— Хушығыҙ. Ун саҡырымдар тирәһе барғас, йылға булыр, шул тирәлә ҡунырһығыҙ, — тип, юл да өйрәтте ҡыҙ.

Йәшенә-йәшенә урманға инеп киткәнсе кисләй ҙә башланы. Ял итергә туҡтағас, телгә килде барыһы ла.

— Эләктерҙеләрме әллә, оҙаҡланығыҙ, эҙләргә барырғамы, тип тә уйланыҡ, тағы ун-ун биш минут килмәһәгеҙ әгәр. — Трофимов харап ҡыйыу һөйләнә.

Варвара икмәк, сусҡа майы, бешкән йомортҡа, хатта тоҙло ҡыяр ҙа һалған. Ашанылар ҙа, тағы атланылар. Йылға буйына барып еттеләр. Был яҡта яр тау-ташлы, тирә-яҡты күҙәтер өсөн дә уңайлы, Варвара әйткәнсә, шунда туҡталдылар ҡунырға.

Ҡәйүмов менән Ишморатовты алмашлап дозорға билдәләне лейтенант.

Таң атҡансы ҡымшанмағандар ҙа, күрәһең, нисек ятҡандар — шул килеш уяндылар. Ҡояш та дилбегә буйы күтәрелгән. Тиҙ генә тамаҡ ялғап алырға ҡарар иттеләр. Ауыҙға икмәк ҡапҡан саҡта ғына сыбыҡ-сабыҡ сытырланы. Шунда уҡ Трофимовҡа ымланы лейтенант, үҙҙәре ҙур таш артына йәшеренде. Трофимов лейтенанттың хәнйәрен эләктереп, сытырлау тауышы ишетелгән яҡҡа — ҡыуаҡ төбөнә барып сүгәләне. Тын да алмай күҙәтә ҡалғандары. Сытырлау яҡында, Трофимовтың эргәһендә үк ишетелде. Ҡыуаҡ һелкенеп кенә ҡалды, һалдат ташланды һә тигәнсе. Ҡатын-ҡыҙ тауышы ярып үтте һауаны. Бөтәһе лә һикереп үк баҫты. Ул арала Трофимов ауыҙын баҫып килтереп тә ҡуйҙы бер ҡатынды.

— Варвара! — Шаҡ ҡатты лейтенант.

— Ы-ы-ы...

Ауыҙы ҡаплаулы, өндәшә алмай Варвара.

— Ебәр, Трофимов! — тип бойорҙо лейтенант. Үҙе Варвараны ҡосаҡлап тигәндәй алды.

— Нишләп йөрөйһөң һин, Варвара?

— Һеҙҙе эҙләп килдем... Мин ауылда ҡала алмайым башҡаса.

— Ни булды?

— Теге хайуанды дөмөктөрҙөм.

— Немецтымы? Нисек?

— Немецты инде, кемде булһын бүтән... Башын яра саптым балта менән.

— Ай-һай!..

— Ҡоторған эт кеүек йәбеште иҫереп ҡайтып... Күлдәгемде теткеләп бөттө. Ятып тор ошонда, киләм хәҙер әҙерләнеп, тинем дә, бәләкәй балта менән сәпәнем ҡаҡ маңлайына. Иҫәңгерәне. Икенсе тапҡыр һоҫҡас, тын алышы туҡтаны. Торҙом да ҡастым урманға һеҙҙе эҙләп. — Варвара ашығып һөйләне, тиҙерәк бынан китергә кәрәклекте иҫкәртте.

Йәһәт кенә ҡуҙғалдылар. Йылға аръяғындағы урманға барып инделәр. Туҡтамай һыпырта бирәләр. Хәлдән тайҙылар. Ял ваҡыты оҙаҡҡа һуҙылманы. Аҙ-маҙ ҡапҡылап ҡына алдылар. Тағы юлға. Ҡуҙғалыр алдынан картаһын ҡараштырҙы лейтенант.

— Иптәштәр, беҙ Смоленск ерендәбеҙ хәҙер, — тип ҡыуандырҙы.

— Ҡайҙа һуң беҙҙең фронт? — тип тынысһыҙланды Ҡәйүмов.

Баш сайҡаны лейтенант «белмәйем»де аңлатып.

— Немецтар һөйләнеүе буйынса, Мәскәүҙе алыу өсөн бара хәҙер һуғыш... Тик мин ышанмайым, Мәскәү тиклем Мәскәү нисек бирелһен инде!.. — Варяның шулай әйтеүе өмөт сатҡыларын тергеҙҙе.

Тағы ашыҡтылар. Аяҡтар тупырлап бөттө. Ишморатов бөтөнләй атламаҫ хәлгә ҡалды. Унын ҡанһыраған аяғын, яулығын урталай бүлеп, Варвара бәйләп ҡуйҙы. Ишморатовты, елкәгә ҡулын һалып, алмашлап атлатырға тура килде.

Төрлө ҡурҡыныстарҙы урап ай самаһы барғас, яҡында атыу, гөрһөлдәү тауыштары ишетелде.

— Фронт һыҙығына етәбеҙ, буғай, — тип аңлатты лейтенант.

Гөрһөлдәүҙән ситкәрәк тайпылып, һаман барҙылар. Фронт һыҙығы тигәс, күңелдәре күтәрелде башҡаларҙың. Әллә ҡайҙа һаҡланып ҡалған көс, ҡапыл эркелеп, өҫтәлгәндәй. Кисләп барғанда, береһе тегеләй, береһе былай тәгәрәп китте аңғармаҫтан. Кемдәрҙер ташланды өҫтәренә. Ҡулдарын шаҡарып, аяғөҫтө баҫтырҙылар.

— Кем булаһығыҙ, ҡайҙан киләһегеҙ?

Лейтенант аңлатып бирҙе. Ышанмайҙар. Ышанырлыҡ та түгел ине: өҫ-баш тетелеп, ҡап-ҡара бысраҡҡа мансылған. Ул-былға юлыҡһалар тип, погондарын да өҙөп ташлағайнылар, етмәһә. Ярай әле үҙенең погондарын, документтарын һаҡлаған лейтенант.

Уларҙы командование алдына баҫтырҙылар, һорашып, ышанғас, бер көн ял биреп, тынысыраҡ урынға оҙаттылар. Был — Бородино менән Можайск араһында булған хәл ине. Оҙаҡламай уларҙы Себер полкына беркеттеләр. Варя ла шунда шәфҡәт туташы булып эләкте. Себер полкы менән Мәскәүҙе яҡлап һуғышҡа инде улар. Ҡот осҡос ҡыйралыш булды!.. Тағы күпмелер сигенделәр. Башҡаса сигенергә ярамай ине: артта илебеҙҙең йөрәге — Мәскәү, унда ил атаһы — Сталин!

Сәхәповты батарея командиры итеп ҡуйҙылар, Латипов — орудиела төҙәүсе, Трофимовҡа сержант званиеһы биреп, орудие командиры иттеләр.

Мәскәү йылғаһы буйында иҫ китмәле ауыр һуғыштар барҙы. Шунда снаряд ярылып, Мөхәмәтйән Латиповтың ҡулбашы яраланды, үпкәһенә снаряд ярсығы кереп ултырған. Уны, иҫтән яҙып ятҡанда, Варвара ҡотҡарған. Лазаретта ғына аңына килә Латипов. Варваранан һорашырға ла өлгөрҙө.

— Ҡалғандар нисек, иҫәндәрме?

— Ишморатов һәләк булды, — тип күңелһеҙләнде Варя.

— Лейтенант һуң?

— Иҫән. Һуғыша. Минең Альбертым молодец!..

— Әлтәфте әйтәһеңме?

— Эйе. Альберт тип йөрөтәм мин уны.

— Туҡта, туҡта, Варвара, әллә...

— Дөрөҫ уйлайһың, Миша. Беҙ башҡаса бер-беребеҙҙән айырылмаҫҡа һүҙ бирештек.

— Һай, афарин! — Мөхәмәтйән ысын күңелдән ҡотланы.

Мөхәмәтйәнде сортировка часына оҙатырға ҡарар ҡылды табиптар. Хушлашырға ваҡыт табып, Сәхәпов менән Варвара ла килде.

— Хуш, дуҫҡай, башҡаса күрешә алмаһаҡ. адресыңды яҙып алайым әле, иҫән булһаҡ, киләсәктә хатлашып торорбоҙ. Мин дә, Варвара ла яҙыр, — тип ҡосаҡлаштылар.

Сортировка часынан Мәскәүгә дауаланырға ебәрҙеләр Латиповты. Унда күпмелер ятҡас, Ҡазанға күсерҙеләр. Унда ла оҙаҡ тотҡарланманы, төпкәрәк — Омскиға, артабан Бийск ҡалаһына оҙаттылар. Шунда өс ай дауаланғандан һуң, ярты йылға тип, тыуған яғына — ауылына ҡайтарҙылар Мөхәмәтйәнде. Алты ай үткәс, яңынан медицина комиссияһы тикшерҙе, армияға яраҡһыҙ тип табылды йәрәхәтле һалдат. Яралары тынғы бирерлек түгел ине Мөхәмәтйәндең, бигерәк тә үпкәһендәге снаряд ярсығы туҡтауһыҙ үҙенең ҡайҙа урынлашҡанын белдереп, түҙер хәлдән сығарып, әрнетеп, өйкәй ҙә өйкәй...

## Таралығыҙ, томандар!..

Был донъяның бик күп ауырлыҡтарын иңенә йөкмәп ғүмер итте Майкамал апай. Иң ауыры — йөрәген ҡара ҡайғы көйҙөрөүе ине. Уның кеүек үк хәсрәт утында яныусы, бәлки, булмағандыр ҙа әле ауылда... Аһ, улай тимә, ҡасан ғазаптың еңел үткәне бар: береһе генә лә ғүмер баҡый һыҙланыу-өҙгөләнеүгә һала... Ә аллы-артлы алты, һигеҙ, тиҫтәләгәне килһә... Нисек сыҙаған Майкамал апай, нисек кисерә алған шул тиклемде?!. Бирешмәҫкә тырышты ул, күҙ йәштәре эҫе булһа ла, күп ҡойолһа, бәғерҙе ҡатыра. Хатта холҡо үҙгәрҙе апайҙың: уйсанға әйләнде, һөйләшеп тә бармай. Иңрәш менән йөҙәш — бер-береһенә өйҙәш икәне ошонда күренәлер, моғайын.

Әминә килене лә почта ташыуҙы ташлап, мәктәпкә урынлашты. Кескәй Нурия, үҫә төшөп, «нәнәй, нәнәй, би миңә мәмәй», тип бытылдап, ҡул һона. Мөхәмәтйәне бер көндө иртән тороп, кейенә башланы.

— Ҡайҙа бараһың таң менән? — тип аптырашта ҡалды Майкамал апай.

— Мин, әсәй, башҡаса имгәккә әйләнеп өйҙә ята алмайым. Хәлем арыуланғанға оҡшай, колхоз идараһына барып эш һорамаҡсымын.

— Сабыр итһәңсе бер аҙға, ныҡлап аяҡҡа баҫҡансы. — Әсә ҡаршы төшмәксе ине, Мөхәмәтйән үҙенекен ойотто. — Аяҡтарым йөрөп ята, ҡулым иҫән, ике аяҡ, бер ҡулға эш табылыр әле.

Колхоз идараһы рәйесе Мөғәллим әйҙүкләп ҡаршыланы ағайҙы. Улар бер быуын кешеләре, ҡорҙаштар тиһәң дә ярай, икеһе лә фронтовик, һүҙҙәре тиҙ беректе.

— Ғәфү ит инде, мәшәҡәттән бушап, инеп, һөйләшеп ултыра ла алмайым, ни хәл йәшәп ятыш?

— Ятам һыҙланып, мурҙалағы балыҡ шикелле борғаланып-үрһәләнеп, өйҙөң дүрт мөйөшөнә ҡарап ғүмер уҙа ла уҙа.

— Әй был һуғыш, әрәм итте бит ниндәй аҫыл ирҙәрҙе. — Уфтанды колхоз хужаһы. — Ир ҡулы кәрәк тә бит бына ауыл эшенә, табып булмай.

— Мин дә шуны уйлап килдем әле, ярҙамым теймәҫме, тим.

— Майкамал апай ни хәлдә һуң әле? — тип, һүҙҙе икенсегә борорға тырыштымы Мөғәллим, әллә әсә кешенең фекерен белергә уйланымы.

— Әсәй ни, көн-төн аҙыҡ ҡайғыртып ыҙа сигә, урман да ялан уның йөрөгән ере.

— Шулайҙыр инде, анау урмансы ла йонсотто үҙен әллә күпме штраф һалдыртып... Ауыр инде, ауыр замана.

— Миңә лә оят әсә күҙенә ҡарап тилмереп ятыу.

Колхоз рәйесе бер ара баш баҫып фекер йыйҙы, буғай, алдындағы ҡағыҙына ниҙер төрткөләп ҡуйҙы.

— Ошондайыраҡ тәҡдимгә нисек ҡарарһың икән: бригадаға хисапсы кәрәк ине, етди бер кеше. Барлыҡҡа бар ул хисапсы, йәш бер егет, елғыуарыраҡ төҫлө күренә. Эшләгәнде йүнләп иҫәпләмәй, сабыулап тик йөрөй. Ике-өс кеше килде, эш күләмен аҙ яҙған тип. Әллә шул урынға тоҫҡалаһыңмы?

— Мөмкин. Һуғышҡа саҡлы ла эшләп алғайным бит бер аҙ. — Мөхәмәтйән ризалығы белдерҙе.

— Ат беркетербеҙ, әкренләп йөрөрһөң... Ғәҙеллек кәрәк был эштә. — Йомшаҡ ҡына иҫкәртеп тә ҡуйҙы Мөғәллим.

— Әлбиттә. Бик төшөнәм.

— Улайһа, бирештек ҡул. Сания һылыуҙы саҡыртып алайым да, килешербеҙ бөтәһен дә.

Сания шундай ярҙамсы табылыуға ҡыуанды ғына. Атын да билдәләнеләр, табель дә тотторҙолар. Ҡайҙа ниндәй эш барышын да аңлаштылар. Оҙаҡ ҡына йөрөп ҡайтты Мөхәмәтйән. Әсәһе борсола ла башлағайны инде.

— Киттең дә юғалдың, берәй ерҙә йығылып ятмаһа ярар ине тип, ҡурҡып бөттөм.

— Йығылырлыҡ түгелмен хәҙер, әсәй, һинең хәстәрлегең сихәтен күрә башланым. Бына иртәгә эшкә сығам, — тип ҡыуанысы менән бүлеште Мөхәмәтйән.

— Үҙең беләһең инде, юлың уң булһын.

Әсә фатихаһы изге бер аятҡа бәрәбәр ул күңеленә иңдергән кешегә. Шулай Мөхәмәтйән дә эшкә кереште. Әле ураҡсылар, көлтә бәйләүселәр, бесәнселәр янында йөрөп, сажин менән ер үлсәп, һиҙелмәй ҙә үтә көн. Саф һауа үҙе бер дауа инде уға. Эшләп, бер тин дә аҡса, бер мыҫҡал да иген алғаны юҡ юҡлығын, уның ҡарауы, үҙен кәрәкле кеше итеп тойҙо. Майкамал апай ауыр тормошон Ҡыйҙаш өҫтөн, уны ғына ла түгел, ауылды ҡаплаған һалҡын томанға оҡшатыр ине, хәҙер ана шул ҡара ҡуйы томандар әкренләп күтәрелә барғандай. Таралығыҙ, әйҙә, томандар...

Көндәрҙең береһендә һөйөнөслө хәбәр килтерҙеләр әсәгә ауыл советынан.

— Ҡыуанығыҙ, апай, Фәткелғилем улығыҙ өсөн һеҙгә пенсия сығарғандар, районсан барып алырға әйтеп ебәрҙеләр, — тип килде сәркәтип ҡыҙ.

Ҡойолдо ла төштө әсә: улдарының вафатына ышанмай йөрөй ине әле ул. «Ҡара ҡағыҙ» ебәреүҙәре, бәлки, яңылыштыр, ҡасандыр ҡайтып төшөрҙәр кеүек ине. Хәҙер ана пенсия ебәргәндәр тиеүе энә төрткәндәй сәнсте йөрәген. Һуңғы өмөттәре шулай юҡҡа сығырмы икән инде?.. Ҡыуанырғамы быға, әллә иларғамы?..

— Ярар, барырмын, — тигән булды әсә битараф ҡына.

Икенсе көндө, ҡыҙ өйрәткәнсә, ауыл советынан кемлеген белдергән ҡағыҙ алып, район хәрби комиссариатында дөрөҫләтеп, китте банкка Майкамал апай. Унда ла оҙаҡ тултырҙылар ҡағыҙҙарҙы, шунан һуң ғына ошо эш менән шөғөлләнгән туташ ҡыҫҡа ғына аңлатма бирҙе:

— Улығыҙҙың пенсияһы йыйылып килде, бөтәһен дә бер юлы бирә алмайбыҙ, хәҙергә ошо саҡлыһы һеҙгә, апай, ана, кассаға барығыҙ, — тине.

Майкамал апайға ике меңдән ашыу аҡса тотторҙолар. Иҫәп-хисап яһағас, кассир иҫкәртте:

— Киләһе айҙа ла ошо ваҡытҡа ҡаратып килерһегеҙ.

Әсә кеҫә тултырып аҡса менән ҡайтып бара, үҙенең тамағы төйөрләнә, илап ебәрер кеүек. Эстән әрнеп һөйләнә: «Ил өсөн ҡорбандың хәйер аҡсаһылыр инде был. Һәйбәт кешенең, үҙе үлһә лә, изгелеге дауам итә...»

Майкамал апай юлда уҡ аҡсаны нимәләргә тотонорға бүлгеләп бөттө уйы менән. Аҙыҡ-түлеккә, кейем-һалымға, өйҙәге балалары өсөн, бәлки, берәй һарыҡҡа ла етеп ҡуйыр, Аняға бурыстарҙы түләргә, һәм... донъянан киткән улдары хөрмәтенә Ҡөрьән уҡытырға. Ә нисек уҡытырға һуң ул Ҡөрьәнде? Ауылда белгән кеше ҡалманы бит хәҙер, бер мулла ла юҡ...

Ҡайтҡас, бер яғына улын, икенсе яғына киленен ултыртып, аҡсаны һикегә йәйеп, бүлә башланы әсә. Уның ҡарамағында ғаиләлә кем бар — һәммәһенә өлөш сығарҙы. Ҡыҙҙарын, айырым йәшәгән килендәрен Ҡөрьән ашына саҡырырға инләне.

— Кемдән уҡытабыҙ? — Мөхәмәтйән дә әсәһен борсоған һорауҙы бирҙе.

Берәм-берәм өлкәндәрҙе һанап сыҡтылар, табырлыҡ түгел. Бына һиңә совет власының мәсеттәрҙе емереү, муллаларын һөргөнгә ебәреү һөҙөмтәһе. Әруахтар бит Ҡөрьән көтә, гонаһын ҡайҙа ҡуйырҙар емереүселәр? Эҙләй торғас, Мәүлиҙә ҡарсыҡҡа туҡталдылар.

— Ир-ат юҡ икән, ҡатын-ҡыҙ ҙа ярай ул, Ҡөрьән рөхсәт бирә быға, — тип аңлатты әсәләре.

Быныһы хупланды. Икенсе көндө Майкамал апай Аняларға юлланды. Әруахтар алдында бер ваҡытта ла бурыслы булып ҡалырға ярамай. Күпме тапҡыр үтескә бәрәңге алып ҡайтты апай, береһе өсөн дә түләгәне юҡ әле. Түләр бына хәҙер, Хоҙайға шөкөр итеп. Табын өсөн бер аҙ он, бәлки, һарыҡ та белешеп булыр әле. Һарыҡҡа етмәй ҡалһа, алдағы айҙа ҡарарҙар... Әллә Аняның үҙен дә саҡырырғамы ҡунаҡҡа? Уйланды Майкамал апай. Юҡ, Ҡөрьән ашына килешмәҫ, башҡа саҡҡа ҡалдырырға кәрәк, тигән һығымта яһаны.

Аня уны шатланып ҡаршыланы.

— Оҙаҡ ҡына килмәй торҙоғоҙ, берәй мәшәҡәт сыҡтымы әллә? — Һораша-һораша самауырын тергеҙҙе, Мәүлиҙә ҡарсыҡтың да хәлдәрен белеште.

— Донъяның ығы-зығыһы бөтәме ни, знакум. Әле бына улым өсөн пенсия сығарғандар, шуның артынан йөрөнөм районға барып. — Майкамал апайҙың иң ҙур яңылығы ошо ине, әлбиттә.

— Һәйбәт булған даһа, бәрәкәтен күрегеҙ, — тип Аня ла уның шатлығын уртаҡлашты.

— Бер яҡтан һәйбәт тә... Улымдың үҙе булмағас ни...

Йөҙөн болоҡһоу баҫты апайҙың. Күрһөнөп ҡуйҙы Аня ла, яңылышыраҡ ысҡындырғанын аңланы. Әсә кеше ул һынлы улын аҡсаға алмаштырырмы?..

— Бурыстарымды түләйем тип килдем әле, знакум, бик күп ярҙам иттең иң интеккән саҡта, рәхмәт инде!

Майкамал апай аҡса һондо Аняға. Уныһы алмаҫҡа ла итеп ҡараны, кире уйланы әммә.

— Улымды һалдатҡа оҙатам, бик кәрәккән саҡ ине. Бәрәңге сәскән ваҡытта орлоҡҡа килерһегеҙ.

— Ҡайһы улыңды оҙатаһың, әллә Васянымы?

— Уны шул, кесе улымды. Ун һигеҙе тулды бит инде.

— Әстәғәфирулла, беҙҙең танышҡанға шул саҡлы ғүмер ҙә уҙып китте-ме ни?!.

— Уҙҙы. Уҙа инде. Һеҙ ырҙынды ҡаҙырға килгәндә ни бары ун биштә генә ине әле. Бына оҙатырға ла ваҡыт етте.

— И, Хоҙайым, иҫән-һау йөрөһөн инде. — Майкамал апай эстән генә уҡынып, битен һыпырып алды.

— Мин дә шуны теләйем көнө-төнө. Атаһы әйләнеп ҡайта алманы, улыма ла бер-бер хәл була күрмәһен, нишләрмен яңғыҙым. — Аня ауыр киҫерә, шулай ҙа өмөт бағлай. — Һуғыш тамамланып килә, немец еренә барып ингәндәр беҙҙекеләр, тиҙәр ҙә ул, кем белә алдағыһын. Их, Вася барып еткәнсе бөтһөн дә ҡуйһын ине шул һуғышы...

— Һуғыш тамамлана тиһеңме, ҡайҙан ишеттең уны?! — Һорағанын һиҙмәй ҙә ҡалды Майкамал.

— Күршебеҙ Харитон ҡайтты бит ике-өс көн элек кенә, яраланып, аҡһап. Ул һөйләне ауыл халҡын йыйып.

— Бирһен Хоҙай!.. Тәкәтте ҡоротто бит, тиҙерәк боғаҙы быуылғыры ҡәһәрҙең!..

Майкамал апай йомошон йомошлап, һорашырын һорашып, белешерен белешеп, ҡайтырға ашыҡты. Аняның хәбәрен еткерһен әле һыуытмайынса ғына. Он, һарыҡ мәсьәләһе сиселмәне, ауылда һатыусы ишетелмәй, баҙарға барырға кәңәш итте знакумы.

Яҡшы хәбәр ҡыйғыр ҡоштан да етеҙерәк оса: беҙҙең ғәскәрҙәрҙең Герман еренә бәреп инеүҙәрен Мөхәмәтйән дә дөрөҫләне. Районлан килгән берәү һөйләгән. Кешеләр күңелгә ышаныс төйнәп, илгә һиллек килеүен бағланы.

Был ваҡытта һуғышта яраланған ирҙәр ҡайтыуы ишәйә барҙы. Ярты йыл элек йәрәхәте артыҡ ҡурҡыныс булмаған Ғосман исемле йәш ир ҙә ҡайтып төшкәйне. Һуғышҡа саҡлы тракторҙа эшләгән кеше ине ул. Кем-кем, Мөғәллим бик һөйөндө быға. Тракторсы ҡыҙҙарҙы өйрәтә-өйрәтә ыҙалар сигеп бөткәйне бит колхоз рәйесе. Нәк Ғосман ише белгес кәрәк ине уға. Күндерҙе фронтовикты: ҡыҙҙарға ярҙамға ебәрҙе. Арыу ғына көйләнеп китте эштәре: йәй буйы тырылдығы сыҡты тракторҙарҙың. Ләкин...

Йәшен йәшәгән, тормоштоң шыйыҡ һурпаһын күп татыған Майкамал апайҙы илтифатлылығы, ярҙамға әҙер тороуы, аҡыл-кәңәштең тейерен генә бирә белеүе өсөн ауылда ил инәһе тип тә атап йөрөттөләр. Шуға ла, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ, уның менән кәңәшләшер, эс серҙәрен бүлешер ине. Бер көндө таң менән Хөршиҙә шаҡыны апайҙың ишеген. Ин, тине Майкамал, ҡыҙ инмәй, мөлдөрәп күҙенә ҡарап тик тора.

— Йомошоң бар инеме әллә, ҡыҙым?

— Бар ине шул, һөйләшергә ине, апай.

— Һөйләшербеҙ. Инһәңсе.

— Юҡ, апай, аҙбар ышығына үҙең сыға алмаҫһыңмы?

Сәйер тойолдо Хөршиҙә Майкамалға. Тиҙ генә кейенеп, аҙбарға сыҡты. Йөҙө һытылған ҡыҙҙың, һүнгән ҡиәфәттә.

— Нимә мәжбүр итте таң менән килергә, ҡыҙым?

Апайҙың күкрәгенә башын терәне, бисара, мышҡылдап.

— Тыныслан, йә, ҡыҙым, берәйһе ҡыйырһыттымы әллә?

— Нисек әйтәйем икән?.. — Тағы һулҡылданы Хөршиҙә. — Мин бит гонаһлы, апай, ауырға ҡалдым.

Бер килке тел тешләне апай, йыуатыу юлын эҙләне, ахырыһы.

— Ауырға ҡалыу гонаһ түгел дә бит... — тип һөйләнде. — Ләкин... буйыңдағыңдың эйәһе кем икән һуң?

— Ғосман инде...Төнгө һөрөүҙә тракторҙы туҡтатты ла йәбеште. Бер ни ҡыла алманым, ебенем дә төштөм...

— Нимә ти һуң үҙе?

— Бер ни ҙә әйтмәй, төшөрт, ҡатыным, балам бар, ти.

— Һин һуң үҙең ни уйлайһың?

— Мин кәңәшләшәм һинең менән, апай, нишләргә хәҙер?

— Эй был донъя... — Баш сайҡаны апай. — Кейәүҙә көн күреп, рәхәтләнеп йәшәр мәлегеҙҙә ана нисек буталанды...

— Беҙгә тигән егеттәр һәләк булып бөттө, кем алһын беҙҙе — егерме биш йәшкә баҫҡан ҡыҙҙы, ҡатынлы ирҙәр ҙә малай-шалай ғына ҡалды, — тип әрнене Хөршиҙә.

— Көйәләнмә, ҡыҙым, ҡасан да яҙмыш яҙҙырыр үҙеңә иш иткәнде... Төшөртәм тип ауыҙ ҙа асма, әсә исеме үҙе ғорурлыҡ, берәү ҙә ғәйепкә һанамаҫ. Тәбиғәт көсө үҙенекен итә барыбер, әсәлек хисе — иң татлыһы, иң матуры... Үҫтер балаңды бына тигән итеп. Һеҙҙе һөйөүселәрҙән, һеҙ һөйәсәктәрҙән һуғыш айырыуын аңламай тиһеңме кешеләр. Ауыҙ асып һүҙ әйтеп ҡараһын берәйһе, үҙем иманын уҡытырмын!

Ярһып һөйләне Майкамал. Ул ярһыны, ҡыҙ баҫыла төштө.

— Рәхмәт, апай, кәңәшеңә, еңел булып китте. — Хөршиҙә, эшкә ҡабаланып, ҡапҡаны асты.

Матур яҙ айы етте. Тирә-яҡ гөл-сәскәгә күмелеп, ер йәмләнде. Быйылғы яҙҙа һулыштар иркенәйгәндәй. Кешеләр бына-бына ҙур байрам килерен көтә. Килде ул көн, дүрт йыл тилмерткән Еңеү яҙының балҡыштары нур бөрктө.

Был көндө бөтә халыҡ — олоһонан кесеһенә саҡлы — ауыл советы янына эркелде. Уҡыусы балалар бәләкәй генә ҡыҙыл флагтар күтәреп саф менән урамдан үтте.

— Йәшәһен Еңеү, йәшәһен иптәш Сталин!

Кемдер шулай ҡысҡырыуға «Ур-ра!» яңғыраны.

Майкамал апай ҙа халыҡ araһында, әлбиттә. Бөтәһен дә күҙҙән үткәрә: аҡһаҡ-туҡһаҡ та йылмая, аяғын күтәрә алмағандар рәхәтләнеп бейешә. Бер яҡ ситтәрәк, бала күтәреп, Хөршиҙә баҫҡан. Ул Майкамал апайҙы сәләмләп, ҡул болғаны. Апай ҙа яуапланы баш ҡағып. Кинәнеп баҫҡан йәш әсә Хөршиҙә, ошо ерҙең хужаһы рәүешендә. Янынан үтеүселәр кескәй сабыйҙы һөйөп-һөйөп ала. Еңеү яҙында донъяға килгән тәүге бала ине ул.

Майкамал янына туйтанлап Мәүлиҙә әхирәте килеп баҫты.

— Яңғыҙым өйҙә бер ни ишетмәй ятҡанмын. Ҡараһам, халыҡ йүгерешә, әллә берәй нәмә өләшәләрме тиһәм...

— Өләшәләр... бәхет, — тип яуапланы Майкамал.

— Оҙаҡламай һуғышҡа китеүселәр ҙа ҡайтыр инде. — Һаман үҙенекен һипләне Мәүлиҙә.

Ошо секундта ҡапыл яҡты ҡояшты ҡара болот ҡапланы, әйтерһең, күҙ алдары томаланды Майкамалдың. Кемдер ҡайтыр, кемдер юҡ... Иҫәңгерәп, баш һуҡҡан яҡҡа — Ҡыйҙаш буйына атланы әсә. Ҡайғыларын һыуға ағыҙһын, исмаһам...

Әсә йылға буйында оҙаҡ йөрөнө. Берәм-берәм улдарын хәтеренән үткәрҙе. Улар һәр береһе, һыуҙан килеп сыҡҡан экиәт батырылай, әсә алдында кәүҙәләнде: береһе лә төҫ ташламаған, киткән ваҡыттарындағы кеүек, таҙа буй-һынлы, көслө быуынлы, тулҡын ярып бер-бер артлы күтәрелделәр ҙә, беҙ бында, тигәндәй, ҡул иҙәйҙәр. Үҙ яндарына әллә әсәне лә саҡыралармы?.. Әллә ысынлап ҡайтҡандармы ошо мәңге ҡәҙерле Ҡыйҙаш буйына?.. Әсә, тертләп, күҙҙәрен сытырлатып йомдо ла, бер арауыҡ ваҡыттан яңынан керпектәрен асты. Һыу өҫтө тып-тын, кеше түгел, хатта бәләкәй генә ҡош та күренмәй. Нимә эшләгән был Ҡыйҙаш, йотҡанмы әллә бар тереклеген, һыу төбөнә йәшергәнме?.. Ҡыр ҡаҙҙары ла ҡайтмай хәҙер, ике-өс йыл инде күренгәндәре юҡ. Әллә юлда уларҙы ла фашист атып төшөрөп бөттөмө?.. Туҡта!.. Майкамал әллә һаташамы?.. Их, ниңә генә күҙен йомдо икән, йоммаһа, әле лә улдарын күргән булыр ине. Юғалтты хәҙер, юғалтты һағынып талсыҡҡан ҡәҙерле йөрәк бәғерҙәрен...

Майкамал апай ирекһеҙҙән арыраҡ атланы. Һыу алыу урынына барып етте. Ҡанатлы йәшлеге, ҡыҙ сағы кәүҙәләнде. Шакиры менән тәүге осрашҡан урындары анауында, баҫма урынында. Баҫма күптән юҡ, емерелеп һыуға аҡҡан. Икенсеһен яһап ҡуйыусы табылманы. Һуғыш ваҡытында уның ҡайғыһы инеме ни?.. Осрашыр баҫмалар ҙа юҡ, һыу өҫтөндә башҡаса таныш һындар ҙа күренмәй, бөтәһенә лә юлдар ябылған... Ҡыйҙаш үҙе лә тарайып, тағы ла кесерәйеп ҡалғандай.

Арттан шыптырлап кемдер килгәненә һиҫкәнеп, әйләнде Майкамал. Ә-ә, был Мәүлиҙә икән, нишләп йөрөй бында?

— Өйҙә ҡайтайыҡ, әхирәт, Мөхәмәтйән улың эҙләй һине, — тип Мәүлиҙә Майкамалды әйҙәне.

Өйҙә бер нисә фронтовик, Мөхәмәтйәндең ҡорҙаштары, бергә үҫкән егеттәр. Мөхәмәтйән, ҡулдарын ыуып, өҫтәл тирәһенә ҡыҫтай дуҫтарын.

— Ҡунаҡтар килде, ә һин әллә ҡайҙаһың, әсәй. Берәй нәмә юҡмы өҫтәлгә ҡуйырға?

— Бар, улым, кисәгенән ҡалған аш бар ине.

— Бик шәп була ул ҡалған аш, — тип көлөшә барыһы ла.

Әсә, йылмайып, һауыт-һаба ултыртты, ваҡ ҡына телемләп икмәк килтереп ҡуйҙы. Ҡараны ла, һый шыйыҡ һымаҡ күренде.

— Әллә бер тауыҡ салып индерәһеңме, Мөхәмәтйән, — тине.

— Була ул, әсәй, һә тигәнсе. Еңеү хөрмәтенә бер нәмә лә йәл түгел.

Бер-ике сәғәттән өҫтәл тулыланып, түңәрәкләнде. Нәҡ яңы аш өлгөрөүгә Мөғәллим дә килеп инде.

— Бына ҡайҙаһығыҙ икән, әйҙәгеҙ, ҡойоғоҙ әле миңә лә.

Идара рәйесе оло байрам менән ҡотлап, башҡаларҙы ла ҡыҫтап, бер стаканды төбөнәсә ялтыратты. Теле йомшарып, былай тип ҡуйҙы:

— Ошондай байрамды ҙурлап колхозда үткәрәһе ине лә бит, кәңгелдәк кенә шул әле хужалығыбыҙ.

— Килер ул көн, Мәғәллим, үткәрербеҙ, киләһе көҙгә — һуяһы үгеҙгә, — тине кемдер.

— Байрам өсөн йылдың ниндәй ваҡыты ла ярай ул, тик онотмайыҡ яуҙа ятып ҡалғандарҙы, — тип өҫтәне йәш фронтовик.

— Һәм тылда көн-төн бил бөккәндәрҙе. — Бынығын Мөхәмәтйән йөпләне.

— Ысынлап та, тыл фронтында ла аяуһыҙ көрәш барҙы. Тылы юҡ армия еңеүгә өлгәшә алмаҫы иҫбатланды хәҙер: ана ниндәй донъя емереп килгән фашист армияһы ла пыран-заран килде... Әйҙәгеҙ, тылда уяу торған һалдат, һалдаткалар өсөн. Майкамал апай, һеҙҙең хөрмәткә. — Колхоз рәйесе йәнә стаканын күтәреп, апаруҡ нотоҡ тотоп ташланы. Икенсеһен һалып ҡуйғас, китергә ҡабаланды.

— Сәсеүҙе тиҙләтәһе бар, эш муйындан... Һеҙ ултырығыҙ иркенләп, байрам итергә хаҡығыҙ бар, — тип сығып китте.

* * *

Йылдарҙы йылдар ҡыуҙы, бер-береһен тоторға тырышҡан һымаҡ сабышып. Тормош та, бөтөнләй үк яҡтырып китмәһә лә, яҡшыға тәгәрәне. Колхозда бер аҙ техника ла арта башланы. МТС трактор, комбайндарҙы күберәк ебәрә. Ярайһы уҡ һауыға төшкән Мөхәмәтйәнде трактор бригадаһының хисапсыһы итеп эшкә ҡуштылар. ДТ кеүек ҙур тракторҙарға МТС-тың үҙ трактористары беркетелгән.

Трактор бригадаһы бер нисә ауылды хеҙмәтләндерә. Күрше ауылдан Миңнеямал исемле матур ғына ҡыҙ менән танышып алды Мөхәмәтйән. Күңелгә ятышлы, гел йүгереп кенә эшләп йөрөй. Уның менән осрашырға тартылып ҡына торҙо Мөхәмәтйән, һөйләшеүгә лә ихлас ине күҙ атҡан ҡыҙы. Һөйләштеләр, вәғәҙәләштеләр. Әсәһе лә олоғайған, бит-маңлайын тәрән һырҙар баҫҡан, ярҙамсы кәрәк уға, килен кәрәк. Әсә лә күптән шуны теләй, ара-тирә белдереп тә ҡуя улына. Ушһыҙ түгел егет, күңеленә һала бара, һәр эштең үҙ ваҡыты, йәнәһе. Бына ниһайәт, әсәкәйен киленле итте.

Әминә һуғыштан һуң да мәктәптә йыйыштырыусы эшен дауам итте. Нурияһы беренсе класҡа уҡырға төштө. Әсәһе менән нәнәһе уны етәкләп, һандуғас шикелле сутылдашып, мәктәп ишеген астылар.

— Ошо тар мәктәп һуҡмағы оло юлдарға илтһен, ҡыҙым, — тип теләк теләне Әминә.

— Һәйбәт уҡы, балам. — Нәнәһе ҡурсаҡтай ғына ейәнсәренең арҡаһынан тупылдатып һөйҙө.

Майкамалдың өйөндә ике килен, улы, ейәнсәре — арта ғаилә, яңынан тулылана. Килендәре һөйкөмлө, аяҡтары төклө — өлтөрәп торалар әсә өсөн. Шулайлыҡҡа шулай ҙа ул, Әминәнең моңһоуланыуы һиҙелеп-һиҙелеп ҡала, ирен юҡһыналыр, күрәһең. Йыш ҡына Ленинградты иҫкә ала. Ҡәйнәһенә лә һиҙҙереп ҡуйҙы бер көндө.

— Ленинградта тормош көйләнә икән, барып, Сафаның ҡәберен эҙләргә микән әллә?

— Яҡшыланыуын ҡайҙан беләһең ул ҡаланың? — Әсә һағая-һағая һорашты. Ул Кәпәйҙә эшләгән ағаһы янына шул яҡтан буйҙаҡ фронтовик киле-

үен, Әминә менән осрашыуҙарын яҙа-яҙа ғына ишетеп ҡалғайны инде. — Әллә анау ҡунаҡ фронтовиктан белештеңме?

Йәшермәне килене, дөрөҫләне.

— Ул һөйләне. Мине үҙе менән алып китергә димләй. Нишләйем икән, әсәй?

Тәндәре сымбырланы әсәнең, арҡа үҙәгенән боҙ шыуышҡандай. Ниндәй кәңәш бирергә быға?

— Үҙең нисек ҡарайһың һуң, барғың киләме?

— Килә шул, Сафа менән парлашып йөрөгән урамдарҙы күргем килә. Унан, миңә лә үҙ һөнәремдә эшләргә кәрәк бит. Мин күреп кенә ҡайтмаҡсымын. Бына аҡса ла бирҙеләр хеҙмәтемә.

— Барырһың да ул, ҡайтырһың микән?

— Мин уға бер нимә лә вәғәҙә итмәйем бит, юлда иптәш булһын тип кенә эйәрәм.

Майкамал апайҙың да улының артабанғы яҙмышын белгеһе килә ине, ниндәй күңеле менән әсә ҡаршы төшә алһын, хәйерле юл теләргә генә ҡалды килене менән ейәнсәренә. Оҙаҡламай әйләнербеҙ тип, ҡосаҡлашып хушлаштылар. Нурия бигерәк яғымлы итеп мамыҡтай йомшаҡ ҡулдары менән нәнәйенең муйынынан ҡыҫып ҡосаҡлап, бит алмаһын ҡытыҡлатып, нескә ирендәрен тигеҙҙе. Эй үпте нәнәйенең ике яҡ битен, үҙе аҡыл өйрәтте:

— Ҡартайма, нәнәй, мин ҡайтҡансы. Ана, битең, маңлайың бөҙрәләнгән дәһә.

Ҡысҡырып та көлөрһөң, бала бит-йөҙ сырышыуҙы бөҙрәләнеүгә оҡшатҡан.

— Иҫән-һау йөрөгөҙ, балам, көтәм ҡайтыуығыҙҙы.

Әсә йөрәге барыбер ниҙер һиҙенеп, эске әсенеү менән болоҡһоп оҙатты уларҙы.

Бына китеүҙәренә айҙан да ашыу ваҡыт үтте, һаман хәбәр юҡ Ленинградтан. Әсә үҙенсә фекерләй: килгәндәге кеүек, барғанда ла айлап ваҡыт кәрәктер, ахырыһы. Килене, бер ай тирәһе үтте юлда, тигәйне бит тәүге осрашҡанда, шуны хәтерләп, борсолоуын бер аҙ баҫа. Ләкин тағы ла хәтһеҙ көндәр тәгәрәне, уҡыу башланырға ла күп ҡалманы. Көткән хат яңы килеп төштө Әминәнән. Килене бөтәһен дә аңлатып яҙған. «Сафаның вафатына ышандым инде, әсәй, ул ерләнгән «Туғандар ҡәберлеге»н ҡарағас, шигем ҡалманы. Беҙ Ленинградта йәшәргә ҡарар иттек, эшемә урынлаштым, һөйөнөп ҡаршыланылар. Һеҙҙе һағындыра, әлбиттә, бигерәк тә Нурия юҡһына, «нәнәйем, нәнәйем» тип, көн-төн теленән төшөрмәй. Шулай ҙа ошонда йәшәү яҡшыраҡ беҙҙең өсөн. Беренсенән, Сафаның рухына яҡыныраҡ булабыҙ, икенсенән, яратҡан эшем бар. Ауылда яңғыҙ ҡоштай нисек ғүмер кисерергә... Ауыр булһа ла, үҙ-үҙемде еңеп, Фәүзигә кейәүгә сығырға күндәмлек ҡылдым. Ул — һәйбәт кеше, күңелдәребеҙ иш килде, буғай, Нурия өсөн дә өфөлдәп тора... Үпкәләмә, әсәй, кисер беҙҙе, һуңлап булһа ла, рөхсәтеңде һорап үтенәм. Һин миңә иң шәфҡәтле әсә инең, ғүмерлеккә әсә булып ҡалаһың. Беҙ һине бер ваҡытта ла онотмабыҙ, ташламабыҙ, әсәй. Ҡәйнешкә, апһынға рәхмәт яҡты йөҙҙәре, матур һүҙҙәре өсөн, бәхетле йәшәһендәр! Бөтәгеҙгә лә иҫәнлек-һаулыҡ, бәхет, оҙон ғүмер теләп ҡалабыҙ. Хәҙергә хушығыҙ!»

Хатты ҡат-ҡат уҡытып, әсә хәйерле теләк менән амин тотто.

Илленсе йылдарҙа тормош арыу ғына яҡшыра төштө. Эшләгән таяҡ башына, күпмелер грамдан иҫәпләп, иген дә бирә башланылар. Өй беренсә мөстәнләнеүселәр, сабата яһаусылар шөйлә кәмене, тора-бара бөтөнләй юғалды.

Мөхәмәтйәнде артабан колхозда бригадир, колхоз рәйесенең хужалыҡ буйынса ярҙамсыһы итеп үрләттеләр. Миңнеямал килененең тупырлашып балалары тыуҙы; әсә уның миһырбанлығына баштан ашып ҡыуанды. Уңған ҡатын — ун ырыҫ, тигәндәр, тормош тотҡаһын тотоусыға әйләнде ул. Татыу тормошта йәшәп ятыу өҫтөндә ғаилә.

Көтмәгәндә, Мөхәмәтйән ағайға төбәп, бер хат килеп төштө. Адресын ҡарау менән аңланы ул: бәй, был бит Сәхәповтан! Күпме бергә яу юлы үткән фронтташы, командиры яҙған.

Ҡабаланып асты конвертты яугир: ниҙәр яҙа, ниндәй хәлдәләр икән? «Күптән түгел фронт блокнотынан адресыңды табып алдым. Иҫәнһеңдерме, юҡтырһыңмы һин, Латипов, уныһын белмәйем. Был хатты ауылығыҙҙа, моғайын, берәйһе алып уҡыр, тигән уйҙан яҙам. Бәлки, үҙеңә үк уҡырға насип булыр... Һин, ҡыйыу артиллерист, яраланып, госпиталгә эләккәс, беҙ ҡанлы һуғыш утында ҡайнауыбыҙҙы дауам иттек. Мәскәү янында фашистарҙы ҡыйратыуыбыҙ (унда һинең дә өлөшөң бар, ошо изге ергә тамды ал ҡаның) оло еңеүгә тәүге юл ярыу ине. Унан ары фашист ғәскәрҙәре, аяуһыҙ ғәрәсәттәр ҡуптарһа ла, килгән юлынан сигенә барҙы, еңелеүгә дусар ителде. Уныһын төпсөрләп яҙып тормайым, иҫән булһаң, үҙеңә лә мәғлүмдер. Үҙебеҙҙең ҡайһы бер иптәштәрҙең хәлен генә аңлатмаҡсымын.

Беҙгә яңынан, теге ваҡытта фашистың тимер ҡоршауынан ҡотолоп, үҙебеҙҙең частарға килеп ҡушылған юлдан үтергә тура килде. Теге саҡта шул юлды бер ай самаһында гиҙеп сыҡҡайныҡ, кире яҡҡа фашист йыртҡыстарын туҡмай-туҡмай барыу өсөн йылдар кәрәк булды. Смоленск урмандарында һуғышта беҙ, беҙ тигәнем — Трофимов, Варя, мин. Ҡәйүмовты юғалттыҡ. Үткер егет ине, бик йәл. Ишморатов хаҡында үҙең дә ишеткәйнең инде. Белоруссияла, нәҡ Варвараның ауылы тирәһендә, бәлә миңә лә килеп ҡағылды: пулемет уң аяғымды селпәрәмә килтереп, теткеләне. Операция өҫтәлендә аяғымды ҡалдырырға тура килде, госпиталдә оҙаҡ яттым. Беҙҙең ирле-ҡатынлы икәнде белгәс, Варвараны ла армия хеҙмәтенән ҡотҡарып, миңә шәхси шәфҡәт туташы итеп беркеттеләр. Госпиталдә беҙ законлы рәүештә никахҡа индек. Хәҙер ҡайҙа йәшәргә тигән һорау килеп тыуҙы. Уның да бер кеме юҡ, үҙең беләһең, минең дә. Варвараның ауылын барып ҡарарға уйлаштыҡ. Бәлки, өйө һаҡланғандыр? Ауылдың нигеҙе лә ҡалмаған, тик күмер генә өйөлөп ята өйҙәр урынында. Йөрөй торғас, ике ҡарсыҡ килеп сыҡты алдыбыҙға. Бына ҡыуаныс, тип уйланыҡ башта: улар — Варвараны, Варвара уларҙы танының. Ҡарсыҡтар кемуҙарҙан шуны һөйләнеләр: Варвара башына балта менән яра һуғып фашист офицерын дөмөктөрөп ҡасып киткәс, уны эҙләп таба алмай, ауыл халҡын язаларға тотонғандар, йыртҡыстар. Ҡасҡаны ҡасып ҡотолған, ҡасмағанын аҫып, атып юҡ иткәндәр, йәшерәктәрен Германияға һөргәндәр, ауылды тотошлай үртәгәндәр. Был ике ҡарсыҡ мөгәрәп эсенә төшөп ҡотолған. Хәҙер бер ҡайҙа ла китмәҫкә, беҙҙең киләсәк урын ата-бабалар ҡәберлегендә, тип, зем-

лянка һымаҡ бер соҡор эсендә йәшәп ятыштары. Тик кем ерләр икән беҙ-ҙе, тигән зар-хафаларға батҡандар, меҫкенкәйҙәр.

Варвара, ысынлап та, ауылдаштарын күреп ҡыуанғайны, хәҙер илап, намыҫ ғазабына күмелде. Ауылдаштары алдында үҙен ғәйепле тойҙо...

Артабан беҙ Витебск ҡалаһына юлланып, өлкәнең хәрби комиссариатында был хәлде һөйләп бирҙек. Әбейҙәрҙе интернатҡа урынлаштырырға ҡарар иттеләр. Беҙгә, мин элекке гвардия майоры, хәҙер беренсе төркөм инвалид, Варвара ла гвардия сержанты булараҡ, ошо ҡалала фатир бирҙеләр. Бер ул үҫтереп, көн күреп ятҡан еребеҙ. Тик Трофимовтың яҙмышын белмәйем. Һиндә адресы һаҡланһа, яҙып ебәр әле беҙгә лә. Үҙеңә иҫәнлек, бәхетле тормош теләйбеҙ, ҡунаҡҡа саҡырабыҙ, Латипов дуҫҡай!»

Бына шулай күңел хәтирәләрен ҡуҙғатырлыҡ хат алды Мөхәмәтйән ҡурҡыу белмәҫ командиры Әлтәф-Альберт Сәхәповтан. Ул шунда уҡ яуап ебәрҙе. Барырға вәғәҙә итте. Ләкин бара алманы, үпкәһендәге снаряд ярсығы ирек бирмәне. Оҙаҡ йылдар хаттар аша ғына һөйләштеләр.

Майкамал апайҙы, балалары бағышында бына тигән йәшәп ятҡанда, ҡапыл ғына сырхау баҫты. Ауылдаштары, өлкәндәр, хәйер, өлкәндәр генә түгел, йәштәре лә хәлен белергә йыш инеп йөрөнө. Аня ла килеп китте бер көндө.

— Әйҙүк, знакум, түрҙән уҙ, — тип, ҡанат йәйгәндәй ҡаршыланы әбей, теремекләнеп.

— Ауырығаныңды ишетеп килдем, подруга, хәлеңде беләйем, тинем.

Әбейҙең беренсе һорауы шул булды:

— Улың ҡайта алдымы?

— Ҡайтты. Иҫән-һау. Германияла ете йыл хеҙмәт итте. Хоҙай һаҡлаған-дыр, һуғыш бөткәс барып ингәндәр, — тип аңлатты Аня.

— Үҙең менәнме хәҙер?

— Үҙем менән. Кәләш алып ебәрҙе инде, бик мөхәббәтле килен.

— Бик шатмын, знакум, бәхетле йәшәгеҙ!

Бер көндө Хөршиҙә лә балҡып килеп баҫты Майкамал апай алдына. Улын да етәкләгән. Үҙе йылмая,ниҙер әйтергә теләй.

— Һин нисек йәшәйһең һуң, ҡыҙым? — тип апай үҙе һораша башланы.

— Һәйбәт, инәй, бына улым да уҡырға төшөргә әҙерләнә.

Ҡатындың «инәй» тип өндәшеүе Майкамал әбейҙең йөрәгенә йылы май-ҙай тамды, ҡабатлап һораны әбей:

— Инәй тинеңме?

— Эйе, инәй тинем. Минең бит үҙ инәйем күптән был донъяла юҡ, һеҙҙе күрәм инәй урынына.

— Рәхмәт, балам!

— Миңә тағы бер фатиха бирмәҫһеңме тип килдем әле.

— Берәй яңылығың бармы әллә?

— Бар, инәй. Беҙ бер егет менән тормошланырға уйлағайныҡ, фатиха алырға тип тотҡарланып торабыҙ. Йолаһы бар бит.

— Кем һуң ул? — тип һорай һалды әбей, — мин беләмме уны?

— Белмәйһеңдер. Ул — тракторист, МТС тракторы менән беҙҙә эшләй.

— Әле ҡайҙа, эштәме?

— Бында, инәй, соланда ғына, минең саҡырыуымды көтә.

— Бәй, кейәү кешене тышта ҡалдыралармы ни, инһен, инһен бында.

Хөршиҙә яғымлы тауыш менән өндәште:

— Шәрифулла, ин өйгә, инәй саҡыра.

Матур һынлы ир килеп инде. Ул әбей менән итәғәтле иҫәнләшеп, арҡаһынан һөйҙө.

— Хәлең нисек, инәй? — тип, өлкәндәрсә баҫалҡылыҡ менән өндәште.

— Бына шул инде Шәрифулла беҙҙең, — Хөршиҙә бер нимәне йәшермәй, таныштырып үтте. — Яңғыҙ. Үҙе һуғыштан ҡайтҡансы ҡатыны районның бер уполномоченныйына эйәреп китеп, барлыҡ донъяһын ташлаған. Кире әйләнеп ҡайтыуын ҡайтҡан, әммә Шәрифулла хыянат иткән ҡатынды кисерә алмаған. Үҫкән улы бар.

Майкамал апай һынаулы ҡараш ташланы ла, ҡәнәғәтлек билдәһе күрһәтеп, асыҡ йөҙ менән йылмайҙы.

— Дөрөҫ эшләгәнһең, улым, хыянатсы ҡатынды кире алмайынса. Һеҙгә килгәндә, хәйерлегә, балалар, береңбаш булһа, береңтүш булһын, Хоҙайҙың изге сәғәтендә, — тине әбей быларҙы ҡаршыһына баҫтырып. Тегеләр шатланып ҡабул итте уның һүҙҙәрен.

— Рәхмәт, инәй, сәләмәтлек ҡунһын үҙеңә... Бына бәләкәй генә бүләгебеҙ ҙә бар, күстәнәс тә килтергәйнек. — Хөршиҙә әбейҙең башына сәскәле яулыҡ ябындырҙы, өҫтәлгә сәй-шәкәр ҡуйҙы.

— Татыу ғүмер, яҡты юл теләйем, балалар.

Күпме кеше изге теләктәрен белдерҙе Майкамал әбейгә. Улар ҡыуаныс булып күңеленә инде. Ҡыҙғаныс, эргәһендә Мәүлиҙә әхирәте генә юҡ, муйыл йыйып йөрөгәндә, бер суҡ ботаҡты эйергә үрелеп, өҙлөгөп, оҙаҡ та ятмай вафат булды. Ҡәҙерләп ер ҡуйынына тапшырҙылар.

1953 йылдың яҙ миҙгеле килеп етте. Март башынан уҡ буран ҡотороңдо. Йылы, еүеш ырашҡы яуҙы сыптырлап. Ҡыш менән яҙ, миҙгел биләү өсөн көрәшкән кеүек, бер-береһе менән тартҡылашты. Шуның шикелле, Майкамал әбейҙең дә бер ҡорошто, бер янды тәне. Ҡан йүгергәндәй итә лә, быуылып ҡала. Ғүмер ебенең өҙөләр-өҙөлмәҫ сағы ине был. Һәй, ғүмер, ғүмер, өҙөлә шул бер ваҡыт килеп. Майкамал әбей ҙә бигүк оҙаҡ ятмай донъялыҡтан китеп барҙы...

Уны ерләгән көндө аҙна буйы ҡоторған буран ҡапыл туҡтаны. Йылы, ҡояшлы көн тыуҙы. Ауыл халҡы дәррәү күтәрелде әсәне һуңғы юлға оҙатырға. Буран баҫылып, көн асылһа ла, әллә ниндәй шомло ине. Бер кем дә өндәшмәй, баш эйеп бара. Юҡ, Майкамал әбейҙең вафаты шундай йән ҡыҫҡыс шом килтермәне, ошо көндө ил атаһы тип иҫәпләнгән Сталинды ла ерләү бара ине. Ә бында, Кәпәй-Ҡобауҙа, ил инәһе — Майкамал әбей ерләнә. Бер кем дә артыҡ һүҙ өҫтәмәне йыназаһында, уның тауҙай ауыр ҡайғы йөкмәгәнен иҫкә алып, тормош юлын байҡаманы, йәнең — йәннәттә, тупрағың еңел, ятҡан ерең йомшаҡ булһын, тигәндән башҡа. Шулай ҙа кемдер ишетелер-ишетелмәҫ әйтеп ҡуйҙы:

— Беҙҙең әбей Сталиндан бер йылға ғына алда тыуған, бер көндө ерләйбеҙ...

## Герой-Әсә

Һуғыш хәтер юймаҫ яраларын ҡалдырҙы. Йылдар үткән һайын уның шаңдауы нығыраҡ, анығыраҡ ишетелә торҙо. Быуындар алмашына барҙы, ләкин миллиондарса һәләкәттәр килтергән яуыз фашизмдың иҫ киткес йыртҡыслыҡтарын һәр йөрәк ҡәһәрләп иҫкә алды. Иле тиеп һиллеккә китеүселәрҙең данын мәңгеләштереү туҡталманы. Иң-иңдәренә мәғрүр һәйкәлдәр ҡалҡты. Уҡыусы балалар тырышлығы менән мәктәптәрҙә дан музейҙары асылды. Баҡсалар, скверҙар эшләнде. Ҡорбандарҙың исемдәре яҙылған обелискылар барлыҡҡа килде. Еңеү көнөндә яугирҙарҙы иҫкә алыу, иҫәндәрен хөрмәтләү матур йолаға әйләнде. Йыш ҡына, айырыуса мәктәптәрҙә, һуғыш ветерандары менән осрашыуҙар ойошторолдо. Кәпәй-Ҡобау уртаһында ауылға йәм биреп әллә ҡайҙан балҡып ултырған ике ҡатлы мәктәп төҙөп ҡуйҙылар. Йыш ҡына мәктәпкә Мөхәмәтйән ағайҙы ла осрашыуға саҡыралар. Ағай үҙенең башынан кискәндәрен һөйләй, һуғыш ҡырҙарында ятып ҡалған ағаларын иҫкә төшөрә. Улар батыр яугирҙар булған, ә уларҙы үҫтереп, илгә тоғролоҡ тәрбиәләүсе кем һуң? Әсә түгелме ни?! Тимәк, һигеҙ улын ил һаҡларға ебәргән Әсә батырҙарҙан да юғарыраҡ баһаға хаҡлы.

Бына ошо мәктәптә тәүге тапҡыр Майкамал апайға ҡарата «Герой-Әсә» тигән һүҙ яңғыраны. Уның исемен дә мәңгеләштереү фарыздыр. Был теләкте мәктәп, ауыл халҡы күтәреп алды.

Мәктәп директоры Мөхәмәтйән ағайҙы өндәне:

— Бар әле, ағай, райкомға, һиңә килешә ул, ни тиерҙәр икән?

Китте ағай район үҙәгенә. Райком секретарын көтөп алды. Ауыл халҡының фекерен белдерҙе.

— Яҡшы фекер булмаҡсы, — тине секретарь, — ләкин кәңәшләшергә кәрәк.

Кәңәшләшеү оҙаҡҡа барманы. Шундайыраҡ фекер тупланды:

— Батырлыҡ ул һуғышта ғына яуланмай, тылдағы ҡаһарманлыҡты ла күрһәтә белергә кәрәк. Әйтәйек, Майкамал апай кеүектәрҙе.

Секретарь тәҡдимдәрҙең кәрәклеһен һөҙөп ала белгән кеше ине, шул уйҙы тормошҡа ашырыу ниәте тоҡандырып ебәрҙе үҙен.

— Нисек мәңгеләштерәбеҙ, һәйкәл ҡойҙортайыҡмы?

Уйлаша торғас, стела яһатырға ҡарар ҡылынды. Районда оҫта рәссам йәшәгәнлеге лә асыҡланды, ул — Владимир Иванович Плотников. Уға хәбәр ебәрҙеләр. Плотников, оҙаҡҡа һуҙмай, килеп тә инде секретарға. Саҡырыуҙың сәбәбен аңлаттылар.

— Стела эшләгәнегеҙ бармы, Владимир Иванович? — Кеселеклек менән һораны секретарь.

— Эшләп ҡарарға кәрәк. Тырышырмын, — тине рәссам.

— Оҫта ҡулда ябай таш та балҡып, нурланып китә, һеҙгә ышанабыҙ, — тип дәртләндерҙе рәссамды секретарь.

Плотников Мөхәмәтйән ағайҙарға килеп, Майкамал апайҙың фотолары араһынан береһен һайланы. Фото тигәс тә, улар бер-ике генә, кем ул замандарҙа фотоға йыш төшһөн инде. Ә урынға килгәндә — иң һәйбәте мәктәп алдында. Унан кеше өҙөлмәй, балаларҙа ватансылыҡ хисе тәрбиәләү өсөн дә яҡшы.

Стела бөтәһенә лә оҡшаны. Уны асыу тантанаһында райондан да байтаҡ түрәләр ҡатнашты. Иҫтә ҡалырлыҡ митинг ойошторолдо. Мәктәп алдында ил инәһе — Герой-Әсә һыны ҡалҡып сыҡты. Стела ҡуйылған майҙансыҡта матур баҡса барлыҡҡа килде, зауыҡ менән эшләнгән клумбаларҙағы сәскәләр күҙ яуын алып, тирә-йүндә үҙенә тартып, балҡып ултыра.

Был баҡсаның шундай күркәме:
Ожмахҡа тиң бында ер йәме!
Нәфис гөлдәр баға күҙеңә,
Ай нурҙарын яға йөҙөңә.
Был баҡсала шундай йәшеллек:
Япраҡ эстәренә йәшенеп,
Ҡосаҡлап ал ап-аҡ ҡайынды,
Хәтерлә лә йәшлек сағыңды.
Был баҡсала йәнле бөтәһе:
Йәмгә тулы һәр бер иртәһе,
Ҡоштары бар сут-сут һайраған,
Ошо ерҙе генә һайлаған.
Был уңғанлыҡ булыр кем эше:
Баҡса тулы татлы емеше,
Алтын ҡулдар бында ҡағылған,
Бәрәкәтле ергә табынған.
Мәктәп, мәктәп!
Баҡса түрендә
Ултыраһың балҡып һәр көндә;
Солғанып та бала шауына,
Һин әйҙәйһең белем тауына.
Мәктәп юлы таҡыр, тап-таҡыр,
Шымартҡандар эҙҙәр, яп-ялтыр,
Ауыл халҡы шунда тартыла,
Килә бында йәше-ҡарты ла.
Баҡса биҙәй мәктәп урамын,
Саф сәскәләр менән уралып,
Һәр иртәлә Әсә ҡаршылай,
Әйтерһең дә һаҡта ул шулай...

— Һаумы, батыр улдар үҫтергән Әсә!
— Ил инәһе, хәйерле иртә!
— Һинең яҡты рухыңа табынабыҙ, Герой-Әсә!

*2001—2004 йылдар.*